✓ ***Кешенең аҡыл туплауға өс юлы бар: уйланыуҙар юлы - быныһы иң изгеһе; башҡаларға оҡшарға тырышыу юлы - быныһы иң еңеле; үҙ тәжрибәң менән яуланған юл - быныһы иң ауыры.***

***(Конфуций).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№24 (442)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Дошманың бысағы менән...**

кейеҙ киҫ



3

**Музыка халыҡтарҙы дуҫлаштыра...**

ә күршеләрҙе дошманлаштырыуы мөмкин



5

**Йылға башында йәшәп тә..**

һыуға сарсай халыҡ



6

**Сәхәбәләр - Башҡорт ерендә**



12-13

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## "Рус түгелмен, ләкин рәсәйлемен" тигән ҡағиҙә инде ҡаныбыҙға һеңеп бөткән, әммә ҡайһы бер ғалимдар һәм сәйәсмәндәр уны яңынан көн лозунгыһы итеп күтәрә. Был "велосипед уйлап сығарыу"ға бәрәбәр түгелме?

***Рәшит ШӘКУР, шағир, филология фәндәре докторы, профессор:*** Эйе, беҙ рәсәйлебеҙ. Совет кешеләре лә булдыҡ. Әле килеп академик В. Тишковтың Рәсәйҙә йәшәгән бөтә 158 этник төркөмдө берләштереп, "Рәсәй милләте" уйлап сығарырға йыйыныуын аптыраған өйрәктең арты менән һыуға сумыуы тип ҡарарға кәрәктер. Рәсәйҙә аҡыллы милли сәйәсәт алып барылмаған, ниндәйҙер башватҡыстар уйлап сығарырға кәрәктер инде, күрәһең. Өҫтәүенә быының менән халыҡтың ауыҙын ябып ҡуйыу ҙа еңелерәк. Ярай, бер яҡтан, был Рәсәй патриотлығы тәрбиәләүҙәге бер алым да булһын, ти, тик был атама ғына кеше күңелендә ысынлап та патриотлыҡ тәрбиәләй аламы һуң? Был бит яһалма ысул. Донъяла бер ниндәй яһалмалыҡ та оҙаҡ йәшәй алмай. Икенсенән, бәлки, был махсус эшләнәлер. Халыҡ фекерен аҙаштырыр, дөрөҫ юлды күрһәтмәҫ өсөн. В. Тишков, академикмын, тиһә лә, унын һығымталарының академиктарса фәнни ҡараш менән бер уртаҡлығы ла юҡ, был примитив фекер йөрөтөү. Бындай "теория"ның хәҙергеһе лә, киләсәге лә юҡ. Әгәр ҙә ябай халыҡ быының яһалма ниәт икәнлеген аңлай икән, ул академик кимәлененң ниндәй икәнлеген дә асыҡ күреп тора. Халыҡтар, аҙ һанлымы ул, күмәкме, булған, бар һәм буласаҡ. Уларҙы бер ниндәй ҙә сиктәргә ҡыуып индереп, ҡамап тотоп булмай.

Үҙебеҙҙең милләткә килгәндә, З. Вәлидиҙең "беҙ ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа түгел, беҙ - башҡорттар" тигән юлдарын ҡабатлағы килә. "Меңле башҡорто", "башҡорт татары", йәки "татар башҡорто" тип яһалма рәүештә бүлгеләп, милләтте тарҡатыу юлында тора бәғзе берәүҙәр. Беҙ былай ҙа рәсәйлеләр, шуға күрә беҙҙе яһалма терминдар менән бергә уҡмаштырып тотоуҙың бер мәғәнәһе лә юҡ.

Һүҙемде үҙемдең шиғыр юлдары менән тамамлайым.

Ваҡ халыҡтар, юҡ, түгел
һеҙ ваҡ балыҡтар
Акулалар һәм киттарға
аҙыҡ өсөн.
Хоҙай һеҙҙе таратҡандыр
Ер йөҙөнә,
Болондағы гөл-сәскәләй,
зауыҡ өсөн.
Ваҡ халыҡтар - ерҙең затлы
биҙәктәре,
Тәбиғәттең боҙолмаған балалары.
Залимдарҙың холҡо яман,
ҡулы ҡаты.
Шуға һыҙлай минең йөрәк
яраларым.

Рәсәй һымаҡ ҙур дәүләттәр бында йәшәгән халыҡтар яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойорға, улар хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш, сөнки был милләттәр Ер йөҙөнә Хоҙай тарафынан яратылған.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ДИАЛОГ*

# ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ,




**Өфө-II ҡаласығы тип аталған археологик ҡаҙыныу эштәре алып барылған урынды "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы тип иғлан итеү хаҡында быйыл 15 мартта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең ҡарар ҡабул итеүе хаҡында гәзитебеҙҙең 13-сө һанында яҙып үткәйнек инде. Уға тиклем дә, йәғни Өфө-II ҡаласығында археологик тикшеренеүҙәр башланған саҡтан алып беҙ был тарихи объектҡа ҙур иғтибар бирҙек һәм биш йыл һуҙымында был мәсьәлә беҙҙең гәзит битендә даими яҡтыртыла килде. "Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй" тигән кеүек, был юлы алдағы йылдарҙа әйтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөп, хәҙер инде тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ тигән рәсми статусҡа эйә тарихи ҡомартҡыбыҙҙы тейешле кимәлдә төрлө яҡлап өйрәнеп, ҡайһы бер тарихи факттарҙы нигеҙләргә, дәлилдәр менән нығытырға, ошо юл менән музейҙың нигеҙен һалырға бурыслыбыҙ. Әйткәндәй, алдағы йылда Өфөлә Өфө-II ҡаласығы буйынса Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция уҙғарылыуы ла беҙҙең алда бик күп мөмкинлектәр асасаҡ. Был иң беренсе нәүбәттә Өфө-II ҡаласығын бөтә донъя ғилми фекере менән нығытыуға булышлыҡ итәсәк. Әлеге ваҡытта шул конференцияға әҙерлек бара. Ошо хаҡта, ғөмүмән, ҡаласыҡ тарихына бәйле мәсьәләләр хаҡында тарих фәндәре докторы Нияз МӘЖИТОВ менән география фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге рәйесе урынбаҫары Айбулат ПСӘНЧИН фекер алыша.**

**Дауамы 8-9-сы биттәрҙә.**

✓ *Бәхеткә күрә, милләттәр юғалманы, ә бына Советтар Союзы юҡҡа сыҡты. Милләтте бөтөрөп, уның тамырын ҡороторға маташыуҙар һәр заманда ла булып торҙо, был зыянлы ҡараштар, шөкөр, әлегеләй юҡҡа сыға торҙо.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӘРМЕГӘ БАРЫУ-БАРМАУ... законға ярашлы хәл ителә

**18 йәше тулған мәктәп сығарылышы уҡыусыларын юғары уҡыу йортона инеү мөмкинлеге биреү өсөн армия хеҙмәтенән кисектереп торасаҡтар. Бының өсөн хәрби бурыс тураһындағы законға төҙәтмә индереләсәк һәм ул закон июнь аҙағына тиклем Дәүләт Думаһында ҡабул ителеп, Совет Федерацияһы тарафынан хуплау үтеп өлгөрөргә тейеш. Шулай уҡ ошо йылдың сентябренә тиклем техникум һәм колледж тамамлап, артабан юғары уҡыу йортона уҡырға инергә теләүсе абитуриенттарға, аспиранттарға ла ошондай уҡ хоҡуҡ биргән ҡарар ҡабул ителәсәк, тип күҙаллана.**

Быға тиклем дә, әлбиттә, уҡыуҙы артабан дауам итеүгә хоҡуҡ булды. Ләкин ул формаль рәүештә генә ҡаралды, ғәмәлдә иһә уны тормошҡа ашырыу күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыра ине. Мәғариф органдарында иҫбатлауҙарынса, каникулдар уҡыу процесына инә һәм 31 августа тиклем сығарылыш уҡыусылары мәктәп уҡыусылары булып ҡала, шуға күрә йәшенә ҡарамай, уларҙы армия сафына алырға ярамай. Ә РФ Оборона министрлығы иһә "урта белем тураһында аттестатты уҡыусылар 25 июндә үк ала, яҙғы саҡырыу 15 июлгә тиклем бара, ә юғары уҡыу йортонда иһә ҡабул итеү ҡарарына ректор тик август аҙағында ғына ҡул ҡуя, шуға күрә 18 йәштәре тулғандарҙы армия сафына алыу мөмкин генә түгел, ә кәрәк", тип бара. Закон ҡабул ителгәндән һуң иһә был фекер айырымлығы бөтөрөлөргә тейеш. Аспиранттарға килгәндә инде, тейешле закон ҡабул ителгәнгә тиклем уларға бер кем дә "теймәйәсәк", тип белдерә Оборона министрлығы.

Ҡабул ителәсәк законға егеттәр ниндәй ҡараштa? Ошо һорау менән бер нисә ир-егеткә мөрәжәғәт иттек.

**Фәнүр Толомбаев, Бөрйән районы:** Мин 11 синыфты тамамлағас та армияға киттем, сөнки ир-егет өсөн ил алдындағы бурысын үтәп ҡайтыуҙы иң беренсе сиратҡа ҡуйҙым. Ҡайтҡас, уҡырға индем һәм әле 4-се курстамын. Әрмелә булып ҡайтыуым миңә юғары уҡыу йортонда үҙемдең урынымды тиҙ табырға ярҙам итте, сөнки мин әле генә әсә-ата ҡанаты аҫтынан сығып киткән бала түгел, ә әҙме-күпме донъя күргән егет.

**Азамат Абдрахманов, Бишбүләк районы:** Был законды күптән ҡабул итергә кәрәк ине. Бөгөнгө көндә белемһеҙ нимәгәлер өлгәшеп булмай, шуға күрә, тәү сиратта, белемле, профессиялы булыу мөһим. Мәктәптән һуң әрме сафтарына алынған егеттәр унан ҡайтҡас та күпмелер ваҡыт әрме йоғонтоһонан ҡотола алмай, тиҙ генә кәрәкле ҡарар ҡабул итә алмай йөрөй. Ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй уҡыуҙан һүрелеп ҡайта. Был насар, минеңсә.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Рус түгелмен, ләкин рәсәйлемен" тигән ҡағиҙә инде ҡаныбыҙға һеңеп бөткән, әммә ҡайһы бер ғалимдар һәм сәйәсмәндәр уны яңынан көн лозунгыһы итеп күтәрә. Был "велосипед уйлап сығарыу"ға бәрәбәр түгелме?

(Башы 1-се биттә).

***Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, БР Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры вазифаһын башҡарыусы, социология фәндәре кандидаты:*** Валерий Тишков этнология һәм антропология өлкәһендә танылған белгес, Рәсәй кимәлендә билдәле ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре. Ул байтаҡ тикшеренеүҙәр авторы ла. Мәҫәлән, һуңғы хәрби конфликттар осорондағы чечен йәмғиәте буйынса тикшеренеүҙәре бар. Шул уҡ ваҡытта ул фәнни даирәлә һәм патриотик рухлы йәмәғәтселек мөхитендә бик күп бәхәстәр тыуҙырған ҡайһы бер теоретик фекерләүҙәр авторы ла. Уның "этнос һәм милләттәр буйынса реквием" тураһындағы фекерҙәре рәсәйлеләрҙән ниндәйҙер "уҡмаштырылған" милләт төҙөү конструкцияһы булып хеҙмәт итә. Рәсәй шарттарында бындай моделде мин тормошҡа ашырырлыҡ тип иҫәпләй алмайым, уны күңел ҡабул итмәй. Рәсәй граждандар милләте, Рәсәйҙең күп милләтле халыҡтары үҙҙәренең тарихи йолалары теләктәшлегендә һәм полиэтник традицияларында бергә йәшәй белергә тейеш, ләкин был уларҙың ҡушылырға тейешлеген аңлатмай, киреһенсә, улар милли-территориаль автономиялар сиктәрендә илебеҙҙең бөтә этностарына ҡарата ла ихтирам рухында йәшәргә бурыслы. Бәлә тағы ла шунда: ғалимдың ҡараштары бик ныҡ сәйәсиләштерелеп, ҡабартылып, идеология ҡалыбына "төрөп" бирелә. Был иһә фекерҙә һалынған рациональ фәнни эҙләнеүҙәрҙән иғтибарҙы ситләштерә һәм бәғзе берәүҙәргә унан файҙалы идеялар урынына сәйәси һәм шәхси дивиденттар сүпләү өсөн ем бирә. В. Тишков етәкләгән "Этнологик мониторинг селтәре"нең эше лә ҡайһы саҡта шик аҫтына алына. Сөнки был селтәр төрлө төбәктәрҙән һайланған ғалимдарҙан тора һәм уларҙы һайлап алыу принцибы аңлашылмай. Ул ғалимдар араһында"белгес" булып сәйәсәттә әүҙем ҡатнашҡандар осрай. Сәйәсәт уйыны уйнаған бындай ғалимдарға ғәҙәттә фән донъяһында шикләнеп ҡарала.

***Флүрә АЛСЫНБАЕВА, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы, педагог:*** Хәтерләйһегеҙҙер әле, совет заманы йылдарында милли айырымлыҡтар юйылып, дөйөм "совет кешеһе" тигән төшөнсә тороп ҡаласаҡ, тип башты ҡатыра башлағайнылар. Бәхеткә күрә, милләттәр бөтмәне, юғалманы, ә бына Советтар Союзы ише көслө держава юҡҡа сыҡты. Милләтте бөтөрөп, уның тамырын ҡороторға маташыуҙар һәр заманда ла булып торҙо, был зыянлы ҡараштар, теориялар, шөкөр, әлегеләй юҡҡа сыға торҙо. Милләттәр булған, бар һәм әгәр ҙә уның үҙ милләтен, халҡын һөйгән вәкилдәре йәшәй икән, милләттәр ҙә йәшәйәсәк. Үкенескә күрә, күпселек милләттәрҙең йәштәре хәҙер үҙ телен бик һанламай, урыҫса аралашыуҙы ғәҙәт итеп алды. Ни хәл итәһең, замана шулай, тиһәк тә, бар бит үҙ милләте, туған теле өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булған халыҡтар ҙа.

Өфөгә килеп, үҙенең зыянлы теорияһын сәсеп китеүсе академик Валерий Тишковтың БСТ каналына интервьюһын мин дә әрней-әрней ҡараным. Нимә ти инде был академик? Йәнәһе, башҡорт теленә дәүләт теле статусы биреү - абсурд, ти ул. Был аңһыҙ һүҙҙәрҙән сәстәр үрә торҙо. Урыҫта бер ғибрәтле мәҡәл бар: "Ситтәр сиркәүенә үҙ уставың менән инмә". Әлеге осраҡта Тишков әфәндегә шулай тип өндәшкем килә. Һуңғы ваҡыт үҙәк матбуғат һәм электрон сараларҙа был исем йыш ҡабатлана башланы. Ул илебеҙҙә йәшәгән этник төркөмдәрҙе берләштереп, "Рәсәй милләте" тигән төшөнсә булдырырға тәҡдим итә. Беҙҙән тағы ниндәй Рәсәй халҡы яһарға итә ул, беҙ бит былай ҙа 450 йылдан ашыу рәсәйлеләр! Нимәгә һәм кемгә кәрәк булды әле бындай "велосипед уйлап сығарыу?" Рәсәйҙә урыҫ халҡы кәмей тип, беҙҙе үҙ милләтебеҙҙән ваз кистерергә маташыумы әллә юғиһә?

Һуңғы ваҡыт ҡатнаш никахтарға айырым иғтибар бүлеп, был күренеште һәр төрлө хуплап, йөпләп, пропагандаларға маташыу ҙа ҙа күңелгә ятмай. Был, мәғлүм булыуынса, бер милләттең икенсеһе тарафынан "йотолоуына" алып килә һәм, әгәр ул милләттәрҙең береһе башҡорт вәкиле икән, бындай никахтан ғәҙәттә башҡорт балалары тыумай. Быға миҫалдар тулып ята. Шуға күрә милләттәрҙең тәбиғи үҫешенә яһалма тотҡарлыҡтар, кәртәләр ҡуйыуға ҡарата һаҡ булырға кәңәш итәм.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 10 "Ҡөрьән -Кәрим" китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** ● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфөматбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. ● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**. ● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн хаҡтар түбәндәгесә: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә "ИТАР-ТАСС" мәғлүмәт агентлығының вәкиллеге асылды. Вәкиллек асылыу уңайы менән республикаға федераль матбуғат саралары баш мөхәррирҙәре лә килде. Улар БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән, шулай уҡ Башҡортостандың беренсе президенты Мортаза Рәхимов менән осрашып һөйләште.

✓Билдәле булыуынса, Урман ҡасабаһындағы шартлауҙар һөҙөмтәһендә күрелгән зыян 420 млн һумғаса барып баҫҡан һәм 800-ҙән ашыу төҙөлөш объектын эштән сығарған. Иглин район хакимиәте башлығы әйтеүенсә, йорт-ҡураларҙы тулыһынса тергеҙәсәктәр, мунса-һарайға тиклем төҙөйәсәктәр. Янып көлгә әйләнгән йорттар урынына яңыларын күтәрәләр, улар көҙгә тиклем сафҡа инәсәк.

✓Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ошо көндәрҙә "Мәғариф тураһында"ғы РФ законына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы законға ҡул ҡуйған. Яңы федераль закон туған тел һәм туған әҙәбиәтте өйрәнеүселәргә дәүләт аттестацияһы үтеү барышында имтихан тапшырыу өсөн ошо фәндәрҙе һайлау хоҡуғын бирә. Туған тел һәм әҙәбиәт буйынса йомғаҡлау аттестацияһы үтеү тәртибе һәм формаһы РФ субъекттарының дәүләт власы органдары тарафынан билдәләнә. Законға ярашлы, РФ субъекттарының дәүләт власы органдарына дәреслектәр сығарыу буйынса ойошмаларҙы һайлауҙа ҡатнашыу хоҡуғы ла бирелә.

✓Көньяҡ Урал райондары иҡтисадын комплекслы үҫтереү программаһын тормошҡа ашырыуға Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге лә үҙ өлөшөн индерәсәк. Улар иҫәпләүенсә, был төбәктә ҡортсолоҡто маҡсатҡа ярашлы үҫтергәндә йылына 14 меңдән ашыу тонна бал етештереп була. Әле республикала йылына 12 мең тонна тулайым бал етештерелә. Көньяҡ Урал районларының аҙыҡ базаһы 170 меңдән ашыу баш умарта тотоу мөмкинлеге бирә. Ошо мөмкинлекте файҙаланыуға ярҙам итеп, Үҙәк әле Көньяҡ Урал районларына бал ҡорттары һата башланы.

✓Баймаҡ районының Темәс ауылында 18 июндә һабантуй һәм ҡымыҙсыларҙың район конкурс-күргәҙмәһе буласаҡ. Ул Темәс ауылы ла ҡушылған сара - "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә ойошторола.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Әгәр ҙә "Дошманыңды үҙенең бысағы менән үлтер" йәки Александр Невский һымаҡ "Кем беҙгә ҡылыс күтәреп килһә, шул ҡылыстан үҙе һәләк буласаҡ" тип әйтһәк, был әйтемдең мәғәнәһе һәлмәгерәк, йөкмәткелерәк булыр ине, тип уйланыла барыбер. Шулай ҙа дошманының бысағы менән кейеҙ киҫеп ултырыусыны күҙ алдына килтереү, нисектер, ситенерәк, бахырлыҡҡа тиң түбәнселек һымаҡ тойола. Әммә был әйтемдең бик тәрәндә ятҡан мәғәнәһе лә бар. Шуға төшөнөп ҡарайыҡ.**

# ДОШМАНЫҢ БЫСАҒЫ МЕНӘН...




Әйтемдең төптә ятҡан йәшерен мәғәнәһен, минеңсә, төрлө йүнәлештә эҙләү фарыҙдыр.

Тәүҙә шуны иҫкә төшөрәйек: кейеҙ ҡасан һәм ниндәй маҡсатта киҫелә һуң? Әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә, тирмә ҡорғанда йә булмаһа әйәргә күпмә, серге хәстәрләгәндә, тағы ла быйма баҫҡанда. Был ғәмәлдәр тыныс тормош шарттарында һәм маҡсатында башҡарыла, һәр хәлдә, кемдеңдер йәнен ҡыйыуҙы, уға бысаҡ менән яра һалыуҙы аңлатмай. Әгәр ҙә кеше үҙенең ҡан дошманының бысағын алып тороп, уны тирмә йәғни йәшәү торағы, әйәр хәстәрләүҙә, быйма баҫҡанда ҡуллана ала икән, бында уларҙың дошманлығы ла шартлы ғына булыуына ишара. Дошманының бысағы менән уҡ юнһа ул кеше, бында әйтем бөтөнләй икенсе төҫмөрләнеш алыр ине. Кейеҙ иң беренсе нәүбәттә тыныс тормош кәрәк-ярағы. Әгәр ҙә әйтемдең төп мәғәнә юҫығын ошо рәүешле генә аңлаһаҡ, ул ҡәҙимге һүҙбәйләнештәр, осраҡлы әйтемсектәр исемлеген генә тулыландырыр ине. Ә бит бында милли идеяға торошло мәҡәл-әйтем хаҡында һүҙ бара.

Хәҙер инде иғтибарыбыҙҙы кейеҙгә икенсе күҙлектән йүнәлтеп ҡарайыҡ. Бысаҡ менән кейеҙ ҡырҡып ҡарағанығыҙ бармы? Минең, мәҫәлән, үҫмер саҡта быйма табанлағанда ҡырҡҡаным бар. Бик еңел башҡарылмай был ғәмәл. Етмәһә, һаҡал-мыйығынды ҡырырлыҡ үткерлектә булған бысағың нимә эшләй? Эйе, "һә" тигәнсә үтмәҫләнеп тә өлгөрә. Бына ошонда ята ла инде әйтемдең иң төптәге йәшерен мәғәнәһе. Уны бар тулылығында асыр өсөн тағы ла бер әйтем ярҙамға килә: "Дошманын еңгән еңеүсе түгел, ә дошманын дуҫ иткән ысын еңеүсе". Дошманыңды дуҫ итеү - шул уҡ уның бысағының үтмәҫләнеүе бит. Бысаҡтың үтмәҫләнеүе - уның һиңә ҡарата булған дошманлыҡ хистәренең, күрә алмаусанлығының кәмеүе. Тимәк, һин дошманыңдың бысағы менән кейеҙ ҡырҡаһың икән, уның менән араларығыҙҙы яйлар, мөнәсәбәтегеҙҙе көйләр өсөн фиҙакәрлек яһайһың, дуҫлыҡ күперҙәрен һалаһың. Сөнки һеҙҙең аралағы дошманлыҡтан һин зыян ғына күрәһең һәм ғорурлығыңды онотоп, ҡайһы бер принциптарыңды ситкә ҡуйып тороп булһа ла, дошманың менән "килешеүҙәр өҫтәле" артына ултыраһың.

Икенсенән, "Асыу - аҡыл дошманы", "Асыу - дошман, аҡыл - дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш" тигән әйтемдәрҙән сығып ҡарағанда, ысынлап та, асыуҙарына хужа булмағандарҙың, бәлки, дошмандары ла куберәктер. Быға тиклем "Милли идеяға торош" рубрикаһында һүҙ алып барылған "Һуңғы ҡылысты ергә сап", "Һуңғы балтаны түмәргә сап", "Асыуыңа хужа бул", "Асыуыңды буйыңа һеңдер" әйтемдәре лә ошо бер үк фекерҙе тулыландырып килгән һымаҡ. Әммә уларҙың барыһында ла кешенең, милләттең, дәүләттең үҙен уратып алған донъя, мөхит менән һыйышып йәшәй алыу һәләте тотош программаға нигеҙ булырлыҡ милли идеяға торошло итеп һалынған.

Тарихыбыҙҙан шуға шаһитбыҙ: халҡыбыҙҙың кәрәк саҡта үҙ дошманының бысағы менән уның "кейеҙен киҫә" белеүе лә уны анауындай утлы ҡойондарҙан имен-аман алып сығып, бөгөнгөгә алып килеп еткергән дә инде. Улай ғына ла түгел, беҙҙе тап шул халәтебеҙ йәшәтә лә кеүек. Оло йөрәкле булыуыбыҙ, дошмандарыбыҙға түҙеп ҡарай белеүебеҙ һаҡлай беҙҙе.

Беҙ һаман да, үҙебеҙгә зыян килтереп булһа ла, оло йәшәү хаҡына шул сифатыбыҙға тоғробоҙ. Хатта тешебеҙҙе ҡыҫып булһа ла дошмандарыбыҙҙы дуҫ күрергә, ошо юл менән уларҙың үҙебеҙгә ҡарата дошманлыҡ хисен юйырға тырышабыҙ.

Толерантлыбыҙ. Үҙебеҙгә зыян килтереп булһа ла, башҡаларға хушҡүңеллебеҙ. Ә бит толерантлыҡ ике яҡлы була...

"Йыуаш булһаң - баҫырҙар, уҫал булһаң - аҫырҙар, йыуаш та, уҫал да булһаң - дуҫ күрерҙәр" тигән әйтемде лә онотоға ярамайҙыр беҙгә. Һүҙемде бынан 20 йыл элек яҙылған шиғырым менән тамамлағым килә:

*Дуҫлыҡ, дуҫлыҡ, дуҫлыҡ Алла кеүек,*
*Дуҫлыҡтан да юҡтыр ҙур Алла.*
*Хатта дошманыңа күҙ һалаһың,*
*Ышанысың дуҫҡа юғалһа.*

*Ҡай бер дуҫтың булмағаны яҡшы,*
*Булмағаны яҡшы ялғандың.*
*Дошманыма ҡарап алданманым,*
*Ялған дуҫҡа ҡарап алдандым.*

*Булды ҡай бер дуҫым устарынан*
*Шәрбәт тиеп ағыу һоҫҡаным.*
*Был йәшәүең бер тингә лә тормаҫ,*
*Дуҫ тигәнең булһа дошманың.*

*Ысын дуҫлыҡ тинем, ысын, тинем,*
*Ир йөрәге ирге ҡуш булһа.*
*Бөйөк дуҫлыҡ тинем, бөйөк, тинем,*
*Ил йөрәге илгә ҡушылһа.*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# РУХИ АҘЫҠ СЫҒАНАҒЫ

"Киске Өфө" гәзите сыҡҡандан алып унан айырылған юҡ. Гәзит-журналдарға яҙылыу ваҡыты етһә, күптәр иң беренсе уның хаҡы тураһында һораша, ә беҙҙә ундай ҡыҙыҡһыныу бөтөнләй юҡ. "Иң беренсе район гәзитенә яҙ, шунан "Киске Өфө", "Башҡортостан ҡыҙы", "Аманат", "Аҡбуҙат", "Шоңҡар", "Йәншишмә" баҫмаларына яҙ", - тип һанап китһәк, почта хеҙмәткәрҙәре: "Хаҡтар ҡиммәт тип кеше бик яҙыла һалмай, һеҙҙе был ҡурҡытмаймы?" - тип һорап, беҙҙе аптырыуға һала. Нисек инде үҙ телеңдә сыҡҡан баҫмаларҙы ла уҡымай йәшәмәк кәрәк? Йәй көндәре ауылда таңдан алып төнгә тиклем аяҡ өҫтөндә эш менән булаһың да, йоҡларға ятҡас, гәзит-журналдарҙы күҙ йүгертеп уҡып һалып өлгөрәһең. Өлгөрмәһәң, йыйып барырға була. Ял ваҡыты тура килгәндә, баҫмаларҙы ултырып уҡып, йәнгә рухи аҙыҡ алаһың. "Киске Өфө" - бигерәк тә уҡымлы баҫма: теле лә ябай, мәғәнәле, йөкмәткеле, торғаны рухи хазина. Шундай баҫма сығарғанығыҙ өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт!

**Гөлназ ВӘХИТОВА.**
**Бөрйән районы Мәндәгол ауылы.**

* * *

Мин күп йылдар инде "Киске Өфө" гәзитен алдырам һәм яратып уҡыйым. Был бик уҡымлы һәм фәһемле гәзит аша донъялағы бөтә яңылыҡтарҙы белергә була. Дин юлына баҫҡан кеше булараҡ, миңә бигерәк тә "Мосолман донъяһы", "Мосолман әҙәбе" рубрикалары оҡшай. Дин мәсьәләләре яҡтыртылыуы, тәрбиәүи темаларҙың күберәк бирелеүе менән башҡа баҫмаларҙан айырылып тора был гәзит. Аллаға шөкөр, шулай уҡ бөтә балаларым да "Киске Өфө"нө алдыра, яратып уҡый, рухи аҙыҡ ала, ғилемен арттыра. Киләсәктә лә был гәзит беҙҙең иманыбыҙҙы нығытыусы булып ҡалһын! Халҡыбыҙҙы шундай рухи гәзит менән ҡыуандырғаны өсөн редакция хеҙмәткәрҙәренә оло рәхмәтемде белдерәм!

**Нәғимә МӨХӘМӘТОВА.**
**Учалы районы Озерный ҡасабаһы.**

* * *

Беҙ, тормош юлдашым Салауат Миңнулла улы менән, "Киске Өфө" гәзитенән бер ҡасан да айырыла алмаҫбыҙ, тип әйтһәм дә булалыр: икебеҙ ҙә яратып уҡыйбыҙ уны, ҡайһы саҡ бәхәсләшеп тә китәбеҙ. Был гәзит битләрендә баҫылған мәҡәләләр башҡортобоҙҙоң көҙгөн, аңын аса. Уны бөтә милләттәштәребеҙ ҙә алдырып уҡыһа, ҡалай яҡшы булыр ине, тип уйлап ҡуябыҙ. Эй, Аллаһым, милләттәштәребеҙҙе дошмандар күҙенән үҙең һаҡла, тип доғалар әйтә-әйтә йәрөйбөҙ. Еребеҙҙән, телебеҙҙән яҙмайыҡ, тиһә, беҙгә шайтандар, килмешәктәр көйөнә бейергә түгел, ә барыбыҙ берләшеп, халҡыбыҙ араһында аңлатыу эштәрен киң йәйелдереп, тормошто алға ебәреү, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү ягын ҡарарға кәрәк. Ә инде нисек дөрөҫ йәшәргә, нисек дөрөҫ юл һайларға тигән һорауҙарға яуапты "Киске Өфө"лә табып була.

**Флүрә ЙӘРМӨХӘМӘТОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓11 июндә Спорт һарайы алдында ауыл хужалығы йәрминкәһе үтә. Йәрминкә иртәнге 9 сәғәттә асыла.

✓23-26 июндә "Айыҡ ауыл" республика йәмәғәт конкурсында ҡатнашыусыларҙың беренсе уҡыу-слет сараһы уҙғарыласаҡ. Ул Бөрйән районында "Оло Ҡужан" туристик туҡталышында үтәсәк. Ойоштороусылары - БР Һаулыҡ һаҡлау, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Бөрйән районы хакимиәте, "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы һ.б. Һорауҙар менән 8-906-370-49-44, 8-927-953-35-65, 8-927-314-32-02 телефондары буйынса мөрәжәғәт итергә.

✓Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт палатаһының яңы составы раҫланды. Тәүге 15 ағза БР Президенты Указы менән раҫланһа, ҡалған 15 ағза конкурс нигеҙендә һайлап алынды. 2009 йылда төҙөлгән Йәмәғәт палатаһы ике йылға бер тапҡыр яңыртыла.

✓Әбйәлил районының Ҡужан ауылы эргәһендәге Аҫҡар-Магнитогорск трассаһында 48 метр оҙонлоҡтағы, 2 метр бейеклектәге социаль баннер урынлаштырылды. Баннерҙағы яҙыуҙар халыҡты сәләмәт йәшәү рәүешенә өндәй, тыуған ерҙе һөйөргә саҡыра.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубы көйәрмәндәренең иң яратҡан хоккейсыһы Александр Радуловтың бер туған ағаһы быға тиклем "Витязь"да уйнаусы Игорь Радулов та "Салауат Юлаев"та уйнаясаҡ хәҙер. Ул клуб менән ике йылға килешеү төҙөнө. "Северсталь"дән Юрий Трубачев та беҙҙең командаға күсте.

✓Сибайҙа "Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи ҡомартҡыһы" тип исемләнгән II халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция булып үтте. Маҡсаты - "Урал батыр"ҙы ЮНЕСКО-ның "Кешелектең ауыҙ-тел һәм матди булмаған ҡомартҡыһы" исемлегенә индереү буйынса эштәрҙе әүҙемләштереү. I халыҡ-ара форум былтыр үткәйне һәм ул "Урал батыр" эпосын яҙып алыуға 100 йыл тулыуға арналғайны.

✓16 июнгә тиклем Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Рудольф Нуриев исемендәге XVIII халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале үтә. 16 июндә фестиваль гала-концерт менән тамамланасаҡ, унда Рәсәй, Башҡортостан, Германия, Ҡаҙағстан артистары ҡатнашасаҡ.

**✓ Полиолимпиаданың абсолют еңеүселәре исеменә Күгәрсен районының Мораҡ башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Аделина Кинйәбаева, Әлшәй районы Раевка башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Азат Юлдашев лайыҡ булды.**



ҺАЙ, АФАРИН!

# ҺЫНАУҘАР АША...

## белем камиллаша

**Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы ҡарарына ярашлы Республика башҡорт лицей-интернатында 5-се һәм 6-сы синыф уҡыусылары өсөн "Орбита" полиолимпиадаһы үтте. Республика балаларының математика, башҡорт һәм рус телдәре, логика, тәбиғәтте өйрәнеү фәндәре буйынса белем һәм аң кимәлен, ижади һәм шәхси потенциалын асыҡлау маҡсатында ойошторолған полиолимпиада республиканың 14 төбәгендә уҙғарылды. Беренсе тур - урындарҙа, ә икенсе тур Өфө ҡалаһында үтте.**

Беренсе турҙа бөтәһе 1151 уҡыусы ҡатнашып, шуларҙың 120-һе икенсе турға сыҡҡан, улар араһынан 20 уҡыусы иң яҡшылары тип табылды.Иң яҡшы эштәрҙең хужалары Маҡтау ҡағыҙҙары һәм полиолимпиаданың генераль бағыусыһы "Кламас" компьютерҙар компанияһы бүләктәре менән билдәләнде. Жюри ағзалары билдерлеүенсә, полиолимпиадаға килгән балаларҙың белем кимәле юғары һәм оҙаҡламай улар республика һәм Рәсәй кимәлендәге башҡа төр олимпиадаларҙа ла уңышлы сығыш яһаясаҡ. Тик бының өсөн тәүге шарт: уҡыусыларҙа белем дә, алға ынтылыш та, фәндәр менән ҙур ҡыҙыҡһыныу ҙа булырға тейеш. -Бындай полиолимпиада республикала беренсе тапҡыр ғына үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, ойошҡанлыҡ менән үтте һәм мәктәп уҡыусылары араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Башҡортостанда талантлы балалар күп һәм улар ошондай олимпиадалар, конкурстар ярҙамында ла үҙ белемен күрһәтергә һәм артабан үҫергә тейеш, - тип билдәләне лицей директоры Фәнил Йәлил улы.

Барыһынан да күберәк мәрәй йыйып, полиолимпиаданың абсолют еңеүселәре исеменә 5-се синыфтарҙан - Күгәрсен районының Мораҡ башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Аделина Кинйәбаева, 6-сы синыфтарҙан Әлшәй районы Раевка башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Азат Юлдашев лайыҡ булды.

- Полиолимпиада буласағы хаҡында ишеткәс тә, унда ҡатнашырға булдым, сөнки миңә үҙемде бөтә өлкәлә лә һынап ҡарау оҡшай. Полиолимпиада һорауҙары еңелдән булманы, барлыҡ белемемдә һәм көсөмдө һалып тырыштым. Был еңеү минең өсөн ҙур ваҡиға, сөнки район кимәлендә күп олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар алһам да, республика кимәлендә еңеү яулауым үҙемә булған ышанысты тағы ла нығыраҡ арттырҙы, - тип үҙ фекерҙәре менән бүлеште Аделина. Уның һүҙенә Азат та ҡушылды: "Еңеүемә бик нык шатмын. Бүләгем дә шәп - ноутбук бүләк иттеләр. Минең өсөн һорауҙар һәм мәсьәләләр үтә ауыр булманы, шулай ҙа башты эшләтергә тура килде. Әгәр лицейға уҡырға саҡырһалар, мотлаҡ киләсәкмен", - ти ул. Ойоштороусылар билдерлеүенсә, ысынлап та, икенсе турға сыҡҡан 120 кеше араһынан 75 малайҙы лицей-интернатҡа уҡырға саҡырыу мөмкинлеге ҡараласаҡ.

Талантлы балалар - ил байлығы. Бары тик уларҙы ваҡытында күреп, белемен артабан үҫтереүгә юл асыу ғына шарт. "Орбита" кеүек полиолимпиада нәҡ ошо шарттарға яуап биреүсе мөһим ваҡиға һәм уның артабан да талантлы балаларҙы юғары белемгә илтеүсе баҫҡыстарҙың береһе буласағында шик юҡ.

**Наҙгөл САФУАНОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Уҡыуҙар тамамланһа ла, ҡала мәктәптәрендә балалар тауышы гөрләй әле, сөнки белем усаҡтарында уҡыусылар өсөн йәйге лагерҙар үҙ эшен башланы. 1 июндә Ф.Мостафина исемендәге 20-се һәм М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияларында ла йәйге лагерҙар асылды.**

# ТЕЛ ӨЙРӘНӘ-ӨЙРӘНӘ...

## ял итәләр

Ф.Мостафина исемендәге 20-се һанлы башҡорт гимназияһында бер юлы өс йүнәлештәге йәйге лагерь эшләй. "Ете ырыу" башҡорт телен өйрәнеү буйынса профилле лагерҙа Өфө ҡалаһы Совет районының бар мәктәптәренән башҡорт телен, әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен ныҡлап өйрәнергә теләгән 30-ҙан ашыу бала шөғөлләнә. Уларҙы Совет районы мәктәптәрендә ошо фәндәрҙән белем биргән иң яҡшы уҡытыусылар уҡыта. Лагерҙың маҡсаты - башҡорт телен өйрәнеү, башҡорт милләтенең ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән яҡшылап таныштырыу. Балалар дәрестәрҙән тыш, ҡаланың төрлө музейҙарына, мәсеттәренә һәм башҡа мәҙәни һәм тарихи урындарға экскурсияға йөрөйәсәк.

Икенсе төр йәйге лагерь - Америка-Башҡорт интерколледжы менән берлектә ойошторолған инглиз телен өйрәнеү профилле лагеры. Бында 30-лап гимназия уҡыусыһы шөғөлләнә. Дәрестәрҙе интерколледж уҡытыусылары үткәрә.

Өсөнсө лагерь балаларҙың һаулығын нығытыуға, сәләмәт тормошто пропагандалауға ҡоролған. 7 йәштән 14 йәшкәсә балалар өсөн тәғәйенләнгән "Карлуғас" көндөҙгө ял итеү лагерына гимназияның 60 уҡыусыһы йөрөй. Инглиз телен өйрәнеү профилле лагеры һәм "Карлуғас" көндөҙгө ял итеү лагеры аҙ тәьмин ителгән, ата-әсәһе бюджет өлкәһендә эшләүсе һәм күп балалы ғаиләләр өсөн тәғәйенләнгән.

Шулай уҡ йәйҙең тәүге көнөндә М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында ла "Кояшкай" һауыҡтырыу йәйге лагеры үҙ эшен башланы. 120 уҡыусыны берләштергән 5 отряд өс аҙна эшләйәсәк. Лагерҙа "Спорт уйындары", "Һауыҡтырыу гимнастикаһы", "Музыка" түңәрәктәре һәм 2002 йылда үҫмерҙәр араһында донъя чемпионы исемен яулаусы, Рәсәйҙең спорт мастеры Рим Ишмөтов етәкселегендәге шашка секцияһы булдырылған. Шулай уҡ лагерҙа башҡорт телен тәптән өйрәнеү һәм башланғыс ғәрәп телен өйрәнеү курстары ла эшләй. Телдәрҙе уҡыусыларға Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары һәм ғәрәп телен өйрәнеүсе студенттар өйрәтәсәк. Шулай уҡ балалар ижади конкурстарҙа, төрлө тренингтарҙа, театрлаштырылған мауыҡтырғыс программаларҙа ҡатнашасаҡ һәм ҡаланың төрлө кинотеатрҙарында, музейҙарында һәм планетарийҙа экскурсияла буласаҡ.

**Гөлназ САФИУЛЛИНА.**

# УРАМ ҺЕПЕРЕҮСЕГӘ ҺӘЙКӘЛ...

## ете мөғжизә исемлегендә

**Өфөнөң Совет районында "Районыдың ете мөғжизәһе" конкурсына йомғаҡ яһалды. Районыдың төрлө мәҙәниәт, архитектура, тәбиғәт объекттарын конкурсҡа тәҡдим итеп, утыҙҙан ашыу ғариза бирелгән.**

Баш ҡаланың һәм районыдың йөҙөн билдәләрҙәй үҙенсәлекле объекттарҙы асыҡлау маҡсатында ойошторолған был конкурста мәктәп уҡыусылары ла, студенттар ҙа, оло йәштәге кешеләр ҙә әүҙем ҡатнашҡан. Уларҙың иң олоһона - Николай Каревҡа 75 йәш булһа, иң йәш бәйгесе Динислам Зариповҡа 8 йәш. Конкурс Рәсәй ҡалаларында белем алыусы яҡташтарыбыҙҙың иғтибарынан да ситтә ҡалмаған, мәҫәлән, Айгөл Хәлитова Санкт-Петербург дәүләт тау университеты студенты. Тыуған ергә һөйөү тәрбиәләүсе, ҡала тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыусы бындай конкурстар төрлө быуын кешеләрен берләштереп кенә ҡалмай, йәштәрҙә әүҙем граждандылыҡ позицияларын билдәләргә һәм уны башҡаларға еткерергә өйрәтә.

Совет районы хакимиәте башлығы Салауат Бәхтийәров әйтеүенсә, йәш кеше йәшәгән районының, ҡалаһының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф булмаҫҡа тейеш. "Йәштәрҙе әүҙемләштереү йәһәтенән дә был конкурс үҙенең маҡсаттарына өлгәште", - тине Салауат Ануш улы.

Шулай итеп, Совет районының ете мөғжизәһе тип Иван Якутов исемендәге парк, шул иҫәптән, Һалдат күле, Балалар тимер юлы, Ботаника баҡса-институты, "Мәңгелек тәгәрмәсе" скульптураһы, "Өфө-Арена" боҙ һарайы, "Мир" сауҙа-күңел асыу үҙәге алдындағы "Урам һепереүсе" скульптураһы, Изге Симеон Верхотурский ҡорамы, Сәғит Агиш урамындағы шишмә табылды. Район хакимиәте хеҙмәткәрҙәре еңеүсе объекттарҙың фотолары менән буклет та әҙерләгән.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**



Ботаника баҡсаһы.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев журналистар менән осрашып, уларҙы байрам алдынан башҡарылған эштәр менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, баш ҡала етештереү сәнәғәте индексы быйылғы йыл менән сағыштырғанда 1,3 тапҡырға артҡан. Инвестиция проекттары буйынса ла алға китеш һиҙелә. Йыл башынан махсус программаға ярашлы 69 проект эшләнгән. Ҡала иҡтисадына 91 миллиард һум күләмендә инвестициялау көтөлә.

✓1 июнгә Өфөлә 89,6 мең квадрат метр торлаҡ йорт төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылған. Был быйылғы менән сағыштырғанда 106,7 процент тәшкил итә. Йыл аҙағынаса 690-700 мең квадрат метр торлаҡ төҙөләсәк. Иҫке йорттарҙа йәшәүсе 5 мең кеше яңы торлаҡҡа күсерелгән. Быйыл тағы ла 5,6 мең кешене яңы йорттарға күсереү ҡуҙаллана. Шулай уҡ 39 йортта капиталь ремонт үткәреләсәк, 80 лифт алмаштырыласаҡ.

✓Быйыл Өфөлә 2,5 мең урынға яңы 10 балалар баҡсаһы асыласаҡ. Балалар баҡсалары төҙөүгә республика ҡаҙнаһынан1,3 миллиард һум аҡса бүленгән.

✓Һуңғы осорҙа баш ҡала уртаса эш хаҡы 8 процентҡа артып, 21960 һумға еткән. Хакимиәт башлығы билдереүенсә, былтырғы йыл менән сағыштырғанда,эшһеҙлек 15 процентҡа кәмегән, ә вакантлы эш урындары 2 тапҡырға артып, бөгөнгө көндә финанс көрсөгөнән алдағы кимәлгә еткән.

✓Баш ҡала хакимиәте башлығы әйтеүенсә, 12 июндә үтәсәк байрам программаһы сағыу һәм күңелле булмаҡсы. 12 июнь көнө ҡаланың 7 районында ла халыҡ байрамдары үтәсәк. В.И. Ленин исемендәге майҙанда районыдарҙың дөйөм концерт программаһы уҙасаҡ. Быйылғы милләтара татыулыҡты үҫтереү йылын символлаштырып, майҙанда ете тирмә урынлаштырыласаҡ. Үҙешмәкәр коллективтар сығыш яһаясаҡ. Рәсәй көнө сиктәрендә Мәскәү, Силәбе, Ырымбур, Тольятти, Түбәнге Новгород ҡалаларынан һәм республика районыдарынан килгән ижади коллективтар сығыш яһаясаҡ.

ЙӘШӘЙЕШ ЗАКОНДАРЫ

# МУЗЫКА ХАЛЫҠТАРҘЫ ДУҪЛАШТЫРА...



## ә күршеләрҙе дошманлаштырыуы мөмкин

**Йоҡлап ятҡан сағығыҙҙа ниндәйҙер күңелле компания тауыштарына, күршеләрегеҙҙең ыҙғышыуына, эшлекле берәүҙең перфоратор менән стеналарҙы дерелдәтеүенә, урамда үҫмерҙәрҙең пиротехник уйынсыҡтар шартлатыуына, эт өрөүенә уянып, ҡабаттан йоҡлап китә алмай ыҙаланған сағығыҙ булғандыр, шулай бит? Ошо көндәрҙә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан әҙерләнгән "Төнгө осорҙа граждандарҙың тыныслығын тәьмин итеү тураһында"ғы Закон проекты күмәк тикшереүгә сығарылды. Законға ярашлы, төнгө тынлыҡты, кешеләрҙең тыныслығын боҙған осраҡта хоҡуҡ боҙоусыға административ яуаплылыҡҡа тарттырылыу язаһы янай.**

Ә шулай ҙа закон нимә тураһында? "Төнгө осорҙа граждандарҙың тыныслығын тәьмин итеү тураһында"ғы Закон проекты буйынса төндә хоҡуҡ боҙоуҙарға түбәндәге эштәр: пиротехник шартлатҡыстар ҡулланыу, ҡысҡырыу, һыҙғырыу, йырлау, бейеү, музыкаль инструменттарҙа уйнау, фатирҙа ремонт эшләү, йөк тейәү йә бушатыу эштәре менән шөғөлләнеүҙәр инә. Закон буйынса эш көндәрендә урындағы ваҡыт менән 23 сәғәттән 7 сәғәткәсә, ә ял һәм байрам көндәрендә 22 сәғәттән 9 сәғәткә тиклем ваҡыт арауығы "төн" тип иҫәпләнә.

Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев үҙенең интернеттағы блогында Законды тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың фекерҙәре, тәҡдимдәре бик мөһим булыуын билдәләне. "Фекер алышыуҙарҙың профессиональ юҫыҡта барыуы, ҡоро тәнҡиттең, ҡырҡа баһаларҙың күпселекте тәшкил итмәүе ҡыуандыра. Юридик нигеҙле тәҡдимдәр күп һәм беҙ уларға ҡолаҡ һаласаҡбыҙ", - тине ул. Йәмәғәтселек фекере буйынса, полицейскийҙарҙы махсус тауыш үлсәүсе приборҙар менән тәьмин иткәндә генә был закондың тулы үтәлеүенә өлгәшергә мөмкин буласаҡ. Ҡайһы берәүҙәр төнгө күңел асыу учреждениеларының торлаҡ йорттарға йәнәш урынлашыуы, шунлыҡтан уларҙан ағылған музыканың, ял итеүселәр тауыштарының ҡамасаулауын билдәләй. Көндөҙ ял итеүсе төнгө сменала эшләүселәрҙең тыныслығын һаҡлау кәрәклеген яҡлаусылар ҙа бар. Ҡыҫҡаһы, Ҡоролтай рәйесенең интернеттағы блогынан ҡайһы бер фекерҙәрҙе килтерәйек:

**R_galimov:** Төнгө рестора ндар халыҡты социаль хеҙмәтләндереү урыны һаналамы? Унда музыкаль инструменттарҙа уйнау, законда һаналған башҡа эштәр ҙә законды боҙоу иҫәпләнәме? Был ресторан биләмәһе булып ниндәй майҙанлы территория иҫәпләнә? Ҡайһы бер ошондай урындар күп ҡатлы торлаҡ йорттарға тоташҡан була. Был осраҡта ни эшләргә?

**f_karimov:** Йорттар менән тоташып тороусы төнгө рестора ндарҙың һәм башҡа эсеү-күңел асыу йорттарының эшмәкәрлеген тыйыу буйынса закон ҡабул итергә, торлаҡ йорттарҙа урынлашҡан ошондай клубтарҙың эш ваҡытын, төнгө ваҡытта эшләмәҫлек итеп, сикләргә кәрәк. Бының менән, беренсенән, төндә тыныслыҡ һаҡлау мәсьәләләрен хәл итәбеҙ, икенсенән, бындай нөктәләрҙең нормаль эшләүенә мөмкинлектәр булдырабыҙ. Бының менән бик күп проблемаларҙы, әйтәйек, уттан һаҡланыу мәсьәләләрен дә бер ыңғайҙа хәл итәсәкбеҙ.

**Patriot_1000:** Миндә иң тәүҙә: "Граждандарҙың тыныслығын төнгө ваҡытта ғына түгел, ә тәүлек әйләнәһенә һаҡларға кәрәкмәйме икән?" - тигән һорау барлыҡҡа килде. Сөнки бынан да беҙ бер ни ҙә юғалтмаясаҡбыҙ, ял иткән, көс туплаған кешеләр - беҙҙең хазинабыҙ, уларҙан бөтә йәмғиәт өсөн файҙалы эштәр көтөргә мөмкин. Закон сығарыусы, моғайын, иң тәүҙә хоҡуҡ һаҡлауҙы төнгө осорҙа ғына ойоштороуҙы кәрәгерәк тип һанайҙыр. Граждандарҙың тыныслығын көндөҙгө ваҡытта ла һаҡлау кәрәклеген дә һәр кем аңлай. Икенсе аҙым, бәлки, ошо юҫыҡҡа йүнәлтелер. Әммә граждандарҙың тыныслығын һаҡлау күп кенә нескәлектәргә, ә уларҙы хәл итеү мәсьәләһе Федераль кимәлдәге закондар ҡабул итеүгә лә бәйләнгән. Был закон йәмғиәтте төндә сигналдарҙы ҡысҡыртып, музыка аҡыртып машиналарҙа йөрөүҙәрҙән, күп фатирлы йорттарҙа, дөйөм ятаҡтарҙа ҡысҡырып йырҙар йырлауҙан, музыкаль инструменттарҙа уйнау кеүек күренештәрҙән азат итергә тейеш.

Ә минең кухнялағы һөйләшеүҙәрем ял итеүсе күршемә ҡамасаулай икән, закон минең тормошомдоң ул яғын көйләргә тейеш түгел. Беренсенән, минең менән һөйләшеүсе кешенең ҡолаҡҡа "ҡатыраҡ" булыуы, икенсенән, фатирҙарҙа тауыш изоляцияһының насар булыуы мөмкин бит әле. Өсөнсөнән, беҙ бейемәй, йырламай, музыка ҡысҡыртмай ғына ултырабыҙ һәм был закон боҙоуға инмәй. Дөйөм алғанда, бик яҡшы закон, әммә етешһеҙлектәре лә юҡ түгел.

**Рәүфә Илһамова, уҡытыусы:** Был проект тураһында ишеткәс, уны йылы ҡабул иттем, балаларҙың төндә урамда йөрөмәүенә лә ярҙам итһә, бигерәк тә шәп булыр ине. Эргә-тирәләге халыҡтың тыныслығын һаҡлау маҡсатында эшләгән закон кәрәк ине күптән. Йәмғиәттә этикет нормаларын һанға һуҡмау күҙәтелә бит: төнгө ваҡытта, бигерәк тә йәйге көндәрҙә урамдарҙа иҫерек тауыштар, талашыуҙар, тауыштарын иң юғары кимәлгә асып машиналарҙа музыка тыңлау һәм башҡалар булып тора. Транспорт бәйләнешен бер минутҡа ғына ҡағиҙәләрһеҙ күҙ алдына килтерәйек. Ул сағында барыһының ғүмере өсөн дә ҡурҡыныс янай. Шуға күрә имен йәшәү өсөн ҡағиҙәләр һәр ваҡыт кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Төндә музыканы ҡолаҡсындар (наушниктар) менән тыңларға, стеналар йоҡа булһа, шыбырҙап һөйләшергә, бейергә дәрт итһәң, төнгө клубтарға барып бейеп килергә тәҡдим иткәйне бер блогер. Белгестәр ҙә проблемалы хәлгә тарыған саҡта мөнәсәбәттәрҙе йылы, ихтирамлы һөйләшеү ярҙамында көйләргә кәңәш итә. Шулай ҙа, бәхәсле хәл килеп тыуа ҡалһа, белдекһеҙҙәргә һәм башҡаларҙы ихтирам итмәүселәргә иң ахыр сиктә ошондай закон барлығы тураһында иҫкә төшөрөргә ҡала. Йоҡоғоҙ тыныс булһын!**

Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠЫЯР АШАМАҒЫҘ...

## Сит илдән индерелгәнен, әлбиттә

**30 майҙан Рәсәйҙә Испаниянан һәм Германиянан йәшелсә индереү тыйылған, ә Каталония һәм Бавариянан килтерелгән помидор һәм ҡыярҙар һатыуҙан алынған. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, был илдәрҙә "йәшелсә" инфекцияһынан меңдән ашыу кеше зыян күргән.**

Һаҡланыу саралары Германияла башланған киҫкен эсәк инфекцияһы менән бәйле. Энтерогеморрогик эсәк таяҡсаһы тыуҙырған был инфекциянан Германияла ун биш кеше үлгән, меңгә яҡын кеше ауырыған. Гамбургтың Гигиена инситуты мәғлүмәттәренә ярашлы, инфекция сығанағы булып ҡыярҙар тора. Әммә һаулыҡҡа зыянлы йәшелсәләр тураһында аныҡ мәғлүмәт әлегә тиклем билдәһеҙ. Роспотребнадзорҙың бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итеүенә ҡарамаҫтан, Европа Союзы инфекция сығанағы, ҡурҡыныс аҙыҡ-түлек һәм инфекцияны туҡтатыу өсөн күрелгән саралар тураһында бер ниндәй мәғлүмәт бирмәй. Роспотребнадзор етәксеһе, РФ баш дәүләт санитар табибы Геннадий Онищенко һүҙҙәре буйынса, Рәсәй сауҙа селтәрҙәрендә Германия һәм Италиянан килтерелгән йәшелсә менән һатыу итеү тыйылған. Илдең баш табибы һатып алыусыларға иғтибарлыраҡ булырға һәм Рәсәйҙә етештерелгән тауарҙарҙы һатып алырға кәңәш итә.

Төрлө мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Испаниянан килтерелгән ҡыярҙарҙан бигерәк тә Германияның төньяғында йәшәүселәр зыян күргән. Гамбургта эсәк таяҡсаларынан - 400, Түбәнге Саксонияла - 141, Шлезвиг-Гольштейнда 250 ағыуланыу осрағы теркәлгән. Был сиргә дусар булыусыларҙың күбеһе - ҡатын-ҡыҙҙар.

Германияға туристик турҙар ойоштороусылар һәм туристар өсөн Ростуризм махсус рәүештә хәтер дәфтәре төҙөгән. Документта әйтелеүенсә, Германияла киҫкен эсәк таяҡсаһы тыуҙырған инфекция осраҡтары теркәлеү сәбәпле, Роспотребнадзор термик эшкәртеү үтмәгән йәшелсә ашарға кәңәш итмәй. "Әгәр ҙә бындай йәшелсә ашап өлгөрһәгеҙ һәм эсәк инфекцияһының тәүге билдәләре барлыҡҡа килгән икән, тиҙ арала медицина ярҙамына мөрәжәғәт итегеҙ", - ти Ростуризм.

Әйткәндәй, Башҡортостан кибеттәре кәштәләренән Мысырҙан (Египет) килтерелгән картуф та алынған. Баҡтиһәң, йыраҡ илдән килтерелгән картуф һоро бактериаль үңәҙ менән зарарланған икән. "Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә ситтән индерелгән картуфты тикшергән саҡта был сир йыш асыҡлана. Башҡортостанда зарарлы картуф осрағы теркәлгәне юҡ, әммә һаҡлыҡ сараһында ситтән был йәшелсәне индереүҙе тыйырға ҡарар ителде", - тиҙәр БР-ҙың Россельхознадзор идаралығында.

Былтырғы ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә республикаға сит илдәрҙән картуф күпләп килтерелә. Магазиндар башлыса Голландия, Пакистан, Төркиә, Афғанстан, Израиль, Кипр картуфы менән сауҙа итә. Улар араһында Мысыр картуфының өлөшө 10-15 процент тирәһе. Башҡортостан баҙарҙарында Алтай, Омск, Нижегород өлкәһенән килтерелгән картуф 30 процент тәшкил итә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Кесерткән



❖ Кесерткән К, В2, С витаминдарына бай. Уны төрлө турамаларға, ашҡа ҡушҡанда әҙ генә май ҙа өҫтәп ебәрһәгеҙ, организмда А витамины ла барлыҡҡа килә. Кесерткәндең витаминдар сығанағы һәм төрлө органик кислоталарға бай булғанын иҫәпкә алып, уны әле организмды нығытыу өсөн ҡулланып ҡалырға кәрәк.

❖ 10 грамм кесерткән япрағын бер стакан ҡайнар һыу менән төнәткәс, берәр ҡалаҡлап ашар алдынан 15-20 минут ҡала эсергә. Дауаны егерме көн дауам итһәгеҙ, бар ағзаларҙың да ҡан тамырҙары нығыныр.

❖ Берәр балғалаҡ кесерткән япрағы, гөлйемеш, миләш емеше, мәтрүшкә, һары мәтрүшкәне сәй итеп көнөнә өс тапҡыр эсеү организмда матдәләр алышыныуын яҡшырта, унын ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығын көсәйтә. Әгәр ҙә был сәйҙе көнөнә ике тапҡыр ғына эсәһегеҙ икән, дауаны өс аҙна, ә көнөнә өс тапҡыр эсеп, ике аҙна дауам итегеҙ.

Кесерткән япрағы, гөлйемеш, миләш, балан емештәренән торған төнәтмәне өс аҙна эсеү ҙә яҡшы һөҙөмтә бирә.

❖ Кесерткәнде үҙен генә йәки миндеккә ҡушып бәйләп, быуҙа тотоп алғас, һыҙлап йонсотҡан тубыҡтарҙы, башҡа быуындарҙы йылы мунсала сабырға кәрәк. Аллергия булып, тән тиреһе ялҡынһынып торһа, экзема, диатез булһа, кесерткән япрағын, дегәнәк тамырын, цикорий, эт дегәнәге (череда) ҡушып, йүнәлгәнсе эсергә. Йәки уларҙың барыһын да бер тигеҙ өлөштә алып, 1 ҡалаҡ үлән ҡушылмаһын ҡайнар һыу менән төнәткәс, өскә бүлеп, ашар алдынан 15-20 минут ҡалғас йылы көйө эсергә. Дауаны ике ай дауам итергә.

❖ Эсәктәрҙең хроник сирҙәре булғанда тирегә төрлө нәмә сығып йонсотһа, 20,0 грамм кесерткән япрағы, 20,0 грамм ҡайын япрағы (май айында йыйылғаны яҡшыраҡ), 15,0 грамм әнис орлоғо, 20,0 грамм эт муйылы ҡайырыһы (кора крушины ольховидной) алып, ярты литр ҡайнар һыу менән төнәтеп, көнөнә өс тапҡыр ашағандан һуң эсергә. Ике көн эсендә төнәтмәне эсеп бөткәс, яңынан төнәтергә. Һөҙөмтә булһын өсөн 12-14 көн дауам итергә.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЙЫЛҒА БАШЫНДА ЙӘШӘП ТӘ..

## һыуға сарсай халыҡ

**Аҙнай, Хажы ауылдары Ишембай районының иң матур төбәгендә урынлашҡан. Бындағы тәбиғәттең матурлығына иҫең китерлек. Гүзәллеккә бағып, һауаһын һулап, һыуҙарын эсеп туйғыһыҙ. Ерҙәге ожмахҡа бәрәбәр Юрматы еренең был мөйөшө. Шундай гүзәллеккә ҡарап, ошо ерҙә тыуып үҫкән Ҡараһаҡал юҡҡа ғына ер-һыуын яҡлап яуға күтәрелмәгән икән, тип уйлап ҡуяһың.**

Матурлығы менән генә түгел, бәрәкәтле булыуы менән дә дан ҡаҙанған был ерҙәр. Бейек-бейек тауҙары тотошлай тиерлек йүкә урмандары менән ҡапланған. Ул сәскә атҡан осорҙа еҫенән баштар әйләнә хатта. Тирә-яҡтан ғына түгел, республиканың алыҫтағы районларынан да умартасылар умарталарын тейәп килеп, тонна-тонна бал алып ҡайтып китә бынан. Шулай ҙа был ерҙең төп хазинаһы алтындан да ҡиммәт эсәр һыуылыр, моғайын. Берғамыт, Шиҙе йылғаларының һыуы үҙенең таҙалығы, тәмле, шифалы булыуы менән башҡаларҙан күпкә юғары. Ысын мәғәнәһендә тере һыу ул.

Бынан утыҙ йылдар элек Стәрлетамаҡ больницаһына эләккән әсәйемдең: "Кайҙан алаларҙыр - һыуҙары шул тиклем тәмле, туктауһыҙ эстем, хатта сәйҙе ташлап шуға ғына күстем", - тип әйтеүе әле лә иҫемдә. Эйе, Стәрлетамаҡ халҡы, Ишембай районының тиҫтәләгән ауылдары Берғамыт, Шиҙенең көмөштәй саф, шифалы һыуын эсеп кинәнә әммә... ошо йылғаларҙың башында ултырған, бәлки, ошо һыу өсөн генәлер ҙә ата-бабалары был урынға килеп төпләнгән Хажы, Аҙнай ауылдары халҡы түгел. Улар ысын мәғәнәһендә бөгөн эсәр һыуға мохтаж. Ҡул һыҙымы ғына ерҙә ер аҫтынан теш ҡамаштырырҙай һалҡын, саф һыу урғыла һәм шунда уҡ йыуан торбаларға эләгеп, Стәрле тарафтарына юллана, ә хажыларға, аҙнайҙарға сайпындыһы ғына эләгә. Уның да хлорға буталанып, һаҫыҡ еҫ сығарып торғаны.

1965-1967 йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһын һыу менән тәьмин итеү маҡсатында Берғамыт, Шиҙе йылғаларының һыуын тотоноу мәсьәләһе күтәрелеп сыҡҡас, йылғалар башында ултырған ауылдар халҡы, аҙағы ни менән бөтөрөн һиҙенгәндәй, был эшкә ҡаршы сыға. Шулай ҙа бик матур вәғәҙәләр уларҙың ҡаршылығын һындыра, дөрөҫөрәге, халыҡ фекере бигүк һанға ла һуғылмай ул саҡта. "Стәрлетамаҡ һыу каналы" предприятиеһы һыуға тулы хоҡуҡлы хужа булып алғас, бирелгән вәғәҙәләр, атап әйткәндә, ауыл урамдарына асфальт түшәү, Аҙнай, Хажы, Бәпкә ауылдарында етерлек күләмдә һыу колонкалары ҡуйыу, Берғамыт йылғаһында быуа төҙөү һәм башҡалар онотола. Һыуҙың өстән бер өлөшө йылғаларҙа ҡаласаҡ, тигәне лә ҡоро ҡағыҙҙа ғына ҡала. Элекке килешеүҙәрҙә, һыу үткәрелгән ауылдар халҡы һыуҙы бушлай ҡулланасаҡ, тиелһә, хәҙер килеп уны аҡсаға һатып алырға мәжбүрҙәр. Һәм шуныһы ғәжәп: ауыл халҡы өсөн һыу Стәрлетамаҡта йәшәүселәргә ҡарағанда ике тапҡырға ҡиммәтерәккә төшә.

Аҙнай ауылы старостаһы Сәғит Кинйәбулатов һәм Ишәй ауылы вәкиле, халыҡ кәсептәрен тергеҙеүсе билдәле эшҡыуар Рауил Харисов менән яҙмышы бигерәк тә аяныслы булған Бәпкә урамында бәҫып торабыҙ. Урам ситенән генән һаҫыҡ еҫ сығарып йылғасыҡ аға.

- Бына ошо инде Бәпкә халҡының һыу тип күҙ терәгәне. Уныһы ла хлорлау ҡоролмаһынан артып аҡҡаны ғына. Был һыуҙы эсеп, Бәпкә кешеләренең тештәре ҡойолоп бөттө, эсәк-ашҡаҙандары нисек сыҙайҙыр инде... - тине Сәғит ҡусты.

- Уның ҡарауы, магазиндан белизна, кер һабыны һатып алып тормайбыҙ. Керҙәребеҙҙе кистән ошо һыуға батырып ҡуябыҙ ҙа, иртән сайҡатабыҙ ҙа эләбеҙ, - ти янъыбыҙға килгән бер апай.

Бәпкә урамы ауыр йөк машиналары яҙлы-көҙлө йөрөүҙән йырғысланып бөтөп, үткеһеҙгә әйләнгән.

- Хлорлау ҡоролмаһына ауылды урап уҙыусы юл илтһә лә, уны таҙартып торорға кәсләрен йәлләп, ҡурҡыныс йөк тейәгән машиналар ауыл урамдары аша уҙа. Был бит башҡа һыймаҫлыҡ хәл, - ти ауыл старостаһы.

Һыу башындағы ауылдар халҡы сход ойоштороп, һыу мәсьәләһен уртаға һалып һөйләшеп, Ишембай муниципаль районы хакимиәтенә, шулай уҡ "Ишембай һыу каналы" һәм "Стәрлетамаҡ һыу каналы" предприятиелары етәкселегенә мөрәжәғәт менән сыға. Улары иһә комиссия төҙөп, бындағы хәл менән танышыу өсөн килеп етә һала. Әммә ул килер алдынан ғына ауыл урамынан аҡҡан һыуҙағы хлор ҙа кәмей, Берғамыт йылғаһындағы һыу ҙа бермә-бер арта һәм комиссияға эш тә ҡалмай.

Сәғит Кинйәбулатов һөйләүенсә, тәүге килешеүҙә Стәрлетамаҡҡа юлланған һыу торбаларының диаметры 700 миллиметрҙан артмаҫҡа тейеш булған, әммә улар урынына 1000 миллиметрлыһы һалынған һәм йылғаларға китергә тейешле һыу ҙа шуларға инеп юғалған.

- "Стәрлетамаҡ һыу каналы" предприятиеһы етәкселегенә һыу алыуҙы кәметегеҙ тип барғайным: "Һыу бик кәрәккәс, ҡойо ҡаҙығыҙ", - тип кенә яуап бирҙеләр. Ни өсөн улар түгел, ә беҙ, һыуҙың төп хужалары, ҡойо ҡаҙырға тейешбеҙ?" - ти Сәғит ҡусты аптырау ҡатыш.

Берғамыт, Шиҙе йылғаларында "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән бағыр, бәрҙе, ҡыҙыл балыҡтар заманында мыжғып торған. Хәҙер улар юҡ инде. Шулай уҡ йылғалар ярҙарында үҫкән тал-өйәңкеләр ҙә һыуһыҙ ҡороп бөтөп бара. Үҙенең ҡушылдыҡтары юғалғас, Һәләүек йылғаһы ла хәлһеҙ генә аға. Тәүге килешеүгә ярашлы, уның буйында "минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе" ысулы менән төҙөлгән биш плотина бер йылға ла сыҙамай юҡҡа сыҡҡан. Үрҙә исемдәре телгә алынған ауылдар ҡараған Эткол ауыл Советы биләмәләрендә булғанда урындағы халыҡтың аһ-зарын байтаҡ ишетергә тура килде. Ауыл хакимиәтенең көнүҙәк, экологик мәсьәләләргә, ер-һыуға, ғөмүмән, тәбиғәткә ныҡлап иғтибар итә башлағанын көтөүен белдерҙе халыҡ. Был төбәктә Мәскәүҙән һәм башҡа сит яҡтарҙан килеүселәрҙең йышлауына, уларҙың был тирәне һунар итеү төбәгенә әйләндереүенә лә ризаһыҙлыҡ белдерҙеләр. "Һунар итә торғас, айыу-мышыһы ла, башҡаһы ла ҡалманы бит инде урмандарыбыҙҙа", -тинеләр.

Аҙнай эргәһендә урынлашып, гектарлаған майҙанды биләгән теплица ла бында бәлә генә килтергән. Уның полиэтилен япмалары осоп, тирә-яҡты тултырған. Урмандар ҙа, һыу буйҙары ла, туғайҙар ҙа тулған был полиэтилен менән. Етмәһә, теплица урындағы халыҡтың барлы-юҡлы һыуын уртаҡлашып, тәүлегенә 100-әр тонна Шиҙе һыуын тотона, ә уның хужаһы әҙергә хәҙер булып йәшәй, ҡоҙоҡ быраулауҙы уйына ла алмай.

- Йәйен йылғалар ҡороп бөткәс, малдарҙы һыу эсерер өсөн 4-5 саҡрым алыҫлыҡтағы Һайран Шиҙеһенә ҡыуабыҙ. Һыуҙары аҙ ҡалғас, йылғалар ҡышын төбөнә тиклем туңа. Үҙебеҙ ҙә, малдар ҙа иретеп ҡар һыуы эсергә мәжбүрбеҙ. Килде бит афәт, - ти Хажы ауылы старостаһы Юнир Ғәлиәскәров.

Һәләүек буйҙарында урынлашҡан һәм колонкаларҙан Берғамыт, Шиҙе йылғалары һыуын эскән башҡа ауылдарҙың старосталары, аҡһаҡалдары менән дә осрашып һөйләштек беҙ. Йылғалар беҙҙеке, һыу үткәргестәр ҙә беҙҙең ерҙәр аша уҙа, шуның өсөн һыу беҙҙең өсөн буш, бик булмаһа стәрлеләр түләгән хаҡтан артмаҫҡа, һыу колонкалары даими рәүештә йүнәтелеп торорға тейеш, тигән фекерҙе әйтте улар. Уҙған йылғы ҡоролоҡ биргән һабаҡты иҫкә төшөрөп, Һәләүек йылғаһында быуа быуыу мәсьәләһен дә күтәреп сыҡтылар.

Яңы Әптектә булғанда ауыл аҡһаҡалдары урындағы халыҡтың бөтөнләй пай ерҙәрһеҙ ҙә тороп ҡалғанын әйтте.

- Районның элекке етәкселеге беҙҙән һорап та тормай "Агиҙел" совхозы ерҙәрен тотошлайы менән Мәскәү кешеһенә 49 йылға арендаға бирҙе лә ҡуйҙы. Үҙ еребеҙҙә ерһеҙ ултырабыҙ хәҙер. Әлеге көндә пай ерҙәрен бүлеп алыу өсөн айҡашып йөрөгән көнөбеҙ, - тине Салауат һәм Алис ағайҙар.

Сәғит Кинйәбулатов иһә беҙҙе оҙатҡанда ныҡлы һәм ышаныслы тауыш менән: "Иркенләп тотонорлоҡ һыуыбыҙҙы ҡайтарып алмайынса туҡтамаясаҡбыҙ. Был мәсьәлә урында хәл ителмәһә, Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайға ла сығасаҡбыҙ, Президентҡа ла барып етәсәкбеҙ", - тип ҡалды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҙнай тарафтарына юлланыр алдынан ғына атаҡлы күрәҙәсе Ванга тураһында телевизорҙан тапшырыу күрһәткәйнеләр. Унда ул: "Өсөнсө Бөтә донъя һуғышы эсәр һыу өсөн буласаҡ", - тип яр һалғайны һәм мин уның был һүҙҙәренә шикләнә биреп ҡарағайным. Хәҙер килеп, йәғни Берғамыт, Шиҙе йылғалары башында һыуға сарсаған халыҡ менән аралашып ҡайтҡас, Ванганың һүҙҙәре хаҡҡа сығырына ышанып уҡ ҡуйҙым. Сөнки Ишембай ерендә эсәр һыу өсөн әле үк алыш бара. Был алышҡа ауыл старосталары, аҡһаҡалдары етәкләгән ябай халыҡ күтәрелгән, ә ауыл хакимиәттәре, ғәҙәттәгесә, ситтән генә күҙәтә.**

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**
**Ишембай ҡалаһы.**

**Гөлназ ИШЕМБАЕВА**
**фотолары.**



Яңы Әптек ауылы аҡһаҡалдарын һыу ҙа, ер мәсьәләләре лә борсой.



Бәпкә урамы бына ошо хәлдә.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

**Башҡорт халҡының тарихында иң бөйөк, айырыуса дан һәм бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт ҡаҙанған шәхестәребеҙҙең береһе, батырлыҡ һәм ил мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, башҡорт милләтенең рухи ҡаһарманлыҡ символы ул Салауат Юлаев. Милли герой, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы полководецы, шағир-импровизатор. Кешелек донъяһында милли-азатлыҡ хәрәкәттәренең һоҡланғыс етәкселәренең береһе.**

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ

## (1754-1800)



Салауат Юлаев әүәлге Ырымбур губернаһының Өфө провинцияһы Себер даруғаһы Шайтан-Көҙәй йорто (олосо) (хәҙер Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Тәкәй ауылында арҙаҡлы башҡорт феодалы Юлай Аҙналин ғаиләһендә тыуған. Салауаттың атаһы элекке башҡорт ихтилалдарында ҡатнашып, күнелендә Рәсәй колонизаторҙарына ҡарата нәфрәт һаҡлаған, халыҡ яҙмышы өсөн тәрән борсолоу кисереп йәшәгән кеше була. Крәҫтиәндәр һуғышы башланғас, Юлай Салауаттың иң яҡын таяныһы, хәрби арҡаҙашы булып китә, артабанғы бөтөн ғүмерен уның ауыр яҙмышы менән уртаҡлай. Бөйөк батырыбыҙҙың әсәһе тураһында рәсми мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Фольклор материалдары буйынса, ул белемле ҡатын була (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа әйтелеүенсә, исеме Аҙнабикә). Салауат ғаиләлә, ғөмүмән, бик яҡшы тәрбиә ала.

Салауаттың тыуған йылы тураһында ике төрлө ҡараш йәшәп килә. Беренсеһе буйынса, Салауат 1752 йылда тыуған, тип иҫәпләнелә. Был дата 1797 йылдың 19 майында төҙөлгән Балтик портында торосы каторга тотҡондары һаҡындағы "Статьялы исемлек" тигән документҡа ҡарап билдәләнгән. (Унда Салауат - 45, уның атаһы Юлай Аҙналин - 75 йәштә, Ҡәнзәфәр Усаев 62 йәштә тип күрһәтелгән.) Ә инде Салауаттың тыуған айын, көнөн совет дәүере тарихсылары, йылдың уртаһына тура килтереп, шартлы рәүештә (йәки тоҫмаллап) 16 июнь тип алған. (Был хаҡта минә заманында хәҙер инде мәрхүм тарихсы-ғалим Әбүбәкер Усмановтан һорашып белешергә тура килгәйне.) Әйткәндәй, 1952 йылда Салауат Юлаевтың тыуыуына 200 йыл тулыуға арналған юбилей тантаналары нәҡ әлеге беҙ беренсе тип атаған версия буйынса уҙғарылды. Әммә 70-80-се йылдарҙа Салауаттың тыуған йылы мәсьәләһендә был ҡараш шик аҫтына алына башланы. Милли ҡаһармандыбыҙҙың биографияһын өйрәнеүсе күп кенә авторҙар уның хаҡында 1754 йылда тыуған булырға тейеш тигән фекергә төрлө яҡлап нигеҙләнеләр.

Салауат ун алты-ун ете йәштәрҙә зирәк аҡыллы, урта буйлы булыуына ҡарамаҫтан, баһадирҙарса мыҡты кәүҙәле, ҡыйыу, тәүәккәл бер уҙаман булып үҫеп етә. Ф. Д. Нефедов уның, бил бирмәҫ батыр, көслө һәм ҡеүәтле бәһлеуән булыуы менән бергә, уҡымышлылығы һәм тәрән белемлелегенә айырыуса баҫым яһап, быны нисек яҙа: "Әммә Салауат тупаҫ физик көскә эйә булыуысы ғына түгел. Ул - ғилем эйәһе һәм шағир. Ул Ҡөрьәнде һәм шәриғәтте белә, үҫмер алдында ҡарттар хөрмәт күрһәтеп баш эйә, уның исеме һәр кемдең телендә, уның уҡымышлылығынан муллалар ғына түгел, хатта ахундар үҙҙәре лә ғәжәпкә ҡала". Аҡыл һәм белем унда хоҙайҙан, тиҙәр улар. Нәҡ ошо 16-17 йәштәр тирәһендә ул арҙаҡлы ил сәсәне Байыҡ Айҙар менән осрашып, уның үҙенә төбәп әйтелгән нәсихәттәрен тыңлай.

Салауатта, ти Ф. Д. Нефедов, поэтик тойғо бик иртә уяна. Ожмахтай тыуған Урал тәбиғәте, халыҡ тарихы, башҡорт батырҙары тураһында хикәйәттәр уның күңелендә илаһи хистәр тыуҙыра. Профессор Ә. И. Харисов һүҙҙәре менән әйткәндә, Салауат үҙендә башҡорт халҡының иң элек ике һәйбәт сифатын - уның героизмын һәм поэтик талантын кәүҙәләндергән. Ул милли әҙәбиәтебеҙ тарихында боронғонан килгән сәсәнлек, импровизаторлыҡ һәм бер үк ваҡытта, ҡауырый ҡәләм тотоп, яҙма рәүештә ижад итеү традицияларын дауам итеүсе, уларҙың юғары өлгөләрен тыуҙырыусы булараҡ урын ала.

Салауат ижады тураһында һөйләгәндә уның мираҫының яҙмышы мәсьәләһенә туҡталып үтмәйенсә булмай. Был мираҫ, билдәле булыуынса, ике өлөштән тора. Беренсеһе - уның шиғырҙары, икенсеһе - Салауаттың Крәҫтиәндәр һуғышы осорона ҡараған хаттары, фармандары, указдары, күрһәтмәләре, бойороҡтары.

Салауаттың поэтик мираҫының күләме хәҙер 500 юлдан артып китте. Уны йыйыу, барлау, баҫтырып сығарыу эше - бер быуаттан артыҡ дәүер эсендә бер нисә быуын тикшеренеүселәр тарафынан алып барылған фиҙакәр хеҙмәт емеше.

Салауат Юлаев ижады - мең йыллыҡ башҡорт поэзияһы тарихында саф мөхәббәт, тыуған ил, халыҡ тойғоһо менән һуғарылған, илаһи көс, ҡеүәт аңҡып торған юғары шиғриәт өлгөһө. Шағир Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанға тиклем үк тәрән хисле лирик шиғырҙары һәм йырҙары менән танылған, тип фараз итә алабыҙ. Уның изге тыуған илебеҙгә мәңге бөтмәҫ йыр булып яңғыраған "Уралым" шиғыры - нәҡ шундай әҫәрҙәрҙең береһе.

Салауат үҙенең саф йөрәген, бөйөк поэтик талантын халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә арнаны, башҡорттоң ҡөҙрәтле поэтик һүҙе уның ижадында халыҡ мәнфәғәте өсөн үткер ҡоралға тиң ҡуйылды. "Салауат йыр йырлаһа,- тип яҙҙы Р. Г. Игнатьев, - кешеләр һуғышҡа ҙур теләк менән барҙылар, яраланғандар һыҙланыуҙарын тойманылар, аслыҡтан һәм һыуыҡтан ҡурҡманылар, үлгәндә лә шат үлделәр".

Күләм яғынан ҙур булмаһа ла, Салауат Юлаев шиғырҙары "тәрән йөкмәткеле, халыҡсан йүнәлешле һәм оригиналь поэтик йөкмәткеле булыуы менән ҡиммәт", был әҫәрҙәр "башҡорт әҙәбиәтенең аҫыл ҡомартҡыларын тәшкил итә".

Салауат мираҫының икенсе өлөшө яҙма рәүештә һаҡланған документаль сығанаҡтарҙан тора. Уларҙың күпселеге төрки теленән руссаға тәржемәлә, ҡайһы берҙәре, беҙҙең бәхеткә, Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙылған хәлдә, йәғни оригиналда, архив материалдары араһында урын алған.

Халыҡ батырының, телдән телгә күсеп, һуңғыраҡ дәүерҙәрҙә ҡағыҙға теркәлгән тетрәткес көскә эйә йәнә бер әҫәре "Салауат телмәре" тип атала. Был телмәр 1773 йылдың октябрь аҙаҡтарында Пугачев яҡлы булып баш күтәргән башҡорт яугирҙары алдында Башҡорт иленең азатлығы өсөн көрәшкә өндәүсе, рухландырыусы өндәмә рәүешендә әйтелгән.

1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы Рәсәй тарихында халыҡ массаларының феодаль-крепостной иҙелеүгә ҡаршы иң ҙур һәм иң дәһшәтле күтәрелешенә әйләнә. Меңәрләгән башҡорттар пугачевсылар сафына баҫа, баш күтәреүселәргә 1773 йылдың сентябренән алып 1774 йыл аҙаҡтарына тиклем батша армияһының заманы өсөн сағыштырғыһыҙ яҡшыраҡ ҡоралланған ғәскәри берәмектәренә ҡаршы ҙур-ҙур алыштарҙа ҡара-ҡаршы тороп һуғышырға тура килә.

1773 йылдың октябрь урталарында, Өфө провинция канцелярияһының күрһәтмәһен үтәп, Шайтан-Көҙәй олосо старшинаһы Юлай Аҙналин үҙенең 19 йәшлек улы Салауат ҡулы аҫтына 100-гә яҡын һыбайлылар отрядын Стәрлетамаҡ пристаненә, кенәз Ураҡов һәм ҡырҡйөлә-мең ырыуы старшинаһы Әлибай Мырҙағолов ҡарамағына ебәрә. Бында 1200 кешенән торған башҡорт отрядын туплап, Ырымбур тарафында (Биккол ауылы янында) Пугачев ғәскәрен баҫтырырға тейеш булған генерал Кар ҡарамағына оҙаталар. Юлда башҡорт отряды баш күтәрә һәм, Кар отрядына барып етмәйенсә, пугачевсылар яғына сыға. Салауат бер аҙ ваҡыт Кинйә Арыҫланов командалығындағы башҡорт отрядында Ырымбур эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. Е. И. Пугачев уға, ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, хәрби оҫталыҡ сифаттарын юғары баһалап, полковник дәрәжәһе бирә. Ноябрҙә ул Салауатты, үҙ аллы хәрәкәт итеп, ихтилалдың яңы төбәктәрендә көрәште йәйелдереү маҡсатында, Башҡортостандың Себер даруғаһына ҡайтарып ебәрә.

Салауат, уға ғына хас көс, энергия һәм оҫталыҡ менән ҙур отряд туплап, 25 декабрҙә олос үҙәге Сарапул ауылын, ғинуарҙа Красноуфимск ҡәлғәһен ала һәм уны башҡорт ерҙәрендә баш күтәреүселәрҙең терәк пункттарының береһенә әйләндерә. Ҡәнзәфәр Усаев, Илсеғол Итҡолов, Сөләймән Күсәкәев һәм Иван Кузнецов отрядтары менән берлектә Көңгөр ҡалаһын ҡамауҙа тота. Ошо һуғыш хәрәкәтендә ауыр яраланып, күпмелер ваҡыт тыуған йортонда дауаланыу сараһын күрергә тура килә. Февраль аҙағында, яралары уңалып бөтөр-бөтмәҫтән, Салауат ике меңлек отряд йыйып, яңынан Красноуфимск һәм Көңгөр тирәһендә хәрәкәт итә. Апрель-май айҙарында атаһы, Пугачев полковнигы Юлай Аҙналин менән бергә Әҫем, Ҡатау заводтары (Оло Ҡатау, хәҙерге Ҡатау-Ивановск) районында һуғыш хәрәкәттәре алып бара. 8 майҙа Йырал ауылы янында Михельсондың карателдәр корпусы отрядтарына ҡаршы һуғышып, ауыр юғалтыуҙар кисерә.

1774 йылдың 2 июнендә Үргә Ҡыйғы ауылы янында Салауат Юлаев өс меңлек отряды менән Е. И. Пугачевты ҡаршы ала. Пугачев Салауатҡа - бригадир, Юлайға атаман исеме бирә. Иртәгеһенә, 3 июнда, Пугачев һәм Михельсон ғәскәрҙәре араһында ҡаты бәрелеш була. Пугачевсылар күп юғалтыуҙар менән сигенергә мәжбүр була. Салауат тағы ла яралана. Пугачев ҡалған ғәскәре менән Уҫы ҡәлғәһенә табан йүнәлә. Салауат иһә юл ыңғайы Бөрө ҡалаһын алып, 18 июндә Уҫы янында йәнә Е. И. Пугачевҡа барып ҡушыла. Уҫыны штурмлағанда ҡаты яраланып, артабан 1774 йылдың көҙгә айҙарына тиклем Башҡортостанда хәрәкәт итә. Уның отряды Башҡортостанда аҫылда батша карателдәренә ҡаршы тороусы төп көскә әйләнә. 18 сентябрҙә ул, мәҫәлән, өс меңлек ғәскәр башында, Йәлдәк ҡәлғәһе тирәһендә хәрәкәт итеп, Борай олосоноң Тимошкин ауылы янында, 22 сентябрҙә Нөркә ауылы эргәһендә подполковник И. К. Рылеев командаһына ҡаршы үтә рәхимһеҙ һуғыштарҙа ("прежестокое сражение") булып, көслө ҡаршылыҡ күрһәтә. Салауаттың хәрби оҫталығына батша офицеры ғәжәпкә ҡала.

1774 йылдың 25 ноябрендә яҙалаусылар отряды Миндеш ауылына яҡын урманда Салауаттың һәм уның дүрт яуҙашының эҙенә төшә һәм ҡулға ала. Салауат һәм Юлай өҫтөнән оҙаҡҡа һуҙылған тикшереү эштәре 1775 йылдың 6 июлендә генә тамамлана. Салауат тикшереү барышында бер генә тапҡыр ҙа үҙен ғәйепле тип танымай, бүтән пугачевсыларҙың өҫтөнән һөйләп, ғәйептәрен һатмай, яҡын кешеләрен һәр төрлө ғәйепләүҙәрҙән нисек тә арсаларға тырыша. Был уның тотҡонға эләккәс күрһәткән тағы бер оло батырлығы, был юлы инде башлыса аҡыл көрәшенең һоҡланғыс бер өлгөһөнә әйләнә. Әлеге 1774 йылдың 7 майында яҙылған хатты ла ул ошо һорау алыу ваҡытында туғандарына ебәргән була.

Салауат менән Юлайҙы 1775 йылдың 15 июлендә сығарылған хөкөм ҡарары нигеҙендә улар айырыуса ҙур һуғыштар алып барған урындарҙа ҡамсы менән 175-әр тапҡыр һуҡтырып язалайҙар, танауҙарын ҡырҡып, маңлайҙарына һәм сикәләренә ҡыҙҙырылған тимер менән "З", "Б", "И" (злодей, бунтовщик, изменник) тигән хәрефтәр баҫып, шул уҡ 1775 йылдың 3 октябрендә көслө ҡарауыл аҫтында элекке Рогервик (Эстониялағы хәҙерге Палдиски) ҡәлғәһенә ғүмерлек каторгаға оҙаталар. Салауаттың ҡалған сирек быуат ғүмере алыҫ Балтик диңгеҙе буйындағы ана шул эстон тупрағында үтә.

Беҙҙең быуаттың 70-се йылдар башында Эстон ССР-ы Үҙәк дәүләт тарих архивында табылған документтарҙан күренеүенсә (Балтийск-Порт инвалидтар командаһы командиры майор Дитмарҙың ике рапорты), Салауат Юлаев 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат булған.

Салауат исеме халҡыбыҙ йөрәгендә мәңгелек урын алды. Салауат образы башҡорт һәм рус фольклорында, башҡорт, рус һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә мәңгеләштерелде. Уның хаҡында романдар, йырҙар, хикәйәттәр, поэмалар, опералар, драма әҫәрҙәре ижад ителде, рәссамдар һәм скульпторҙар уны живописта һәм скульптурала һынландырҙылар. Башҡорт халҡы, үҙенең бөйөк юлбаһсыһына арнап, илаһи йырҙар, көйҙәр, героик эпос ижад итте, халыҡ хәтеренән Салауат хаҡында бихисап легенда һәм риүәйәттәр яҙып алынды. Фәндә, әҙәбиәттә, сәнғәттә Салауат темаһы һис ваҡыт тамамланмаҫ илаһи бер темаға әйләнде. Уның хаҡында яҙылған әҫәрҙәр һәм хеҙмәттәр бихисап. Уның исемен, уның образын башҡорт халҡы үҙ ижадында эпос геройҙарына тиң булырҙай бейеклектәргә күтәрҙе. Милләтебеҙ символы - шөһрәтле һыбайлы Салауат һыны тарихыбыҙҙың яңы боролошонда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында урын алып, инде тотош бер илдең ырыҫ, ҡот билдәһенә әйләнде. Салауат исеме беҙҙең өсөн икһеҙ-сикһеҙ ғорурлыҡ, рухи күтәренкелек сығанағы, ул һәр ваҡыт беҙҙе әйҙәп тороусы көс, ул башҡорттоң ҡайнар йөрәк тибеше, мәңге һүнмәҫ һәм һүрелмәҫ азатлыҡ рухы.

**Рәшит ШӘКҮР.**
**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

***✓ Европа ғалимдары үҙҙәренең классик карталарына нигеҙләнеп, Урта быуаттар традицияларына ҡарап эшләй һәм уларҙағы донъя кимәлендә билдәле булған боронғо Башҡорт ҡалаһы үҙ урынында үҙ исеме менән урынлаштырыла.***



# ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ,

## Башҡорт-кала Ҳаскерти Имәнкала Баскирь Өфө




**Башы 1-се биттә.**

**▸ Нияз Абдулхаҡ улы, һеҙ Өфө-II ҡаласығын табыуҙа ҡатнашҡан һәм унда ғилми тикшеренеүҙәр эшен ойоштороған кеше булараҡ, гәзитебеҙҙе яныраҡ алдырып уҡығандарға ҡаласыҡ хаҡында ҡыҫҡаса аңлатма биреп үтһәгеҙ ине...**

**Н. МӘЖИТОВ:** Хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфөнөң территорияһында урта быуаттарҙа Алтын Урҙа ҡалалары иҫәбендә Башгирды тигән ҡала булғанлығы билдәле. Был хаҡта XIV быуатта йәшәгән ғәрәп ғалимы Ибн Халдун яҙып ҡалдырған. XVI быуаттың Европа ғалимдары үҙҙәренең карталарында Уралда Башгирды тигән ҡаланы урынлаштыра. 1554 йылдағы Меркатор картаһында Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғалары ҡушылдығында билдәләнгән ул ҡала. Өфө урынында 6 ҡәлғә булған, уларҙың янында ҡәберлектәр урынлашҡан. Хәҙерге Туҡай, Пушкин, Зәки Вәлиди урамдары урынлашҡан урындарҙа, Дуҫлыҡ монументынан алып Мосолмандар зыяратына тиклемге аралыҡта ята ул меңәрләгән уба- ҡәберлектәр. Был хаҡта XVI-XIX быуат крайҙы өйрәнеүселәре яҙған. Хәҙер ҙә был ерҙәрҙә ер эштәре алып барғанда кеше һөйәктәре, төрлө әйберҙәр килеп сыға. Өфө ҡәлғәһен төҙөүселәр ошо ҡәберҙәрҙе емереп, уларҙа табылған ҡиммәтле әйберҙәрҙе урлай башлай. Был хаҡта Алексей батшаға ла барып ишетелә. Ҡәберлектә табылған алтын-көмөштәрҙең урланып һатылыуы хатта Европа ғалимдарына ла мәғлүм була. Был хаҡта беҙҙең ғалим Әхмәров 70-се йылдарҙа сыҡҡан бер мәҡәләһендә яҙып ҡалдырҙы. Ҡаласыҡтар араһында Өфө-II ҡаласығы айырыуса мөһим урынды алып тора.

Мин 1956 йылда Өфөгә ҡайтып эшкә урынлашҡас, Әхнәф Харисов менән Раил Кузеев миңә: "Нияз, һине подвалда сюрприз - 15 йәшник археологик ҡомартҡы көтә. Шуларҙы һин системаға һалып, аңлатма бирергә тейешһең",- тип тәүге эште йөкмәтте. Мин уларҙы археологик методика буйынса тикшереп, системаға һалып, төрлө типологияға бүлеп, аңлатмалар яҙып сыҡтым. Археология өсөн ҡомартҡыларҙың ерҙә ни рәүешле ятыуы мөһим. Шуның өсөн 1957 - 1958 йылдарҙан башлап Петр Ищериков менән ике урында ҡаҙыныу эштәре алып барҙыҡ. Барлығы 4 метрға яҡын аҫҡа ҡаҙып төштөк һәм иҫебеҙ китте. Мәҙәни ҡатламы ошо саҡлы булған археологик ҡомартҡы Уралда бөтән урында юҡ. Был нимә тураһында һөйләй? Өфө-II иң оҙаҡ дәүер йәшәгән ҡаласыҡ булыуын аңлата был ҡатлам. Беҙ был материалдарҙы ике фәнни археологик китапта баҫтырып сығарҙыҡ.

2006 йылда инде ҡаҙыныу һәм тикшеренеү эштәренә ҡайтанан тотондоҡ. Был юлы ла иҫ китерлек асыштарға юлыҡтыҡ. Берҙән, ағастан эшләнгән юлдар, икенсенән - балсыҡтан төрлөсә итеп һалынған өй урындары, баҡыр иретеү мейестәре, ювелир оҫтаханалары. Урал археологияһында бындай күренештәр бөтөнләй хас түгел. 2007 йылда беҙ Рәсәй археология институты директоры Макаровҡа мөрәжәғәт итеп, абруйлы ғалимдар ебәреп, тикшеренеүҙәр үткәреп, ҡаласыҡҡа аңлатмалар биреүен һораныҡ. Эксперт совет килеп, тикшереп, үҙҙәренең фекерен яҙып бирҙе. Әйтеүемсә, Уралда бындай технология - балсыҡтан эшләнгән ҡаласыҡтар юҡ. Тикшеренеүселәр бындай технологияның урта быуат ҡалаларына ғына хас булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Улар VII-XVI быуаттарҙа хәҙерге Өфө территорияһында урта быуат ҡалаһы булғанлығын рәсми рәүештә билдәрҙе. Ә инде XIV быуатҡа килгәндә, донъя ғалимдары был урында Башгирти ҡалаһы булыуын әйтә һәм ҡаласыҡта ул быуатҡа ҡараған ҡомартҡылар ҙа шуны раҫлай.

XVIII быуатта рус ғалимдары ла тарихи мәғлүмәттәргә таянып, урыҫтар был урынға килгәнгә тиклем 10 саҡрымға һуҙылған башҡорт ҡалаһы булған тип яҙған. Рычков иһә Башҡорт ҡалаһында Турахандың йәшәүе, йәйҙәрен Ҡармасан, Сәрмәсән йылғалары буйында йәйләүе хаҡында мәғлүмәттәр килтерә.

IX-XII быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп ғалимдары Башҡорт ҡалаһына бик йыш килер булған. Уларҙың сауҙагәрҙәре лә был яҡтарҙа йөрөгән. Әл-Иҙриси башҡорттар йәшәгән төбәктә "Басджирт иле" тип атаған һәм бында 5 ҡаланың барлығын яҙып ҡалдырған. Был ҡалаларҙың административ-сәйәси үҙәк булыуы ла иҫкә алына. Мәҫәлән, Намжан ҡалаһы янында бик бай баҡыр рудаһы ятҡылыҡтары булыуы, ҡаланың меңдән ашыу кешеһе баҡыр эшкәртеү менән шөғөлләнеүе, иретелгән баҡырҙы Хорезмға һәм Шашҡа (хәҙерге Ташкент ҡалаһы) ташыуҙары, ҡала менән урындағы хан хаким итеүе, властың атайҙан улға тапшырылыа килеүе тасуир ителә. Намжан ҡалаһы кешеләренең һалдарға төлкө, ҡондоҙ тиреләре тейәп, Каспий диңгеҙенә тиклем алып барыуҙары, тауарҙарын хазарҙарға ҡиммәт хаҡҡа һатыуҙары телгә алына. Ҡағыҙ, был бит донъяуи кимәл, цивилизация кимәле. Намжан ҡалаһы кешеләре Хорезм менән баҙар мөнәсәбәте урынлаштыра алғас, был бик юғары мәҙәниәт булыуы хаҡында ла һөйләй.

Икенсе бер Гүрхан ҡалаһы янында иһә бик күп һандағы ҡәлғәләр барлығы, ерҙәрҙең яҡшы эшкәртелеүе, сәсеү майҙандары, Гүрхан ҡалаһы хакимының күп һандағы ғәскәре барлығы, ҡала халҡының бик оҫта һөнәрселәр булғанлығы, уларҙың был төбәктә һис кемдекенә сағыштырғыһыҙ ҡоралдар һәм әйәрҙәр, ҡамыт-ыңғырсаҡ яһауы хаҡында яҙыла. Ҡараҡыя ҡалаһы иһә, бүрәнә йорттарҙан һалынған. Был ҡалаға болғарҙар бик йыш ҡына һөжүм итер булған.

Беҙҙең ҡаласыҡта үткәрелгән археологик тикшеренеүҙәрҙең ҙур бер хатаһы - беҙ Өфө территорияһында табылған ҡаласыҡтарҙың һәр береһен айырым ҡараныҡ. Беҙ уларҙы бер-берененә бәйле итеп өйрәнмәнек. Мин был хатабыҙҙы таныйым. Ҡаласыҡтар бер-береһенә шул тиклем оҡшаштар.

**▸ Айбулат Вәли улы, ә бына Өфө ҡәлғәһе төҙөлгәндән һуң да рус ғалимдарының үҙ карталарында Өфө ҡалаһын Баскирь ҡалаһы тип яҙыуын нисек аңлатырға була һуң?**

**А.ПСӘНЧИН:** Петр I замаңында Рәсәй фәндәр академияһы Император фән һәм художество академияһы тип атала. Академияға үҙебеҙҙең ғалимдар етмәүе арҡаһында Петр батша билдәле Европа ғалимдарын академияға эшкә саҡыра башлай. Голландиянан, Германиянан ғалимдар килә, уларҙың араһында географтар һәм картографтар була. Шул заманда уҡ География департаменты ойошторола. Ошо эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә 1745 йылда 1-се академик атлас баҫылып сыға, уға тиклем 1737 йылда ла атлас сыҡҡан була. 1737 йылғы картала хәҙерге Өфө урынында Баскирь тигән ҡала урынлаштырылған. Был факт нимә тураһында һөйләй һуң? Был саҡта әле урыҫ картографтары булмай, Рәсәйҙә геодезия мәктәбенә яңы нигеҙ һалына. Шуға күрә был карталарҙы асылда Европа ғалимдары үҙҙәренең классик карталарына нигеҙләнеп, Урта быуаттар традицияларына ҡарап эшләй һәм уларҙағы донъя кимәлендә билдәле булған боронғо Башҡорт ҡалаһы үҙ урынында үҙ исеме менән урынлаштырыла. Тимәк, донъя кимәлендәге барлыҡ карталарҙа ла ҡала Башҡорт тип күрһәтелгән. Ә инде 1745 йылда сыҡҡан атласты төҙөүҙә рус картографтары ҡатнаша һәм улар был ҡаланы Өфө тип урынлаштыра.

**Н.МӘЖИТОВ:** Дөрөҫ, иң ышанысы һәм кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр - Урта быуат тарихсылары төшөргән карталарҙағы Ағиҙел, Ҡариҙел йылғалары ҡушылдығындағы Башҡорт ҡалаһы. Унда хәҙерге Кама менән Волга йылғалары ла үҙ урындарында. Карталар - тарихи документ, уларҙы үҙгәртеп тә, юҡ итеп тә булмай. Быуа әле Мәскәүҙең 800 йыллығын билдәләнеләр. Элек бит ул урында ҡала бөтөнләй булмаған. 800 йыл элек Мәскәү урынында сәйәси-мәҙәни-административ үҙәкте тәшкил итеүсе ябай ғына ҡаласыҡ торған.

**А.ПСӘНЧИН:** Нияз Абдулхаҡ улы менән килешәм: урыҫ яҙмаларында ҡасан тәүге тапҡыр Мәскәү һүҙе телгә алына, шул саҡтан алып Мәскәү ҡалаһы булыуы билдәләнә башлай. Бында ҡала атамаһы Мәскәүҙең тәүге осоро өсөн шартлы рәүештә алынған.

**Н.МӘЖИТОВ:** Эйе, шуға күрә беҙ тәүге осорҙа Өфө-II ҡаласығы урынында элек ҙур ҡала торған тип әйтергә ашыҡып, саҡ ҡына яңылышҡанбыҙҙыр ҙа. Әммә Өфө территорияһы археологик яҡтан ҡарағанда ҡала төҙөлөшө өсөн бик уңайлы урын. Баш ҡалабыҙ ултырған ерҙә элек, V-XIV быуаттарҙа 6-7 ҡәлғә торған. Бәлки, V-X быуаттар өсөн был урынды ҙур сәйәси-мәҙәни- административ үҙәк тип алып, X быуаттан алып был ягына ҡала тип атарға кәрәктер. Мәскәү ҡалаһы миҫалы ла тап ошо рәүешле. Тағы ла шуныһы: Рәсәй Федерацияһы территорияһында бер ниндәй бәхәсһеҙ, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән йәше күрһәтелгән ҡала юҡ. Әммә беҙҙең ҡаласыҡта V быуатта Византияла ҡойолған алтын аҡса бар. Шулай уҡ IV -VI быуаттарҙа Ирандан, Византиянан, Кавказдан килтерелгән күп даналағы көмөш һәм баҡыр әйберҙәр күп. Был факт Өфөнөң ысын мәғәнәһендәге сәйәси-мәҙәни-административ үҙәк булыуы хаҡында һөйләй.

В.А.Иванов менән И.Радловтар V быуатта Өфөнөң ҡала булыуы менән риза түгелдәр. Ә мин шулай уйлайым: ул саҡтағы ҡала төшөнсәһе хәҙер беҙ аңла-

> ***XVIII быуатта рус ғалимдары ла тарихи мәғлүмәттәргә таянып, урыҫтар был урынға килгәнгә тиклем 10 саҡрымға һуҙылған башҡорт ҡалаһы булған тип яҙған. Рычков иһә Башҡорт ҡалаһында Турахандың йәшәүе, йәйҙәрен Ҡармасан, Сәрмәсән йылғалары буйында йәйләүе хаҡында мәғлүмәттәр килтерә. IX-XII быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп ғалимдары Башҡорт ҡалаһына бик йыш килер булған. Уларҙың сауҙагәрҙәре лә был яҡтарҙа йөрөгән. Әл-Иҙриси башҡорттар йәшәгән төбәктә "Басджирт иле" тип атаған һәм бында 5 ҡаланың барлығын яҙып ҡалдырған. Был ҡалаларҙың административ-сәйәси үҙәк булыуы ла иҫкә алына.***

***✓ Быйыл Ислам мәсьәләһе буйынса үткән конференцияға Иран илселегенең 2-се дәрәжәләге илсеһе килде. Унның әйтеүенсә, Иранда йәшәүсе башкирттар үҙҙәрен: "Беҙ башкирттар түгел, ә башҡорттар", - тип атап йөрөтә, ти.***

ған ҡала һымаҡ түгел, әлбиттә. Ҡала төшөнсәһе ҙур бер тарихи үсеш кисергән күренеш. Хәҙерге Башҡортостанда, Силәбе, Свердловск, Ырымбур, Пермь өлкәләренең, Татарстандың тарихи Башҡортостанға ҡараған өлөшөндә меңгә яҡын ҡәлғәләр бар. Уларҙың бер өлөшөнөң йәше I быуаттан, яртыһының йәше V-X быуаттарҙан башлап билдәләнә. Бына мин шуларҙың иллеләбен урындағы халыҡтан һорашып таптым. Башҡорттар элек-электән ул ҡәлғәләрҙе Ҡалатау, Ханҡала тип атап йөрөткән. Быларҙан тыш, Тупраҡҡала, Имәнҡала, Ташҡала, Талҡала тигән атамалар ҙа билдәле.

**Алдағы йылда үтәсәк Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияла Өфө-II ҡаласығы мәсьәләһен өйрәнеүҙе ниндәйерәк юҫыҡта ҡарау маҡсатҡа ярашлы булыр ине тип уйлайһығыҙ?**



Каталон картаһы.

**А.ПСӘНЧИН:** Беҙ XX быуат уҙаңы, Интернет, космос заманы менән ҡала төшөнсәһен урта быуаттағы Европаның ҙур ҡалалар аша күҙ алдына килтерәбеҙ ҙә, Башҡорт ҡалаһын да шундай итеп күрергә теләйбеҙ. Минеңсә, киләһе йылдағы конференцияла беҙ ике йүнәлештә эш итергә тейешбеҙҙер.

Беренсенән, нимә ул ҡала? Европала, Азияла урта быуат ҡалаһы нисек булған? Ул ваҡытта беҙҙең яҡтарҙағы ҡалалар Европа һәм Азия ҡалаларына ҡайһы яғы менән оҡшаған йәки айырылған? Ғөмүмән, ҡалалар ул заманда ниндәй функция үтәгән?

Икенсенән, Урта быуаттарҙағы Башҡорт ҡалаһы ниндәй функциялар (административ, хәрби, сәйәси, мәҙәни) үтәгән һәм уның ниндәй функцияларына ҡарап беҙ уны ҡала тип әйтә алабыҙ ?

Был йүнәлештәр бик мөһим. Германия-Австрия философы, социологы һәм иҡтисадсыһы Макс Выборҙың "Ҡала социологияһы" тигән хеҙмәте бар. Ул был хеҙмәтендә ҡалаларҙың функцияһын өйрәнеп: "Айырым осраҡтарҙа, әгәр ҙә административ һәм хәрби-сәйәси функция башҡарһа, ҡала ролен аҙ ғына һанлы кеше йәшәгән урын да үтәүе мөмкин", - тигән фекер әйтә. Ҡаланы сәнәғәте, етештереү базаһы, эшселәр синыфы, баҙары булған берәмек тип ҡарау дөрөҫ түгел тип белдерә ғалим. Мәҫәлән, Дағстандың тау башында урынлашҡан төрлө изделиелар сығарыусы цехтары булған ауылдарҙы беҙ бер нисек тә ҡала тип әйтә алмайбыҙ, тип дәлилләй үҙ фекерен Макс Выбор.

**Н.МӘЖИТОВ:** Яңыраҡ Үзбәкстанда йөрөп ҡайттым. Унда фәнни семинар үтте. Археологтар ике көн буйы Ҡарағалпаҡстан, Фирғәнә өлкәһендәге Урта быуатҡа ҡараған боронғо ҡалаларҙы күрһәтеп йөрөнөләр. Минең өсөн шунһы айырыуса яңылыҡ булды: Ташкент һәм Наманган ҡалалары янында табылған ике боронғо ҡала балсыҡтан һалынған булған һәм мәҙәни ҡатлам беҙҙең "Өфө-II" ҡаласығының мәҙәни ҡатламы менән бермә-бер тура килә. Ташкенттың уртаһында, аэропорттан 5-6 квартал алыҫлыҡта табылған ҡаласыҡ нигеҙендә музей төҙөгәндәр. Унда ла ошондай уҡ ҡатлам бар. Сәмәрҡәнд археология институтының бүлек мөдире, археология институтының элекке директоры, профессор, тарих фәндәре докторы Абдулхәмит Анарбаев менән көнө буйы бергә аралашып йөрөнөм. Ул тәүҙә беҙҙең менән бик һаҡ ҡына һөйләште. Мин уға үҙебеҙҙең Өфө-II ҡаласығының мәҙәни ҡатламы төшөрөлгән фотоларҙы күрһәткәйнем, ғалимдың күҙҙәре балҡып китте. "Мин һеҙ килтерәсәк дәлилдәрҙән Өфө-II ҡаласығы менән беҙҙең ҡаласыҡ араһындағы уртаҡлыҡтың булырына һүҙ башында шикләнгәйнем. Әле бына фотоларҙы күргәс, бер ниндәй ҙә шигем ҡалманы. Һеҙҙең ерҙә табылған ҡаласыҡ Үзбәкстандың Фирғәнә оазисында, Ҡаҙағстандың көньяғында табылған боронғо ҡалаларға хас ысул менән төҙөлгән. Уртаҡлыҡ һис шикһеҙ бар", тине ул. Алдағы йыл Өфө-II ҡаласығына арналған Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияға килеп, А.Анарбаев доклад менән сығыш яһаясаҡ. Хәҙер беҙҙең алда объектив факттар бар һәм уларға тейешле аңлатмалар бирергә генә ҡала.

**Ташкент һәм Наманган янындағы ҡалалар менән Өфөлә табылған ҡалаларҙың архитектура уртаҡлығы был территорияларҙың Урта быуаттарҙа бер дәүләткә ҡарағанлығы хаҡында һөйләмәйме?**

**Н.МӘЖИТОВ:** Юҡ, улай тип әйтеп булмай. Раил Кузеев башҡорттарҙың ҡыш көндәрендә Урта Азияға барып йәшәүе, ул яҡта йәшәгән халыҡтарҙың йәйгелеккә Уралға килеп тороуы хаҡында фекер яҙғайны. Беҙ иһә, археологик нигеҙгә таянып, был фекерҙе саҡ ҡына үҫтерә бирҙек. Урта Азияла, көньяҡ Ҡаҙағстанда йәшәүсе халыҡтарҙың Уралға килеп, китеп, күсенеп йөрөүҙәре IX быуатта түгел, таш, бронза быуаттарында уҡ булған.

**Карталарҙа төшөрөлгән Пашкерти атамаһының башҡорттар йәшәгән төбәк, ил генә түгеллеген, ә ҡала булыуын иҫбатлар өсөн ниндәй дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине?**

**А.ПСӘНЧИН:** Урта быуаттарҙа беҙҙең төбәктә булған сәйәхәтселәрҙең ҡайһы бер карталарында башҡорттар йәшәгән төбәк "Башкиры" ә ҡайһыларында "Башкирская орда" тип алынған. Һүҙлектәрҙә "Орда" йәғни "Урҙа" "протодәүләт берәмеге" тип аңлатылған. Тимәк, Европа ғалимдары башҡорттар йәшәгән төбәкте Башҡорт урҙаһы тип атаған икән, бының менән үҙ дәүләтселеге булған Башҡорт илен күҙ уңында тотҡан. Халыҡтың дәүләтселеге бар икән, уның административ-сәйәси-хәрби-мәҙәни үҙәге ролен башҡарған баш ҡалаһы ла була.

**Н.МӘЖИТОВ:** Килешәм, хәҙерге Мәскәүҙең ҡайһы бер ғалимдары, мәҫәлән, "Нуғай дәүләте" тигән атама урынына "Нуғай урҙаһы" тигәнде ҡуллана. IX-XI быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп ғалимдары башҡорттарҙы бер ваҡытта ла "башҡорттар" тип яҙмаған. Уларҙың яҙмаларында "башкирте", "башҡарты", "башгирды" тигән яҙмалар осрай. Ҡыҫҡаһы, атаманың унлаған варианты бар. Һәр хәлдә, ғәрәп тарихи әҙәбиәтендә был атама киң таралған күренеш иҫәпләнгән. Минеңсә, Әхмәтзәки Вәлиди заманында бик урынлы фекер әйткән. Уның яҙыуынса, Урта Азияла, Иран сиктәрендә "башғарды", "башкирте" тигән халыҡтар йәшәгән. Ундағы Башҡорт тауҙары картала Башкуртские горы тип билдәләнгән. Шулай уҡ унда "Башгирд" тигән ҡала ла булған. Ул ҡаланың урыны - хәҙерге Тажикстан сиге. Тимәк, ул тирәлә шул исемдәге халыҡ йәшәгәс, шул атамалағы тауҙар һәм ҡала булғас, шул атамалағы дәүләт тә йәшәгән, тигән һүҙ. Ул ҡала һәм дәүләт ғәрәптәр тарафынан ҡыйратыла. Хәҙер Башгирд ҡалаһы икенсе исем менән йәшәй. Бынан тыш, хәҙерге Иранда Фарсы ҡултығына яҡын урында башкирты тигән халыҡ та йәшәй. Был факт рәсми рәүештә теркәлгән. Беҙҙең милли музей директоры Ғәли Вәлиуллин бик күп йылдар буйы Иранда йәшәгән башкирт халҡы менән ҡыҙыҡһына. Быйыл Ислам мәсьәләһе буйынса үткән конференцияға Иран илселегенең 2-се дәрәжәләге илсеһе килде. Уның әйтеүенсә, Иранда йәшәүсе башкирттар үҙҙәрен: "Беҙ башкирттар түгел, ә башҡорттар", - тип атап йөрөтә, ти.

**Быңдай сенсацияға тиң мәғлүмәт быға тиклем беҙгә, һәр хәлдә, ғалимдарға нишләп ишетелмәне икән? Бәлки, кемдер беҙгә ишеттерергә лә теләмәгәндер...**

**Н.МӘЖИТОВ:** Бәлки, ишетелгәндер ҙә, тик әһәмиәт биреүсе генә булмағандыр. Ғөмүмән, беҙҙә күп кенә мәсьәләләргә тейешле кимәлдәге иғтибар етешмәй. Мәрхүм Ринат Йосопов ғүмеренең һуңғы ике йылында шунда барып, этнологик-антропологик тикшеренеүҙәр үткәреү ниәте менән янып йөрөнө, тик өлгөрмәй ҡалды. Иран башҡорттарының тарихын өйрәнеү бурысы беҙҙең өҫтә тора. Беҙгә хәҙер иң тәүҙә шуны асыҡларға кәрәк: Башгирд ҡалаһы һәм дәүләте ҡыйратылғандан һуң, ни өсөн башҡорттарҙың бер өлөшө көнсығышҡа китеүҙе хуп күргән?

**А.ПСӘНЧИН:** Беҙ сит ил сығанаҡтарын әҙ беләбеҙ, хатта белмәйбеҙ, тип әйтерлек. Ғалимдарыбыҙҙың телдәрҙе белмәүе лә бәкәлгә һуға. Әле Урта быуатҡа ҡараған бик күп карталарҙы, яҙма сығанаҡтарҙы беҙ белмәйбеҙ. Уларҙа ла Башҡорт ҡалаһы тураһында сит ил архивтарында эҙләнеүҙе дауам итергә кәрәк.

**Н.МӘЖИТОВ:** Айбулат Вәли улы, әле тупланған мәғлүмәттәргә таянып, ысынлап та, Урта быуаттарҙа хәҙерге Өфө территорияһында Башҡорт тигән ҡала булған тип раҫларға беҙҙең хаҡыбыҙ бар бит?

**А.ПСӘНЧИН:** Бар, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта урыҫтар килеп нигеҙ һалған Өфө ҡалаһы тарихын да инҡар итергә ярамай.

**Н.МӘЖИТОВ:** Мәғлүм булыуынса, бында урыҫтар килгәс, ҡәлғә һалыу өсөн урынды бер нисә йыл буйы эҙләйҙәр һәм ҡәберлектәр, убалар менән тулы булған ошо урынға туҡталалар. Сөнки оло йылғалар менән уратып алынған тау башындағы урын дошмандан һаҡланыр өсөн бик уңайлы. Беҙҙең боронғо атай-олатайҙар ҙа был урынды белеп һайлаған. Шулай итеп, Өфө ҡалаһы Башҡорт ҡалаһының нигеҙендә барлыҡҡа килә.

**А.ПСӘНЧИН:** Өфө ҡәлғәһе хәрби маҡсатта воевода тарафынан төҙөлә, шуға күрә бында Өфө ярымутрауының һайланыуы һис тә осраҡлы күренеш түгел.

**Каталон атласында Башҡорт ҡалаһы бик аныҡ итеп билдәләнгән. Шул уҡ ваҡытта боронғо традиция буйынса төҙөлгән был картаға ҡарап, Башҡорт ҡалаһының тарихын да, ян-яғын уратып алған мөхит менән мөнәсәбәтен дә, ул саҡтағы ижтимағи-сәйәси системаның характеры, хатта ул замандың киләсәге хаҡында ла мәғлүмәт алырға була. Һәр хәлдә, Каталон атласы географик карта ғына түгел, тарихи-сәйәси-философик йөкмәткеле тарихи документ та. Был картаға ҡарап, Башҡорт ҡалаһы хаҡындағы тулы мәғлүмәт ҡасан йәмәғәтселеккә еткерелер икән?**

**Н.МӘЖИТОВ:** Уҙған йылдың декабрендә бер нисә ғалим мине Санкт-Петербургҡа саҡырып: "Беҙ һеҙҙең Урта быуаттарҙа Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт ҡалаһы булыуы хаҡында башҡаларҙы ышандыра алмауығыҙ хаҡында ишеттек. Шуға күрә лә беҙ һеҙгә ярҙам йөҙөнән ошо картаны тәҡдим итәбеҙ",- тип, беҙгә Каталон картаһын бирҙеләр. Шунан һуң беҙ Айбулат Вәли улы менән үҙебеҙҙең Президент хакимиәтендә булып, ундағы яуаплы кешеләр менән Каталон атласындағы Башҡорт ҡалаһына бәйле мәғлүмәт тупланған хеҙмәтте яҙып, китап итеп яҙып сығарырбыҙ, тип һөйләшкәйнек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең менән был хаҡта һөйләшкән кеше эштән китеп барҙы һәм беҙҙең ниәтебеҙ бойомға ашмай ҡалды.

Яңыраҡ мин ошо картаны биргән Александр Григорьевичҡа килеп сыҡҡан хәлде аңлатып хат яҙҙым. Унда мин Каталон атласындағы Башҡорт ҡалаһына бәйле 3-4 табаҡ тәфсирнамә менән картаны үҙебеҙҙә баҫып сығарыу өсөн ебәреүен үтендем. Күптән түгел мин унан беҙҙең шарт менән риза булыуы хаҡында хат алдым. Сметаһын да ебәргән. Ни бары 700 мең һумдан ашыу аҡса һораған. Аңлатмаһында был аҡсаның уға Европа архивтары буйлап Башҡорт ҡалаһы хаҡында мәғлүмәт эҙләү маҡсатында командировкалар өсөн кәрәк булыуын яҙған. Командировкалар хаҡын ҡаплауҙы ул үҙенең хеҙмәте өсөн түләү тип атаған. Шул уҡ ваҡытта Айбулат Вәли улының, башҡорт ғалимы булараҡ, яҙғанын да был китапҡа индереү мотлаҡ. Был аҙым беҙгә Башҡорт ҡалаһы тирәһендә барған бәхәстәргә нөктә ҡуйырға мөмкинлек бирәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө-II ҡаласығын табыу һәм уны өйрәнеү осорон шартлы рәүештә өс өлөшкә бүлеп булыр ине. Беренсеһе, 1957-2006 йылдар - боронғо ҡаласыҡты табыу, икенсеһе, 2006-2011 йылдар - ҡаласыҡта археологик эштәр алып барыу һәм уның рәсми рәүештә 2011 йылдың 15 мартында танылыу табыуы һәм өсөнсөһө... Өсөнсөһө, бәлки, тиҙ генә лә булмаҫ, әммә шуныһы мөһим, урта быуаттарҙан башлап бар донъя баш ҡалабыҙ урынында Башҡорт ҡалаһы тороуын ҡысҡырып әйтеп торғанда, беҙ был тауышты ишетергә генә теләмәйбеҙ. Кем белә, бәлки, ҡолағыбыҙ түгел, күңелебеҙ һаңғыраүҙыр...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Оҙон ғүмер юлын үтеп, көмөш, унан алтын туйҙар үткәрергә яҙһын. Бер-берегеҙҙең күҙҙәренә ҡарап, олоғайған көнөгөҙҙә саф намыҫ менән "Рәхмәт һиңә, ҡәҙерлем, бәхетле тормош өсөн" тип әйтерлек булһын.*



КОНКУРС

**Туй үтәсәк йортта төрлө әйтемдәр, кәңәштәр, матур теләктәр, шаян һүҙҙәр, хәҙистәр яҙылған плакаттар, гәзиттәр элергә кәрәк. Баш ҡоҙаларҙы музыка аҫтында "тере коридор" булып теҙелеп, ҡул сабып, тәбрикләп ҡаршылайҙар. Табын өҫтәле башына йәштәр саҡырыла, ҡыҙ егеттең һул яғына ултыра. Ҡыҙ янына егеттең ата-әсәһе һәм егет яғынан килгән ҡунаҡтар, егет янына ҡыҙҙың ата-әсәһе, улар яғынан килгән ҡунаҡтар урынлаштырыла.**



# ЮҒАЛТМАҒЫҘ ҺУҢҒЫ КӨНГӘ ҠӘҘӘР

## Мөхәббәттең алтын балдағын…

**Алып барыусы:** Ҡәҙерле йәштәр! Хөрмәтле ата-әсәләр, туғандар, ҡунаҡтар, ҡоҙа-ҡоҙасалар, дуҫтар-иптәштәр! Бөгөнгө көн һеҙҙең барығыҙ өсөн дә байрам, ә йәштәр өсөн ул айырыуса бәхетле һәм иҫтәлекле мәл, сөнки бөгөндән башлап уларҙың тормош юлы ғүмерлеккә бергә ҡушыла.

Ҡәҙерлеләребеҙ! Һеҙ бөгөн мосолмандар өсөн иң изге йома көнөндә яңы тормош юлына аяҡ баҫтығыҙ. Ошо тормош юлында мөхәббәтегеҙҙе һаҡлағыҙ, юғалтмағыҙ, сөнки мөхәббәт кешене сафландыра, шатландыра, гүзәллеккә саҡыра. Ҡорған ғаиләгеҙ, йәшәр мөйөшөгөҙ изге, яҡты, бәхетле, йылы булһын. Күңел йылылығы китмәһен, йөҙөгөҙҙән бәхет нуры һүрелмәһен! Бәхетле булығыҙ, йәштәр! Шатлыҡ байрамын, туйҙы башлайбыҙ!

**Ҡыҙ яғынан ҡоҙаса:** *(бейей-бейей сыға ла, ҡулындағы сәк-сәкте йәштәргә бүләк итә):*

Һеҙгә туй күстәнәсе, ҡәҙерле йәштәр!

Оҙатабыҙ һеҙҙе оло юлға,
Оло юлға, тормош юлына,
Ҡулды-ҡулға, уйҙы-уйға бәйләп,
Йөрәк менән бергә булырға.
Загс биргән яҙыу - ҡағыҙ бит ул,
Һаргая ул һандыҡ төбөндә.
Һарғаймаһын һеҙҙең ысын һөйөү
Сәскә атһын күңел түрендә.
Ҡарамағыҙ дошман һүҙҙәренә,
Ғәйбәттәрҙән өҫтөн булығыҙ.
"Тел" алырға килгән дуҫтарҙы һеҙ
Тупһағыҙҙан ары ҡыуығыҙ
Васыят беҙҙән һеҙҙең киләсәккә:
Хәсрәттәрҙе уртаҡ бүлегеҙ.
Шатлыҡтарҙы матур бала итеп
Бишектәрҙә алып килегеҙ.
Онотмағыҙ! Сәғәт һанап тора
Был йылдарҙың уҙып барғанын.
Юғалтмағыҙ һуңғы көнгә ҡәҙәр
Мөхәббәттең алтын балдағын.

**Ҡыҙ яғынан икенсе ҡоҙаса:** Кейәү! Был көндәрҙә һин беҙҙән алда һынау артынан һынау тотасаҡһың. Һине яҡыныраҡ белеү өсөн, әйҙә, беҙ һорауҙар бирәбеҙ, һин шуларға дөрөҫ итеп, ихлас итеп яуап бир.

***Беренсе һорау.*** *Ир ҡатыны, һиненсә, ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Кәләшеңдә күрергә теләгән шундай дүрт сифатты һана әле.*

***Икенсе һорау.*** *Кәләшең алтын балыҡ тотто , ти. Һиненсә, ул алтын балыҡтан ни һорар ине?*

***Өсөнсө һорау.*** *Яратҡан шөғөлөң ниндәй?*

**Егет яғынан ҡоҙаса:** Ә беҙ килен, еңгә кешенең ҡайһы бер серҙәрен белергә булдыҡ. Әйҙә әле, һин дә беҙҙең һорауҙарға дөрөҫ кенә, ихлас итеп кенә яуап бир әле.

***Беренсе һорау.*** *Ир кеше, ғаилә башлығы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?*

***Икенсе һорау.*** *Ирең дә алтын балыҡ тотто, ти, ул әлеге балыҡтан нимә һорар ине?*

***Өсөнсө һорау.*** *Бишек йыры йырлап күрһәт, һис юғы, көйләберәк булһа ла һүҙҙәрен әйт.*

**Ҡоҙасалар.** Рәхмәт. Аҡыллы, матур йәрҙәр икәнһегеҙ, тигән мөһөр һуғыла һеҙгә. Ошо мөһөргә ғүмер буйы тап төшөрмәгеҙ.

**Ҡоҙасалар.** Хөрмәтле ҡунаҡтар, ҡоҙа- ҡоҙағыйҙар, ҡымыҙ һалынған һауыттарҙы ҡулдарығыҙға алып, беҙ әйткәндәргә мисәт баҫып ҡуяйыҡ. Хәйерле сәғәттә!

**Йыр.**

**Алып барыусы.** Бөгөн йәштәр - кейәү, килен исемен алғанда, ата-әсәйҙәр ҙә яңы исемгә- ҡайны, ҡәйнә исемдәренә лайыҡ булды. Уларға хөрмәтләү миҙалдары тапшырайыҡ. *(Кейәү - ҡәйнә-ҡайныһына, килен- ҡәйнә-ҡайныһына рәхмәт һүҙҙәре әйтеп, миҙалдарҙы түштәренә элә.)*

**Алып барыусы.** Борондан килгән йола-ғәҙәт буйынса һүҙҙе баш ҡоҙаларға бирәйек. Балаларығыҙҙы матур туй көнө менән ҡотлағыҙ (Тәүҙә кейәүҙең ата-әсәһе, артабан ҡыҙҙың ата-әсәһе һүҙ ала, бүләктәрен бирә).

**2-се алып барыусы:** Бөгөн һеҙҙең балаларығыҙҙың йөрәктәре, яҙмыштары, тормош юлдары бергә ҡушылды. Ҙур рәхмәт һеҙгә матур ҡыҙ үҫтергәнегеҙгә, батыр егет тәрбиәләгәнегеҙгә.

**Алып барыусы.** Туй бүләктәрен иҫәпләп, теркәп барыу өсөн ике яҡтан да берәр кешене һайлап, комиссия төҙөйөк, улар аҙаҡтан бүләктәрҙе йәштәргә тапшырыр (Комиссия ағзалары төп ҡоҙалар биргән бүләктәрҙе теркәй).

**2-се алып барыусы:** Һеҙ, йәштәр, ошо ғаиләне ҡороусылар, ырыуығыҙҙы, кешелек донъяһын дауам итеүселәр! Һеҙҙең киләсәгегеҙ бөгөн башлана. Уны нисек итеп ҡороу үҙ ҡулығыҙҙа. Бәхетле ғаиләгеҙҙе ҡорғанда, һеҙгә ғүмер бүләк иткән, һеҙҙе ҡарап үҫтергән, тәрбиәләгән, оло йөрәкле иң ғәзиз кешеләрегеҙҙе- ата-әсәләрегеҙҙе онотмағыҙ. Уларҙы һәр саҡ хөрмәт итегеҙ, уларҙың ярҙамсылары булығыҙ. Ҡәҙерле ата-әсәйҙәр хөрмәтенә ауыҙ итәйексе ҡымыҙҙан, буҙанан, йыр яңғыратайыҡ уларға арнап.

**Йыр, музыка.**

**Ҡотлауҙар.**

***Артабан ҡунаҡтарға өлкәнләтә һүҙ бирелә. Һәр ҡотлаусы төркөм алдынан шиғырҙар әйтеү отошло. Туғандарҙы төркөмләп сығарыу һәйбәт. Мәҫәлән: кейәүҙең, килендең инәй-олатайҙарына (исем-шәрифе әйтелә) һүҙ бирелә. Ике яҡтың да ҡайнаға, ҡайнеңгәгә, ағай - еңгәйҙәргә, ҡайынбикә-ҡайынеҙнәгә, апай-еҙнәләренә, ҡусты-килендәренә, ҡәйнеш-балдыҙҙарына, бикәс-кейәүҙәренә, дуҫ-иштәренә һ.б. һүҙ бирелә. Төркөмдән берәү генә һөйләп, башҡалар йырлап, бейеһә, бик һәйбәт.***

**Кейәүнәре егет:** Ҡәҙерле йәштәр! Ғүмер юлдарынан етәкләшеп, абынмайса, йәнәшә атлап, бергә, оҙон, тиң ғүмер юлын үтегеҙ. Һеҙҙең исемгә килеп төшкән телеграммаларҙа ла ошондай теләктәр яҙылған. Һәр кем һеҙгә ярҙамға килергә әҙер булыуын белдергән.

**1-се телеграмма:** Һеҙҙе законлы никахығыҙ менән ҡотлайбыҙ. "Киске Өфө" гәзите йәш атайҙар өсөн балалар коляскалары йөрөтөүселәр курсы асылыуы тураһында хәбәр итә, яҙылығыҙ.

**2-се телеграмма:** Ирегеҙҙең нисәнсе үлсәмле яға кейгәнен хәбәр итегеҙ, беҙ тиҙ генә ҡамыт эшләтеп ебәрербеҙ.Халыҡ хужалығы тауарҙары кибете.

**3-сө телеграмма:** Умартасы хужалығы эшселәренән: "Һеҙҙе яңы тормош менән ҡотлайбыҙ һәм " баллы" айығыҙҙа сәйәхәт итергә үҙебеҙҙең хужалыҡҡа саҡырабыҙ.

**4-се телеграмма:** Ипотека буйынса фатир һәм аҡсалата ярҙам алырға теләһегеҙ, беҙҙән тыуыуҙы оҙаҡҡа һуҙмағыҙ. Икенсе һәм өсөнсө балаларығыҙ.

**5-се телеграмма:** Кейәүгә: "Музыкаль һәләтең булһа, беҙҙән гитара килеп ал. Тик шуны бел: кәләшеңдең нервылары гитара ҡылы түгел". Музыка йыһаздары һатыу магазины.

**6-сы телеграмма:** Ҡәҙерлеләрем! Туйығыҙҙа була алмаһам да, һеҙҙе ысын күңелдән тәбрик итәм. 2012 йылда осрашҡанға тиклем. Тыуасаҡ баш балағыҙ.

**7-се телеграмма:** Һеҙҙең ғаилә өсөн 10 урын ҡалдырҙыҡ. Балалар баҡсаһы.

**Алып барыусы:** Хөрмәтле йәштәр! Дуҫ- тату булығыҙ, ихтирам- иғтибарлылыҡ менән бер -берегеҙҙе шатландырып, дәртләндереп йәшәгеҙ. Оҙон ғүмер юлын үтеп, көмөш, унан алтын туйҙар үткәрергә яҙһын. Маңлайҙар һырланғанда ла мөхәббәтегеҙгә кер төшмәһен.Бер -берегеҙҙең күҙҙәренә ҡарап, олоғайған көнөгөҙҙә саф намыҫ менән "Рәхмәт һиңә, ҡәҙерлем, бәхетле тормош өсөн" тип әйтерлек булһын.

**Ял итеп, бейеп-йырлашып алыу. Ял иткән арала көлкөлө аукцион, конкурстар үткәрелә.**

**1-се конкурс:** Ултырғысҡа бер нисә ир-егетте ултырталар, араһында кейәү егет тә була. Кәләштең күҙен бәйләп, үҙенең һөйгәненең сәсе, ҡолағы буйынса танырға ҡушалар. Ә кейәү кеше ҡыҙҙы тубығынан танырға тейеш.

**2-се конкурс:** Подносҡа тәтәйҙәр һалына.Ҡыҙҙарҙыҡы-курсаҡ, энә, еп, заколка,

Малайҙарҙыҡы - машина, пистолет, сүкеш һ.б. Кейәүҙең күҙен бәйләйҙәр. Ул ниндәй уйынсыҡты ала, беренсе бала шул енестән буласаҡ.

**3-сө конкурс:** "Бешмәй ҡалған мөхәббәт йырҙары" тип атала был уйын. Һәр ике яҡҡа ҡағыҙ, ҡәләм ебәрелә. Иң ситтә ултырған кеше юлдың беренсе юлын яҙа ла, ҡағыҙҙы күрһәтмәйенсә бөкләп, күршеһенә бирә. Күршеһе үҙе белгән йырҙың бер юлын яҙа ла, артабан ебәрә. Яңы мөхәббәт йыры барлыҡҡа килә. Көйгә һалып йырлана.

**"20-30 йылдан һуң" уйыны:** Был уйын йәштәрҙең ата-әсәләре-ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар өсөн үткәрелә. Ҡоҙағыйға һорауҙар биргәндә, ҡоҙа сығып тора.

- Ҡайҙа һәм ҡасан таныштығыҙ?
- Буласаҡ ирегеҙ һеҙгә ҡайһы ваҡытта һәм ҡайһы ерҙә һөйөү һүҙҙәре әйтте.
- Туйығыҙҙа күпме кеше булды?
- Туй көнөндә көн торошо ниндәй ине?
- Ниндәй туй бүләге икегеҙгә лә ныҡ оҡшаны?

Һорауҙарға яуаптар алғас, ҡоҙаны саҡыралар һәм ошо уҡ һорауҙарҙы бирәләр. Яуаптарҙың тура килеү-килмәүе мөһим түгел, ә иң мөһиме - йәштәр ата-әсәйҙәре кеүек 20-30 йылдан һуң да иң бәхетле көн -туй көндәрен яҡшы иҫләһендәр ине.

**Тағы бер күңелле уйын.** Ишектән Туйҙың "докторы" килеп инә. Ул күңелһеҙ ултырыусыларға бәйләнә, диагноз ҡуя, рецепттар бирә.

- Берәүгә: Һеҙгә тиҙ арала бесәнлеккә менеп, тауыҡ ояһынан йылы йомортҡа алып эсергә кәрәк. Йығылып төшмәҫ өсөн үҙегеҙ менән бер "пациент" алығыҙ," тип егет менән ҡыҙҙы ҡушарлап сығарып ебәрә.
- Икенсегә: Һеҙгә димедрол тәҡдим итәм. Йоҡлай алмай интегеп ултырағыҙ шикелле.
- Өсөнсөгә: Һеҙҙең йөрәгегеҙ ойоған, ғашиҡ булырға кәрәк.
- Һеҙҙең аяҡтарығыҙ ойоған, уны яҙҙырыу өсөн бейеп алыу ҙа етә.
- Һеҙ бер юлы 2 ҡыҙға ғашиҡ икәнһегеҙ. Беренеһенә һыу һибергә кәрәк.
- Һеҙгә күп итеп " Шифалы һыу" эсергә кәрәк, күп ашауҙан ашҡаҙанығыҙ тығылған булырға тейеш. Шуға ла, ахыры, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, тын ала алмай ултыраһығыҙҙыр.
- Һеҙгә хәҙер сәскәләр килтерерҙәр, һеҙ уны йырлап берәүгә бүләк итегеҙ. Һис шикһеҙ тереләсәкһегеҙ.

Доктор биргән рецепттар теүәл үтәлергә тейеш.

**Тәнәфес.**

***Тәнәфестән ингәнсе өҫтәл тәңгәлендә арҡыс- торҡос ептәр һуҙып, уларға ултырылған шарҙар бәйләп ҡуялар. Шар эсендә яза яҙылған. Шар кем тәңгәленә эләнгән, шул кеше уны шартлата , эсендәге яҙыуҙы алып уҡый һәм тейешле язаһын үтәй (Йырларға, әтәс булып ҡысҡырырға,уйын ойоштороға, уң яҡ күршеһен ҡосаҡлап үбергә, ҡотларға һ.б.).***

**Ҡотлауҙар дауам итә.**

**2-се алып барыусы:** Хәҙер хөрмәтле ҡунаҡтарыбыҙҙы табында үҙҙәрен тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырып китәбеҙ:

- Үҙенде өйөндәге һымаҡ хис ит, тик ҡунаҡта икәнеңде онотма.
- Насар кәйефеңде ишектең теге яғында ҡалдырып ин. Табында ҡош

тотҡан кеүек шатланып, ауыҙыңды йырып ултыр.

● Күршегеҙҙе үҙегеҙҙең ҡатынығыҙ менән бутай күрмәгеҙ. Иҫегеҙҙән сығармағыҙ: күрше тауығы -ҡаҙ булып, күрше ҡатыны- ҡыҙ булып күренә ул.

● Ҡатынығыҙ ботоғоҙҙо семеткән йәки аяғығыҙға баҫҡан осраҡта ҡысҡырып ебәрмәҫкә, ә "аппағым" тип үбеп алырға.

● Башҡаларға һәр саҡ ҡушылып йырла, белмәгән хәлдә ауыҙыңды асып ултырһаң да ярай.

● Мәжлес ваҡытында кейәү менән кәләште йөҙәтеп йөрөү, тәнәфестә уларҙы сат-сат үбеү ҡәтғи тыйыла.

Хөрмәтле ҡунаҡтар!

Беҙ һеҙҙең арала ошо ҡағиҙәләрҙе үтәгән "иң-индәрҙе" һайлаясаҡбыҙ, туй аҙағында билдәләп, миҙалдар, бүләктәр бирәсәкбеҙ.

**Алып барыусы:** Хөрмәтле йәштәр! Бына был "Теләктәр" альбомы һеҙҙең беренсе ғаилә кенәгәһе һәм документы булыр. Уның беренсе битенә туй балдағы төшөрөлгән. Икенсе бите бергә төшкән фоторәсемдәр өсөн ҡалдырыла. Альбомдың бер битенә теләктәрегеҙҙе белдереп, ҡултамғалар ҡуйырға мөмкин.

**2-се алып барыусы.** Ә хәҙер кәләш менән кейәүгә техник паспорт тапшырабыҙ.

Быныһы - кәләштең техник паспорты. Ул кейәүгә тапшырыла. Кейәү кеше хәҙер уны ҡысҡырып уҡый.

**Кейәү.** Кәләш менән һаҡ эш итеү һорала. Уға ҡарата мөнәсәбәт, уның менән аралашыу кәләшкә теркәп бирелгән инструкцияға тура килергә тейеш.

*Комплектта түбәндәге әйберҙәр бар:*

Кәләш -бер дана

Фата- бер дана

Туй күлдәге- бер дана

Аҡ туфли- бер пар

*Техник яҡтан характеристика:* буйы, ауырлығы, аяҡ кейеме үлсәме, күҙҙәре- донъя стандартына тап килә.

*Файҙаланыу ҡағиҙәләре:* Бәхетһеҙлек осраҡтарын булдырмаҫ өсөн тупаҫ һүҙҙәр әйтмәү зарур, был һүҙҙәрҙең объекты сығырынан сығарыуы мөмкин. Оҙаҡ ваҡытҡа яңғыҙын ҡалдырмағыҙ, эш-мәшәҡәттәрҙе мөмкин ҡәҙәр кәметеү һорала, югиһә, кәләштең сафтан сығыу ҡурҡынысы бар.

**Файҙаланыу өсөн күрһәтмәләр:** Эксплуатациялау ҡәтғи тыйыла. Гарантия срогы - ғүмерлек. Был комплектты әҙерләгән ойошма, ошо ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгән осраҡта, тауарҙың техник талаптарына тура киләсәгенә гарантия бирә.

**2-се алып барыусы:** Ә хәҙер кейәүҙең техник паспортын кәләшенә бирәбеҙ, ул уны ҡысҡырып уҡырға тейеш.

**Кәләш.** Ир үҙенең ҡатынын яратыу һәм хөрмәтләү өсөн кәрәк, уны йорт эштәрендә һәм төрлө ижтимағи саралар ваҡытында файҙаланырға мөмкин.

*Комплектта түбәндәге әйберҙәр бар:*

Кейәү- бар дана

Галстук- бер дана

Ботинкалар -бер пар

Ойоҡбаш- бер пар

*Техник яҡтан характеристика:*

Буйы-уртаса

Ауырлығы- таманса

Аяҡ кейеменең үлсәме- ярайһы

Сәсе- тәбиғи

Күҙе -ҡара

Көсө- бер кешегә тиң

Ашау- эсеүгә килгәндә, ризыҡ эҙләп ситтә йөрөмәй.

*Файҙаланыу ҡағиҙәләре:* Аҙ ғына ла бөрмәҫкә. Янғын булған осраҡта уны ҡотҡарыу әмәлен табырға. Ҡатынын иркәләгән, йә булмаһа йорт эштәрен эшләгән сағында иғтибарын ситкә йүнәлтмәҫкә.

*Гарантия шарттары:* Кейәү ғүмер буйына эшкә егергә иҫәпләнгән. Әхлаҡ яғынан туҙа торған түгел. Транспортта йөрөргә яраҡлы.

*Иҫкәрмә:* Комплектты әҙерләүсе иптәштәр ошо ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгән саҡта тауарҙың техник талаптарға тура киләсәгенә гарантия бирә. Паспорт юғалған осраҡта дубликат бирелмәй.

Хөрмәтле ҡунаҡтар! Йәш ғаиләнең мөлкәтен иҫәпләй торған комиссия эшен тамамланы, һүҙҙе уларға бирәбеҙ.

***(Шаян ҡоҙасалар бүләктәр иҫәбен әйтеп, туйға бүләккә төшкән әйбер, конверттарҙы йәштәргә тапшыра).***

**Алып барыусы:** "Йөкләмә ҡабул итеү" уйынын тәҡдим итәбеҙ. Бер конвертҡа яҙып һалынған теләктәрҙе кейәү һәм кәләш алмаш-тилмәш тартып сығаралар ҙа ҡысҡырып уҡыйҙар.

● Һин бала ҡарарһың, ә мин танцаға йөрөрмөн.

● Һин бәпәй табырһың, ә мин ҡарармын.

● Киске ашты әҙерләү икебеҙҙең эш булыр.

● Бала йүргәктәрен йыуыуҙы үҙ өҫтөңә алырһың.

● Эштә тотҡарланһам, йыйылыштан ҡайтмай ҡалһам - командировкала булырмын.

● Аш-һыу әҙерләү һинең эшең, матурым.

Ҡәҙерле йәштәр, бөгөн ғүмерегеҙҙең иң гүзәл миҙгелдәрен кисерәһегеҙ. Һеҙ өр-яңы дәүләт, ғаилә төҙөнөгөҙ. Һеҙҙең ғаилә никахы ныҡ булһа, илебеҙҙең нигеҙе лә шул ҡәҙәре ныҡ булыр. Хеҙмәттә һынатмағыҙ, балаларығыҙҙы игелекле итеп үҫтерегеҙ. Мөхәббәтегеҙ тигеҙ булһын, хистәрегеҙ яҡынлығын ғүмер буйына һаҡлағыҙ.

***(Килен менән кейәүҙе бейетеү. Улар бейегәндә таҡмаҡ әйтеп, аяҡ аҫтарына тәңкә ташлайҙар)***

Агиҙелгә һал килгән,
Һал өҫтөндә мал килгән.
Өфөлә юҡ, Мәскәүҙә юҡ,
Һеҙҙең кеүек пар килгән
Йым -йым иткән ал сәскә
Һыу буйында бар микән?
Шундай матур, сәскә кеүек
Һеҙгә тиндәр бар микән?

**Күмәкләп бейеүҙәр, "йыр ярышы" үткәрергә мөмкин**

**2-се алып барыусы:** "Алма беш, ауыҙыма төш" уйыны. Алмалар буй етмәҫлек юғарылыҡта эленгән була, йәштәр бейей- бейей тештәре менән үрелеп алырға тейеш.

**Алып барыусы.** "Яҙмышыңды тап" конкурсы

Туйҙа йәштәр танышырға, үҙ яртыларын табырға мөмкин. Егеттәр һәм ҡыҙҙар китап һәм әкиәт геройҙарының исемдәре яҙылған карточкаларҙы тартып алалар һәм музыка аҫтында үҙҙәренең парҙарын эҙләйҙәр. Тапһалар, бергә бейейҙәр, вальс әйләнәләр. Үҙ ишен тапҡан һәм иң матур бейегән парҙарға бүләктәр бирелә.

**Алып барыусылар:** Беҙ ҡунаҡтар араһында иң-индәрҙе билдәләнек:

"Иң күңелле" тигән исемде һәм миҙалды Фәлән атлы ҡоҙа ала.

"Иң күп һөйләүсе"
"Иң әүҙем"
"Иң шәп бейеүсе"
"Иң шәп таҡмаҡсы"
"Иң мөхәббәтле"
"Иң тыныс"
"Иң матур"
"Иң тапҡыр" һ.б.

**Алып барыусылар.** Әйҙәгеҙ, күмәкләп киленгә кәңәштәр бирәйек:

Кеймә итек, кей сабата,
Сабата тиҙ атлата.
Тиҙ атлаған килендәрҙе
Ҡәйнәләр бик ярата.
Йәш килен барыһынан да
Иртә торорға тейеш.
Ҡәйнәһе тороуға
Сәй ҡуйылырға тейеш.
Ҡәйнәһенең ҡомғанынан
Йылы һыу әҙәлмәһен,
Килен кеше йүгереп йөрөһөн,
Атлап ҡына йөрөмәһен.
Ҡайнар ҡоймаҡ әҙер булһын,
Табала шыжлап торһон.
Өҫтәлдәрҙең өҫтәрендә
Самауыр гөжләп торһон.
Һыйыр һауылған булһын,
Көтөү ҡыуылған булһын,
Эш бөткән, өй йыйылған,
Иҙән йыуылған булһын!
Тик хәҙер сабата түгел,
Техника заманаһы!
(Исеме) - йәш киленебеҙ
Шул замана балаһы!
Риза булмаҫ иртүк тороп,
Көнө буйы йүгерергә.
Бешерергә, таҙартырға,
Йыуырға, һеперергә.
Башың булһа, яйы сығыр,
Бер ҙә (исеме), ҡайғырма!
Ир менән ҡатын араһында
Юҡ бит хәҙер айырма!
Яйлап-майлап, көйләп-сөйләп,
Бер яйын да табырһың!
Тиҙ атлатҡан сабатаны
(Исеме) кейҙерерһең!

**Кейәүгә кәңәштәр:**

● Урамда ҡатының теләгән яҡтан бар, әммә үҙең теләгән яҡҡа алып бар;

● Иҫеңдә тот: әҙерәк юл ҡуйып, күберәк алыуың бар;

● Ҡатыныңды ярат, ҡулыңда ғына күтәреп алып йөрөт, ә башыңа ул үҙе менеп ултырыр;

● Ҡатын - ул һинә һөт түгел, ташмаҫ, ләкин уны ҡайнап сығыу дәрәжәһенә еткермә;

● Ҡатының өсөн кәнфит булма, әммә шуныһын да белеп тор: икмәк менән генә тамаҡ туҡ булмаҫ;

● Ҡатыныңа күберәк бүләк бир, шулай булғанда ғына үҙең дә унан бүләк алырһың.

**Алып барыусы.**

Ҡәҙерле йәштәр!
Һеҙҙең өҫтәлдә һәр ваҡыт
Һый-хөрмәт тулып торһон.
Һыйлағыҙ дуҫты яратып,
Дуҫтар гел килеп торһон!
Таҫма телдәр менән һеҙгә
Дошмандар һыйынмаһын.
Яҡты нур һүнмәһен йөҙөгөҙҙә
Мөхәббәт һыуынмаһын!
Тәмле булһын телдәрегеҙ,
Тәмле һүҙ - йән аҙығы.
Татыулыҡта, тыныслыҡта
Йәшәйештең ҡыҙығы.
Тормош - бик йүгерек йылға
Ағыр ҙа ағыр ғына.
Һеҙҙе һәр көн, сәғәт һайын
Һынар ҙа һынар ғына.
Ауырлыҡтар килгән саҡта
Инде иңгә ҡуйығыҙ.
Ергә хәләл көстәр менән
Матур эҙҙәр уйығыҙ!

***(Йәштәрҙе оҙатыу).***

Алып барыусы.
Хөрмәтле дуҫтар, туғандар!
Ҡоҙалар, ҡоҙасалар!
Был туйҙар булмаҫ ине лә
Ҡоҙалар булмаһалар.
Туйҙан ҡайтып китеү менән
Онотоп бөтөрмәгеҙ.
Рәхмәт әйтеп хужаларға
Таралышайыҡ өйҙәргә.
Йырлап уҙайыҡ урамдарҙан,
Килен төшкән көйҙәргә.
Хәҙер инде йәш парҙарға
Теләйек һуңғы теләктәр!
Мәңгелеккә йәдкәр булһын,
Һеҙ ҡалдырған бүләктәр!
Бындай туйҙар, айыҡ туйҙар,
Дуҫтар, күберәк уҙһын!

**Нәсимә СОЛТАНОВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**210**

Күркәм холоҡ, зирәк аҡыл, тыйнаҡ ҡылыҡ
Хазинаның иң ҙурыһы барыбер.
Ҡәҙерҙәрен белгәндәргә ошо байлыҡ
Биш намаҙға, ураҙаға бәрәбәр.

**211**

Бер-береһен хөрмәт иткән
Мосолмандар бер тән ише.
Бөтә тәнең ауыртҡандай
Һыҙлағанда тик бер тешең.

**212**

Эй, өммәтем, бер көн
Баҫҡандай ерҙе тән
Илгә фетнә тулыр.
Иртән мөъмин булған
Кисен кафыр булыр,
Динен малға һатыр,
Яҙыҡ эштәр ҡылыр.

**213**

Көрәшеп еңгән батырҙың
Өлөшөнә дан төшөр.
Батырҙарҙың да батыры -
Асыуын еңгән кеше.

Килгәндә ныҡ асыуығыҙ,
Хәйерле өндәшмәүегеҙ,
Ауыҙығыҙҙы асмауығыҙ.

**214**

Буш килгән мал байлыҡ түгел,
Тик бер айлыҡтыр.
Күңелендәге хазина
Бөтмәҫ байлыҡтыр.

Хәләл малын кем ҡәҙерләп тотор,
Ярлылыҡ та шуны урап үтер.

**215**

Арабыҙҙа йәнһеҙ әйбер һымаҡ
Тоғро була алған бик һирәктер.
Йәнле бәндәләргә ҡарағанда
Йәнһеҙ әйбер итәғәтлерәктер.

**216**

Барыһын афәт емерә,
Дингә афәт - яуыз түрә.

**217**

Ир булып кейенгән ҡатын,
Ҡатын булып кейенгән ир
Алыр Аллаһтың ләғнәтен,
Ундайҙарҙан ерәнер ер.
Ҡауышһа ике ир заты,
Ҡауышһа ҡатын вә ҡатын,
Алыр Аллаһтың ләғнәтен.

**218**

Эй һин әҙәм балаһы,
Ниндәй хәлгә ҡалаһын?!

Етерлек мөлкәтең барҙа
Нәфсең тыя белмәйһең.
Аҙынан ҡәнәғәтләнә,
Күбенән туя белмәйһең.

Язаһы килер ялғандың,
Сиге булыр хәйләнең.
Урлап йыйған донъяның бер
Аҫты-өҫкә әйләнер.

Тәнең - таҙа, күңелең - тыныс,
Ашың хәләл булғанда,
Тормошондоң ҡото артыр
Шөкөрана ҡылғанда.

**219**

Ике - берҙән, өс - икенән,
Дүрт өҫтән хәйерлерәк.
Шулай булғас, өммәтемә
Тупланыу, артыу кәрәк.

Өммәтен оноҡандарҙы,
Тоғро юлдан сыҡҡандарҙы
Аллаһы Тәғәлә хупламаҫ,
Яңынан бергә тупламаҫ.

**(Дауамы бар).**

***✓ Ишан беҙгә: "Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) башҡорттарға Исламды таратыу өсөн өс сәхәбәһен ебәргән. Шуға ла беҙ һеҙҙең халыҡҡа айырыуса хөрмәт менән ҡарайбыҙ, һеҙҙең килеүегеҙ өсөн дә бик шатбыҙ", - тигәйне.***

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҺӘҢ... аҡыллыраҡ булырһың

■ Нью-Йорктың Морган Стенли исемендәге балалар госпиталенең тиҙ ярҙам бүлегендә тәжрибә рәүешендә iPad-тар индерелгән. Бындай ғәҙәти булмаған сара бәләкәй пациенттарҙы ауыртыуҙан һәм ҡурҡыуҙан ҡотолдороу өсөн ҡулланыласаҡ. Төрлө ауырыу менән әләккән баланы планшеттағы уйын, музыка, видео тиҙ генә тынысландыра ала, был үҙ сиратында дауаның һөҙөмтәһен яҡшырта. Бындай ысул ата-әсәләргә, балаларға ғына түгел, табиптарға ла бик оҡшаған, сөнки хәҙер укол ҡаҙау өсөн бала менән оҙаҡ итеп һөйләшергә лә, уны ныҡ итеп тотоп торорға ла кәрәкмәй.

■ Швед ғалимдары асыҡлауынса, туйғансы йоҡламау организмда матдәләр алышыныуын тотҡарлай. Быға тиклем йоҡо туймауҙың артыҡ ауырлыҡҡа килтереүен асығыу гормоны кимәле күтәрелеүгә бәйләп аңлаталар ине. Яңы тикшеренеүҙәр раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ төндә йоҡо туймау һөҙөмтәһендә матдәләр алышыныуы тотҡарланыуына бәйле икән. Эксперттар фекеренсә, күберәк йоҡлап, артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоп була.

■ Франция парламенты "Фталат, парабен йәки алкилфенолдар ҡулланып яһалған продукция етештереү, импортҡа сығарыу, һатыуҙы тыйыу тураһында" закон ҡабул иткән. Хәҙер был илдә косметикала парабен нигеҙендәге консерванттар ҡулланылмаясаҡ. Ғалимдар фекеренсә, заманса косметика саралары составына ингән был синтетик консерванттар түш яман шешенә килтереүе ихтимал. Был фараздар ғилми яҡтан нигеҙләнмәгән, әммә француз етештереүселәре был имеш-мимеште үҙенең файҙаһына ҡулланып, "составында парабен юҡ" тигән яҙыу менән ҡиммәтерәк хаҡҡа косметика һата башлаған. Билдәле косметика компанияһы хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, консервантһыҙ косметика етештереү бөтөнләй мөмкин түгел, ул саҡта уның һаҡланыу ваҡыты бик ҡыҫҡара. Косметиканан тыш, парабен көнкүреш химияһында, хатта E214, E216, E 218 маркировкалы аҙыҡ-түлектә лә ҡулланыла. Хәҙер был закон Евросоюздың Сенатында тикшерелә.

■ Саф һауала күберәк йөрөү кешенең интеллектуаль кимәлендә ыңғай сағылыш таба. Америка Ҡушма Штаттарының Иллинойс штаты университеты нейрохирургтары ошондай һығымтаға килгән. Тикшеренеүселәр төркөмө етәксеһе, профессор Арт Крамер фекеренсә, әгәр ҙә кеше аҙнаһына 40 минут ҡына булһа ла йәйәү йөрөһә, уның интеллектуаль мөмкинлектәре күпкә күтәреләсәк. Ғалимдар әйтеүенсә, ошондай йәйәүле сәйәхәттәр ваҡытында кеше төрлө тышҡы ҡуҙғытыусыларға иғтибар итергә мәжбүр була һәм һөҙөмтәлә баш мейеһенең функциональ әүҙемлеге күтәрелә.

■ Кешенең кәйефе яҡшы булғанда ул ғәҙәттәгенән яҡшыраҡ күрә башлай, ти Канаданың Торонто университеты ғалимдары. Тикшеренеү барышында ғалимдар функциональ магнит-резонанс томография ярҙамында баш мейеһенең күреү өсөн яуаплы булған өлөшөнөң кәйефкә бәйле нисек үҙгәреүен асыҡлауға өлгәшә алған. Ғалимдар әйтеүенсә, оптимистар тирә-яҡ донъяны яҡшыраҡ күрә һәм һәр деталгә иғтибар итә.

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

**Әсе хәҡиҡәт был: беҙ үҙ тарихыбыҙҙың осоҡ ҡынаһы тураһында хәбәрҙарбыҙ. Архивтарҙа башҡорт тарихына ҡағылышлы күпме материалдар ҡул тейгеҙелмәй, күҙ йүгертелмәй ята. "Милләт тарихын үҙ милләт улдары һәм ҡыҙҙары өйрәнергә тейеш", тигәйне бер саҡ билдәле тарихсы Морад Аджи. Беҙ ҙә улдарыбыҙ һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың үҙ тамырҙарына бағыуын, тарихыбыҙға байҡау яһауын түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Ә шул арала башҡа милләт вәкилдәренән дә тарихыбыҙға ҡағылышлы матур мәғлүмәттәр килә тора. Был юлы шундай мәғлүмәттәрҙе Төркиә тарафтарынан, төрөк ҡәрҙәштәребеҙҙән алдыҡ.**

# СӘХӘБӘЛӘР - БАШҠОРТ ЕРЕНДӘ

2009 йылда бер төркөм башҡорт мосолмандары Стамбулда булып, Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең бөйөк ишаны Осман Нури Топбаш менән осрашып, уның сөхбәттәрен (дини әңгәмә), Ислам тураһындағы уй-фекерҙәрен, кәңәштәрен тыңлап ҡайтҡайны. Осман Нури Топбаш Ислам тураһындағы күп һанлы китаптары менән бөтә донъяға билдәле шәхес. Ул да, Зәйнулла ишан һымаҡ, Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең алтын силсәләһендә утыҙынсы булып торған Хәлидиә тармағын дауам итеүсе. Уның менән осрашыуҙа булған Сәғит хажи Исмәғилев сәйәхәттән ҡайтҡас ошоларҙы бәйән итте:

- Ишан менән осрашҡанда ул беҙгә: "Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) башҡорттарға Исламды таратыу өсөн өс сәхәбәһен ебәргән. Шуға ла беҙ һеҙҙең халыҡҡа айырыуса хөрмәт менән ҡарайбыҙ, һеҙҙең килеүегеҙ өсөн дә бик шатбыҙ", - тигәйне. Был мәғлүмәтте мин үҙем шундай ҙур тулҡынланыу менән ҡабул иттем. Башҡортостанға ҡайтҡас, ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм иғтибар менән тарихи сығанаҡтарҙы ҡарай башланым. Тарихсыбыҙ Салауат Таймасов тапҡан архив материалдарынан күренеүенсә лә, 630 йылда Башҡорт еренә 3 сәхәбәнең килеүе билдәле. Уларҙың береһе һуңыраҡ Булғар иленә юл тотҡан. Тәүге ике сәхәбә башҡорт ерендә ҡалған. Иң беренсе Ислам ҡабул итеүсе - Айытҡол Зәит - Ыҡ буйҙары аҫаба башҡорто булған. Шулай итеп, Ислам VII быуатта уҡ башҡорт ырыуҙары араһында тарала башлаған. Быны археологик материалдар ҙа раҫлай. Стәрлебаш районының VII быуатҡа ҡараған ҡәберлектәрендә мәрхүмдәр Ислам ҡанундары буйынса ерләнгән булған...

* * *

**Тарихсы Салауат Таймасовтың һөйләгәндәренән:**

- Башҡортостан тарихы буйынса китаптарҙа Ислам ошо территорияға X быуатта, Ибн Фаҙлан етәкселегендәге Бағдад хәлифәтенең ошо ерҙәрҙән үткән мәлендә инә башлаған, тип раҫлана. Ә бит уларҙың тәржемәсеһе аҫаба башҡорт - мосолман була. Был үҙе үк Ибн Фаҙланға тиклем үк башҡорттарҙың Исламды ҡабул иткәнлеген раҫлай. Тарихи сығанаҡтар, шулай уҡ XVI быуат уртаһында Ҡаҙан тарихсыһы Шәрәфетдин ибн Хисаметдин раҫлауынса, 630 йылда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр Башҡорт-Булғар (Бәйғәмбәр йәшәгән осорҙа әле беҙҙең тарафтарҙа булғарҙар булмаған, автор был төбәкте "Булғар" тип дөйөмләштереп алған тип фараз итергә кәрәк) ерҙәренә Ислам динен таратыу өсөн үҙенең арҡаҙаштарын - Абдрахман ибн Зөбәйерҙе, Зөбәйер ибн Джейдты, Талха ибн Усманды ебәрә. Тарихсы шулай уҡ Ислам динен ҡабул иткән беренсе башҡорттарҙың береһе Әй буйында йәшәүсе аҫаба Айытҡол Зәит (Заһит) улының, Ислам ҡабул иткән тағы 10-лаған башҡорттоң исемдәрен һанап сыға. Башҡортостанда Исламдың иртә таралыуын кире ҡаҡҡыһыҙ итеп дәлилләүсе тағы бер факт: Стәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендәге VII-IX быуаттарға ҡараған мосолман ҡәберлеге. Ул әле Левашовка ҡәберлеге тип атала. 1940 йылда бында "Сода" предприятиеһын төҙөү өсөн соҡор ҡаҙалар. Шунда Бағдад тәңкәләре, динарҙар, башҡа аҡса табыла. Улар VIII-IX быуат менән билдәләнә. Был табыштар Исламдың таралыу ваҡытын да күрһәтә...

* * *

Төрөк ҡәрҙәштәребеҙҙән килгән тағы бер хәбәр. Кипрҙа йәшәп ятыусы әүлиәләр солтаны шәйех Мөхәммәт Нәҙим Хаҡҡани ауыҙынан әйтелгән мәғлүмәт булыр быныһы. Бөгөн бар донъяла шәйех Нәҙимде Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең иң баш шәйехтәренең береһе итеп беләләр. Европа илдәрендә, Малайзияла, Пакистанда, Сингапурҙа, Төньяҡ Америкала, Шри-Ланкала уның меңәрләгән мөрите (шәкерте) йәшәй. Бөтөн донъя мосолмандары уның эргәһенә сәйәхәт ҡыла, уның вәғәздәрен тыңлай. Ҡайҙа ғына булмаһын, уны ябай кешеләр ҙә, чиновниктар ҙа, эшҡыуарҙар ҙа, хөкүмәт ағзалары ла оҙатып йөрөй. Аҙна һайын тип әйтерлек ул журналистарға донъя ваҡиғалары, Ер шарының киләсәге тураһында интервью бирә.

Башҡортостандан да бер төркөм мосолмандар шәйехтең эргәһендә булып ҡайта. Шәйех Мөхәммәт Наҙим Хаҡҡани беҙҙең мосолмандарҙы айырыуса хөрмәт менән ҡаршылай. Уның асыҡ йөҙ күрһәтеүенең сере аҙағыраҡ, осрашып һөйләшкәндә асыла: шәйех беҙҙең яҡташтарға Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Башҡорт еренә өс сәхәбә ебәреүе, уларҙың икәүһенең ошо ерҙә ерләнеүе тураһындағы хәбәрҙе еткерә. "Уларҙың ҡәберҙәрен эҙләп табып, тәрбиәләгеҙ, зыяраттар ҡылығыҙ, халҡығыҙға ошо мәғлүмәтте еткерегеҙ. Сәхәбәләрҙең рухтары ошо көнгә тиклем халҡығыҙҙың уяныуын көтә", - ти ул. Шәйех Мөхәммәт Наҙим Хаҡҡани сәхәбәләрҙең Башҡортостандың ҡайһы төбәгендәрәк ерләнеүен дә самалап әйтә. Ошо мәғлүмәттәрҙән һуң, тағы ла халҡыбыҙ хәтерендәге, телендәге төрлө хәтирәләрҙән дә сығып фекер йөрөтөп, сәхәбәләрҙең ҡәбере Миәкә районының Нарыҫтау башында урынлашҡан, тигән һығымтаға киленә.

* * *

**"Башҡортостан" гәзитенең 21 май һанында Гөлзәминә Кәримова Миәкә районы халҡының изге әүлиәләргә арналған хәтирәләре тураһында яҙып сыҡҡайны. Өҙөк килтерәйек:** "...Нарыҫтау ауылы халҡы элек-электән ошо тау ба-



Сәхәбәләр ҡәбере ошондай хәлдә ине.



Нарыҫтау.

шындағы ҡәберлеккә зыярат ҡылырға килеүсе мосафирҙарҙың күплегенә хайран ҡалыр булған. Ғәйнулла Ниғмәтуллин олатайҙың һөйләүе буйынса, ҡайҙарҙан ғына килмәгән улар: Урта Азия яҡтарынан да, Ҡаҙағстандан да. Йәйәүләп тә, һыбай ҙа, дөйәгә атланып та. "Ололарҙың әйтеүенсә, элегерәк беҙҙекеләр Мәккәгә хаж ғәмәле ҡылырға барһа, урындағы халыҡ: "Ниңә шул тиклем юл ғазаптары кисереп, оло сәфәргә сыҡҡанһығыҙ? Үҙегеҙ йәшәгән ерҙә лә хаж ҡыла торған Мәккәгеҙ бар бит!" - тип әйтеп ҡайтарыр булған", - тип хәтерләй Нарыҫтау аҡһаҡалы. Был изге урындан әле лә кеше өҙөлмәй. Күрше төбәктәрҙән, Урта Азия яҡтарынан күп киләләр. Тау башындағы ҡәберлеккә зыярат ҡылып, тау аҫтында сылтырап ағып ятҡан шишмәлә һыу ҡойоноп, уны күпләп һауыттарға тултырып алып ҡайтып китәләр. Ысын булһа, һыуҙың составы Зәм-зәм шишмәһендәге һыуҙыҡы менән бер иш, тип тә әйтәләр. Ошо һыуҙы эсеп, бик күп сирле кешеләрҙең аяҡҡа баҫҡаны ла күпте һөйләйҙер. Зыяратлы шишмә тип йөрөтөлгән был урын тураһында 1900 йылғы Мәғүҙә Рәхимғолова әбейемдең дә: "Беҙҙең Нарыҫтауҙағы ҡәберлеккә кешеләр әллә ҡайҙарҙан каруан менән килеп, үҙҙәре менән алып килгән малдан ҡорбан салып, ҡуна ҡалыр булғандар", - тип хәтерләгәне иҫемдә. Үрҙә әйткәнемсә, ҡәберлек бөгөн таштары таралып, ҡарауһыҙ булып ята. Баш осона матур таш ҡуйып, кәртәләп алһаҡ, ҡайһылай ҙа дан булыр ине. Аллаһы Тәғәлә, үҙенең изгеләрен хөрмәт иткән халыҡтың дәрәжәһен юғары күтәрә, тигәнде ишеткәнем бар. Ер-һыуыбыҙ, халҡыбыҙ яҙмышы ла әүлиәләр бәрәкәтендәлер. Һәр хәлдә, нарыҫтауҙар күршетирәләге халыҡтан айырылып тора. Элек-электән улар динле булды. Әле лә йәштәр күпләп дингә килә. Нарыҫтауҙарын бик ололай улар. Изге урын икәнлеге ҡандарына һеңгән.

Зәйтүнә Әбделғатина инәй ҙә ошондай бер хәтирә менән уртаҡлашҡайны: "Зыяратлы ҡойоға гел һыу алырға киләм мин. Тәүҙә шишмә эргәһендә ике рәкәғәт намаҙ уҡып алам. Шунан һуң ғына һыу алам. Изге һыу бит ул, теләһә нисек тултырып алып ҡайтырға ярамай. Бер килгәнемдә ҡараһам, әллә күпме машина тау итәгенә килеп туҡтаған. Берәүһе изге тауҙың итәгенә тиклем күтәрелеп еткән. Мин намаҙ уҡып, һыу алғансы, былар ҡайтыр юлға сыҡты. Тау итәгендә туҡтаған машиналар һин дә мин ҡуҙғалды ла китте. Тау битләүендәгеһе ҡуҙғалмай. Күмәкләп күтәреп алып төштөләр. 30-сы йылдарҙа һарыҡ көтөүсеһе булып бер оло ғына әбей йөрөй торған булған. Бер мәл һарыҡтарҙы ошо тауға ҡыуалап мендереп ебәрһә, тау ҡапыл ғына тетрәнә башлаған. Ҡото осоп, тиҙ генә малдарын кире ҡыуалап төшөргән. "Ҡәбер өҫтөндә йөрөү - оло гонаһ", - ти торғайны боронғолар, белмәй әйтмәгәндәр инде".

Тарихсы, халыҡ табибы Фәрит Фәйзи улы Иҫәнғолов әйтеүенсә, урындағы көтөүсе егеттәр тау өҫтөнә төрлө геометрик фигуралар һынланышында аҡ нур төшкәнен дә күргәндәр.

Кем ерләнгән Нарыҫтау башына? Берәүҙәр Иҙеүкәй менән Мораҙымдыр тип раҫларға тырыша. Нисек кенә булмаһын, был ҡәберлек бик боронғо күренә. Әүәл изге кешеләрҙең ҡәберлегә эргәһенә халыҡ араһында абруй ҡаҙанған шәхестәрҙе ерләү йолаһы булған, тимәк, Иҙеүкәй менән Мораҙымдың ысынлап та йәнәшәләге тауҙа ерләнеүе бик ихтимал. Ә бына боронғо ҡәберлек буйынса эргә-тирә райондарҙа төрлө бәхәсле фекерҙәр йөрөй. Берәүҙәр был изге тауҙа бәйғәмбәр ерләнгән тип фаразлай, икенселәр сәхәбәләр ерләнгән тип раҫлай, өсөнсөләр әүлиә ҡәберелер тип бара. Нисек кенә булмаһын, изге урын ул - беҙҙең Нарыҫтау..."

* * *

**Ошо мәҡәләлә әйтелгәндәрҙе дауам итеп, "Башҡортостан" гәзитендә тағы бер мәҡәлә донъя күрҙе. Авторы - Миәкә районы Ҡаран-Ҡунҡаҫ ауылынан Түләк Ғирфанов. Мәҡәләнән өҙөк:**

"Инде оло йәштәмен. Ғүмер буйы Нарыҫтауға яҡын ғына ауылдарҙа йәшәнем. Был ҡәберлектәр һәм Нарыҫтау шишмәһе хаҡында бәләкәйҙән ишетеп үҫтем. Әсәйем йыш ҡына ошо тауҙарға зыярат ҡылырға бара һәм, йәйәү егерме саҡрым ара үтеп, изге һыу алып ҡайтып эсерә ине. Кинйәбикә өләсәйем Миәкә районы Күл-Ҡунҡаҫ ауылында йөҙ йәшкәсә йәшәне, вафатынаса иҫе дөрөҫ булды. Ул "Нарыҫтау башына сәхәбәләр ерләнгән", - ти торғайны. Байтаҡ йылдар сәхәбәләр һүҙен кеше исемелер, тип йөрөнөм. Баҡһаң, сәхәбәләр тип Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙе күреп белгән һәм унан Ҡөрьән Кәрим аяттарын өйрәнеп, уның оло фатихаларын алып, ҙур бурыс йөкмәп, Ислам динен донъяла таратып йөрөүселәрҙе әйткәндәр икән.

Октябрь ихтилалына тиклем ҡәберлеккә зыярат ҡылырға килеүселәр күпселектә ҡуна ятыусылар булған. Коммунистар осоронда ла бында килеүселәр туҡтаманы. Әле лә бында килгән машиналарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Кешеләр Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн тауға менеп зыярат ҡылыу, изге шишмәнән һыу алыу өсөн килә. Зыярат ҡылыу ул - Аллаға табыныу, Аллаһы Тәғәлә хаҡына аят-сүрәләр уҡып, сауабын бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт һәм ошонда ерләнгән изгеләрҙең рухына ебәреп, тик Аллаһы Тәғәләнән ялынып ярҙам һорау.

Тауҙың үҙенә лә иғтибар итәйек. Башҡа тау теҙмәләренән айырылып торған был түбә махсус өйөп ҡуйылған кеүек. Төньяҡтан ул һөҙәк кенә. Фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа киткән сәхәбәне күтәреп килгән халыҡ теҙемен һыйҙырыр тарлыҡта ғына һуҡмаҡ күтәрелә. Көнсығыш, көнбайыш битләүҙәре, ике тарафты тигеҙ симметрия яһап, текә генә өҫкә менә. Ҡиблаға ҡараған яғы ғәжәберәк. Әруахтың баш-яғы түңәрәкләнгән һәм түбәнерәктә бер аҙ ҡалҡыу. Хаҡ Тәғәлә үҙе хасил иткән ошо урынды махсус эҙләп табып ерләгәндәр бында сәхәбәләрҙе. Улар бөтөн халыҡтың оло ихтирамын яулаған, халыҡтың йәшәү рәүешенә ҙур үҙгәреш, яңылыҡ алып килгән шәхестәр булған. Аллаһы Тәғәләнең яратҡан бәндәләре улар.

Халыҡтың борон-борондан зыярат ҡылырға күпләп килеүенә туҡталайыҡ. Батырҙарҙың, әүлиәләрҙең ҡәберҙәрен дә халыҡ ҡәҙерләй, ҡарай, һаҡлап тота. Тик әүлиәләр ҡәберлеге лә, батырҙар зыяраты ла Башҡортостаныбыҙҙа бер ерҙә генә түгел, улар күп, әммә унда кеше алыҫ-алыҫ ерҙәрҙән даими һәм күпләп килмәй. Ошо һығымталар Нарыҫтау түбәһендә сәхәбәләр ятыуын тағы бер нигеҙләй.

Мөхәммәт бәйғәмбәр күп халыҡтарға Ислам динен индереү бурысы менән үҙ вәкилдәрен ебәргән. Башҡорт иленә ебәрелгән сәхәбәләрҙең халҡыбыҙға, беҙҙән башҡа икенсе халыҡтарға ла, Ислам динен таратып, танылыу табып, ошо ерҙә йәшәп вафат булыуын халыҡ хәтере, рухи хәтеребеҙ, һис шикһеҙ, онотмаған.

Әле яңыраҡ ҡына Кипр (утрауҙың Төркиә яғы) сәйәхәт ҡылған бер хәҙрәт унда бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең ҡырҡынсы быуыны - әүлиәләр солтаны шәйех Мөхәммәт Наҙим Хаҡҡани хәҙрәт йәшәүен, ә ҡатыны революциянан һуң сит илгә китергә мәжбүр булған башҡорттарҙың ҡыҙы Әминә булғанын һөйләгәйне. Кипр әүлиәһе лә Башҡорт иленә өс сәхәбә ебәрелеүен, икәүһе Нарыҫтауҙа ерләнеүен әйтеп, уларҙы исемдәре менән атаған.

Тағы ла шуға иғтибар итәйек. Халҡыбыҙ ике ҙур ҡитғаны берләштергән сиктә, йәғни Европа менән Азия уртаһында көн итә. Хаҡ Тәғәлә халҡыбыҙҙы тап ошо ерҙә бар ҡылған икән - был да тиккә түгел. Аллаһы Тәғәлә халҡыбыҙға ҙур бурыс йөкмәткән. Ул оло яуаплылыҡ талап итә. Күркәм тәбиғәтле, бөтә төр ҡаҙылма байлыҡтарға бай мәғрур Уралтау, ризыҡ һәм башҡа зиннәт тулы урман-һыуҙары - Аллаһтың беҙгә берләшеп, етеш тормошта йәшәүебеҙгә рөхсәте, еребеҙҙе, ихлас халҡыбыҙҙы иман нуры менән яҡтыртыуы ул. Шуныһы шатлыҡлы, халҡыбыҙ Аллаһ рәсүленең сәхәбәләрен, улар килтергән ғилемде - Ислам динен ихлас ҡабул иткән һәм Ислам диненә тоғро ҡалған ошо төбәктәге берҙән-бер халыҡ. Был күренеш тарихи яҙмалар аша ла, рухи хәтеребеҙ менән дә нығытыла.

Эйе, Миәкә районы Нарыҫтау түбәһендә сәхәбәләр ята. Ҡөрьән Кәрим аяттарында әйтелеүенсә, сәхәбәләр үлемһеҙ. Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн сәхәбәләрҙе ихтирам итергә, уларҙы иҫкә алып зыярат ҡылырға кәрәк. Тейешле рәүештә ҡорбандар килтереп, сәхәбәләребеҙҙең рухын күтәреү - бурыс. Шул саҡ сәхәбәләребеҙҙең рухы, хас та боронғо замандарҙағы кеүек, халҡыбыҙҙың ғәйрәтен, иманын арттырыуҙа тулы көсөндә йәнә эшләй башлаясаҡ, уларҙың рухы аша Аллаһы Тәғәлә халҡыбыҙға тағы ла иғтибарын көсәйтеп, иман нурын күбәйтер, илебеҙгә, еребеҙгә, халҡыбыҙға бәрәкәт ебәрер..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ был мәҡәләбеҙҙә ниндәйҙер асыш яһамайбыҙ, яңы һүҙ әйтмәйбеҙ - ул асыш тарихи мәғлүмәттәрҙә, халыҡ хәтерендә, замандың бөйөк шәйехтәре әйткәндәрҙә. Нисек кенә булмаһын, әле һөйләнгәндәрҙә - халҡыбыҙ тарихы. Беҙ нисәмә йылдар буйына ошондай мәғлүмәттәрҙе ишетергә лә теләмәй йәшәнек, шул арҡала бөгөн күптәребеҙ үҙенең кем икәнен, ниндәй милләт балаһы икәнен, тамырҙарын белмәй йәшәй. Шулай бөртөкләп йыяһы бар тарихыбыҙҙы. Бик күп тарихи ҡомартҡыларҙы тергеҙәһе бар.**

**Әйткәндәй, ошо көндәрҙә бер төркөм мосолмандар тырышлығы менән Миәкә районының Илсеғол ауылы эргәһендәге Нарыҫтау башында сәхәбәләр ерләнгән урын да төҙөкләндерелде, иҫтәлекле таш-ҡоролма ҡуйылды. 13 июндә ошо урында изгеләр рухына зыярат ҡылыу ойошторола. Унда теләге булған һәр кеше ҡатнаша ала. Сара 11-ҙә башлана.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тимерҙе ҡыҙыуында сүке

Әгәр һеҙгә бик ныҡ аҡса кәрәк икән, хыял көсөнә мөрәжәғәт итергә ҡулай ваҡыт. Уның өсөн түбәндәге күнекмәләрҙең береһен эшләгеҙ. Сөнки икеһен дә бер юлы эшләһәгеҙ, уларҙың һәр ҡайһыһы ярҙам итеренә бик ышанмаҫһығыҙ. Ышанмайынса был күнекмәгә тотноу ҡәтғи тыйыла!

Присцилла "Яныусы шар" күнекмәһен эшләп, 75 мең доллар эшләй. Эштондың, көтмәгәндә, фондтары тулылана, кемдер оҙаҡ көткән гонорарын ала.

"Дөйөм банк" күнекмәһе бөтөн донъяға таралмаған. Ул АҠШ-тың көнбайыш өлөшөндә генә иң ҙур популярлыҡ яулаған, күрәһең.

Бер генә күнекмәне һайлағыҙ ҙа, бары тик уға күрһәтмәләрҙе генә уҡығыҙ. Юҡһа, һеҙҙең һайлауығыҙ ихтыяждың үҙенә түгел, ә инструкцияларға нигеҙләнәсәк. Эшләй башлар алдынан күнекмәне нисек эҙмә-эҙлекле эшләргә икәнлеген хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**"Яныусы шар"**

● Ҡулығыҙға ҙур сумма аҡса алығыҙ. Купюра ни тиклем ҙурыраҡ, күнекмәнең һөҙөмтәһе шул тиклем яҡшыраҡ.

● Уңайлы итеп ултырғыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, аҡсалы ҡулығыҙҙы тубығығыҙға һалығыҙ.

● Баш осоғоҙҙа дүрт метр бейеклектә баскетбол тубы ҙурлығында янып тороусы шар эленеп тора, тип күҙ алдына килтерегеҙ.

● Янып тороусы шарҙы уйығыҙҙа ғына баш аша түбәнгә төшөрөгөҙ. Уның тәнегеҙҙән кендек тапҡырына төшөүен тойоғоҙ.

● Шарҙан яҡтылыҡ нуры сығып, күкрәк ситлеге аша үтеп, тубығығыҙҙа ятҡан аҡсаларға төшөүен күҙаллағыҙ.

● Аҡсаларығыҙҙың ошо яҡтылыҡтан заряд алғанын күҙәтегеҙ.

● Уйығыҙҙа ғына яҡтылыҡ нурын һүндерегеҙ.

● Уйығыҙҙа ғына аҡсаларығыҙҙы үҙегеҙҙән киңлеккә ебәрегеҙ.

● Төрлө яҡтан һеҙгә шундай уҡ миллионлаған купюра ҡайтыуын күҙаллағыҙ. Уларҙың ағымы буранға оҡшаған.

● Янып тороусы шарҙы үҙенең урынына ҡуйығыҙ, уның яйлап ҡына юғалғанын күҙаллағыҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Тәүлек эсендә тубығығыҙҙа ятҡан аҡсаларҙан ҡотолоғоҙ: йә берәй нәмә алығыҙ, йә ваҡлатығыҙ.

**"Дөйөм банк"**

● Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм ҙур ҡаланы күҙ алдына килтерегеҙ. Алдығыҙҙа колонналы етди, "Дөйөм банк" тигән яҙыуы булған бина пәйҙә булһын.

● Таш баҫҡыстар буйлап төп ишектән банкка инегеҙ. Таҙа бланкылар ятҡан өҫтәлгә килегеҙ.

● Үҙегеҙгә үҙегеҙ ихтыяжығыҙға тура килгән сумманы күрһәтеп, чек яҙығыҙ. Ҡомһоҙланмағыҙ.

● Уйығыҙҙа ғына кассирға килегеҙ һәм уғы чегығыҙҙы һоноғоҙ. Уның йылмайып, барыһы ла дөрөҫ, тәртиптә, тип раҫлауын күҙәтегеҙ.

● Банктан төп ишектән сығығыҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм тиҙҙән аҡса проблемаһы хәл ителерен аңлап, ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Бөтөн күрһәтмәләрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырһағыҙ, күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 13 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Гарантирую жизнь"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ералаш"
12.45 "Зворыкин-Муромец"
14.10 "Крепкий орешек-2"
16.20 "Легендарные кинокомедии"
17.20 "Полосатый рейс". Комедия
19.00 "При загадочных обстоятельствах". Детектив
21.00 "Время"
21.15 "Мульт личности"
21.45 "Yesterday live"
22.40 "Адольф Гитлер. Путь во власть". Док. фильм
23.45 "Борджиа", 2-я серия
00.45 "Умереть молодым"
02.50 "Необыкновенное путешествие"

### РОССИЯ 1

06.00 "Золотая мина". Детектив
08.45 "Три полуграции". Мелодрама
11.15 "Большая семья. Михаил Державин"
13.15 "Сваты-3". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Сваты-3". Продолжение
17.50 "Новогодние сваты"
20.00 "Вести в субботу"
20.30 "В ожидании любви". Мелодрама
00.15 "На море!" Комедия
02.15 "Секретный женский смех". Мелодрама
04.05 "Комната смеха"

### НТВ

05.40 "Детское утро на НТВ. "Аленький цветочек". Мультфильм
06.25 "Гроза муравьев". Полнометражный мультипликационный фильм
07.50 "Александр. Невская битва". Историческая драма
10.00 "Сегодня"
10.25 "Таинственная Россия. Девять главных тайн". Специальный проект
19.00 "Сегодня"
19.25 "Вердикт". Криминальный сериал
23.25 "За бортом". Романтическая комедия
01.40 "Кулинарный поединок"
02.35 "Футбольная ночь"
03.10 "Сплетня". Триллер

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Специальный репортаж"**
**07.30 "Мелодии Уральских гор". Р. Юлдашев**
**08.30 "Бешеные скачки"**
**10.00 "Тамыр" представляет…**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 19.45 "Орнамент"**
**12.45 "В поисках затерянного города"**
**13.30 "Пора разобраться". Большая Уфа"**
**14.15 "Петербургские тайны"**
**16.30 КВН РБ. 1/4 финала сезона 2011. Игра вторая**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Лика времени". А. П. Филиппов**
**20.00, 22.00 "Уфа - город дружбы и единства". Репортаж с Фестиваля муниципальных профессиональных творческих коллективов**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**23.00 "Свадьба"**

## 14 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 1-я серия. Мелодрама
22.30 "Адольф Гитлер. Путь во власть"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Безумцы", 3-я серия. Сериал "Городские пижоны"
00.40 "Франкенштейн"
03.00 Новости
03.05 "Микибо и я"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кто Вы, мистер Рид?"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 73-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 101-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 178-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Только ты", 1-я и 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Иноходец. Урок Перельмана"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Формула любви"
04.00 "Кто Вы, мистер Рид?"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Случайный пассажир". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело темное"
00.30 "Главная дорога"
01.05 "Без следа-7". Сериал
02.00 "Суд присяжных"
03.00 "Прокурорская проверка"
04.15 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Специальный репортаж"**
**10.15 "На самом деле"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "С душой сплетаются мотивы". Концерт**
**14.00, 23.30 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Байык-2011"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Пора разобраться "**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 15 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 2-я серия. Мелодрама
22.30 "Адольф Гитлер. Путь во власть"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Белый воротничок", 9-я серия. Сериал
00.45 "Калифрения"
01.20, 03.05 "Сочувствие господину месть"
03.00 Новости
03.50 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Снежный человек. Последние очевидцы"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 74-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 102-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 179-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Только ты", 4-я и 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Мода для народа"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.40 "Вам телеграмма..."
04.05 "Закон и порядок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Дезертир". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело темное"
00.25 "Квартирный вопрос"
01.30 "Без следа-7"
02.25 "Суд присяжных"
03.25 "До суда"
04.25 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 19.45 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Волшебный курай"**
**10.30, 18.15 "Специальный репортаж"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Любимые мелодии"**
**13.30 "Праздник курая"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Байык-2011"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Противостояние"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Дневник фестиваля им. Р. Нуреева**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 16 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная ", 3-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Лицом к лицу с Али". Док. фильм
01.45, 03.05 "Незнакомка"
03.00 Новости
04.10 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Гибель "Воздушного Титаника". Стратонавты"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 75-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 103-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 180-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Только ты", 7-я и 8-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Свердловский кошмар. Смерть из пробирки"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Горячая десятка"
03.15 "Закон и порядок"
04.10 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Пиковая дама". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Женский взгляд"
00.20 "Дачный ответ"
01.25 "Без следа-7". Сериал
02.20 "Суд присяжных"
03.20 "До суда"
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.30, 18.15 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Фархат - принц Персии". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Любимые мелодии"**
**13.30 "Праздник курая". Репортаж с Республиканского конкурса кураистов. Часть II**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Салауат йыйыны"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Дневник Фестиваля им. Р. Нуреева**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 17 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Подсадной". Детектив
23.20 "Девушка, которая взрывала воздушные замки". Триллер
02.10 "Пьяный мастер"
04.20 "Спасите Грейс"
05.10 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 76-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 104-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 181-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.55 "Осенние заботы". Мелодрама
00.40 "Смерть в три дня-2". Фильм ужасов
03.00 "Дом черных теней". Драма

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "История всероссийского обмана. Выход есть"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". Сериал
23.20 "Песня для вашего столика". Музыкальный фильм
02.35 "Истории Юга". Комедия

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Любимые мелодии"**
**13.30 "Праздник курая". Репортаж с Республиканского конкурса кураистов. Часть III**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00, 18.30, 22.30, 00.45 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.20 "Букет дружбы". Дни Мордовии в РБ**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 Дневник фестиваля им. Р. Нуреева**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 18 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40 "Мерседес" уходит от погони"
06.00 Новости
06.10 "Мерседес" уходит от погони". Продолжение
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Михаил Державин. Тот еще "моторчик"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Химик", 1-4-я серии. Сериал
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.10 "Таинственный остров". Детектив
20.00 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы". Продолжение
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 Андрей Макаревич и "Оркестр креольского танго"
01.40 "Багерия"
04.30 "Спасите Грейс"
05.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00 "Тревожное воскресенье"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Единственный мужчина". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Единственный мужчина". Продолжение
16.00 "Субботний вечер"
17.55 "Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.00 "Лекарство для бабушки". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Лекарство для бабушки". Мелодрама. Окончание
23.25 "Девчата"
00.05 "Прячься". Триллер
01.50 "Каникулы в Вегасе". Комедия
03.50 "Санитары-хулиганы"

### НТВ

05.25 "Сердца трех", 1-я и 2-я серии
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знак судьбы-2". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Последнее слово"
23.55 "Нереальная политика"
00.25 "Влюбленный Шекспир". Мелодрама
02.50 "Инопланетянин". Драма

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Музыка на канале**
**07.45 "В одно прекрасное лето"**
**09.15, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**09.30 Третий звонок. Спектакль. Эдуардо де Филиппо "Женщина, которая не умеет плакать"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 Эпос "Урал батыр"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**16.55 Первенство России по футболу. II дивизион. Зона "Урал-Поволжье". "Уфа" (Уфа) - "Химик" (Дзержинск). Прямая трансляция**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.30 "Полезные новости"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Следопыт"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Моя ласковый и нежный зверь"**

## 19 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Годен к нестроевой"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ералаш"
13.00 "Одиноким предоставляется общежитие". Лирическая комедия
14.40 "Крепкий орешек: возмездие". Боевик
17.00 "Призвание". Ежегодная премия лучшим врачам
19.00 "При загадочных обстоятельствах"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Познер"
00.05 "Соучастник"
02.15 "День рождения"
04.05 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.50 "День свадьбы придется уточнить"
07.40 "Сам себе режиссер"
08.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
09.00 "Утренняя почта"
09.40 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Единственный мужчина". Сериал"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Единственный мужчина". Продолжение
16.00 "Смеяться разрешается"
17.55 "Любовь до востребования". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Только любовь". Мелодрама
22.55 "Специальный корреспондент"
23.55 "Список контактов". Криминальная драма
02.00 "Надувательство"
04.00 "Городок"

### НТВ

05.05 "Сердца трех", 3-я, 4-я и 5-я, закл. серии
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знаки судьбы-2"
15.05 "Свой игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "История всероссийского обмана. Выход есть!"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "22 июня. Роковые решения"
23.45 "Игра"
00.45 "Истребители Люфтваффе. Восточный фронт"
01.45 "Авиаторы"
02.15 "Главная дорога"
02.50 "Квентин Дорвард". Приключения

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**08.20 "Кадриль". Спектакль**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 Башкирский войлок на Фестивале национальных культур "Содружество"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Праздник курая-2011". Гала-концерт**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Волшебный курай"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Любимое дело"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Паблисити"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Вечер.com"**
**23.45 "Прекрасная ложь"**

**"АФАРИН"** ижад студияһы башҡорт телендә сығарылыш кисәләре, туйҙар, юбилейҙар, реклама акциялары, балаларҙың тыуған көндәрен ойоштора. Байрам залын шарҙар һәм туҡымалар менән биҙәйбеҙ. Шулай уҡ бәләкәстәрҙе байрамға әҙерләйбеҙ - бейергә, йырларға, ҡурайҙа уйнарға, шарҙан төрлө уйынсыҡтар яһарға өйрәтәбеҙ.

**Телефондар: 251-14-76, 8-937-335-52-35, 8-917-400-68-94. www.afarin-ufa.ru**

* * *

Финанс университеты филиалының Өфө финанс-иҡтисад колледжы тарафынан **Фәрхетдинова Гөлназ Әсхәт ҡыҙы** исеменә бирелгән **6134**-се һанлы студент билеты юғалыу сәбәпле, ғәмәлдән сыҡҡан тип иҫәпләргә.

АЙЫҠ АУЫЛ

**Башҡортостанда Себер федераль университеты (Красноярск) профессоры Виктор Кривоногов "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашыусы ауылдарҙың ҡайһы берҙәрендә айыҡлыҡ буйынса семинарҙар үткәрҙе. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте белдереүенсә, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаусы билдәле ғалим менән осрашыуҙар үҙенең ҡорона мендән ашыу халыҡты, ауыл биләмәләре башлыҡтарын, мәктәп директорҙарын, уҡытыусыларҙы, табиптарҙы йыйған.**

# НАСАРЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## яҡшы ғәҙәт тә тиҙ йоғоусан

Республиканың "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыусы 100 ауыл исемлегендә Ауырғазы районының Мораҙым ауылы ла бар. Виктор Кривоногов менән булған осрашыуҙарҙың иң аҙаҡҡыһы тап ошо ауылда үтте. Боронғо тарихлы был төҙәк, матур ауылда бөгөн 860 кеше йәшәй. Бик борондан үҙенең көрәшселәре менән дан тотҡан Мораҙымда хәҙер мәҙәни тормош бөтөнләй һүнеп ҡалған, тинһәң дә була, элекке клуб авария хәлендә, ә төҙәлә башлаған социаль-мәҙәни үҙәктә һаман да эш тамамланмаған. Шулай ҙа ауылда уҡытыусы-тренер Илдус Нәҙершин етәкселегендәге көрәш секцияһына 30-40-лап кеше йөрөй, дини юлға баҫыусылар күбәйә. Мораҙым ауылы ҡараған Михайловка ауыл советы башлығы Нил Закир улы Ҡудашев әйтеүенсә, кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған ниндәйҙер шөғөл таба алмауҙан да эсеүе ихтимал. Шуға ла социаль-мәҙәни үҙәк менән проблеманы хәл итеү, спорт секцияларын әүҙемләштереү мәсьәләһе бында тәүге урындарҙың береһендә тора.

Виктор Кривоногов Башҡортостанда башланған был конкурстың масштаблығына һоҡланыуын белдереп, был сараны Рәсәйҙә халыҡты айыҡлыҡҡа саҡырыусы иң уникаль проект, тип билдәләне. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте рәйестәше Роберт Дәүләтшин әйтеүенсә, Кривоногов булған ауылдар араһынан бигерәк тә Күгәрсен районының Мораҡ ауылында, Баймаҡ районының Буранбай ауылында, Стәрлебаш районының Ҡабыҡҡыуыш ауылында, Ишембай районы ауылдарында был эшкә әүҙем, иң мөһиме, мөмкин тиклем бар халыҡты йәлеп итеп тотонғандар. "Халыҡты айыҡтырыуҙың иң тәүге шарттарының береһе - ауылда спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу тора", тигәйне Виктор Кривоногов лекцияларында. Был ауылдар халыҡты ағыулаусыларҙы һөйләшеүгә саҡырып, уларҙы был яман эштәренән тыйыуға өлгәшә алған да инде. Закон ҡарамағынан беҙҙең уларҙы тыйырға хоҡуғыбыҙ юҡ, тигән һылтау тапҡан етәкселәргә уларҙан өлгө алырға саҡырабыҙ.

Закон тигәндәй, бер кемдең дә лицензияһыҙ алкоголле эсемлек һатырға хоҡуғы юҡ, шәхси магазинда араҡы, һыра һатырға рөхсәтте лә район етәкселеге бирә, тимәк, барыһы ла район хужаларының үҙ ҡулында. Хәйер, был эштә ниндәй закон тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин? "Үҙ-үҙенә ҡул һалған кешене бер халыҡ та аҡламай, ә кеше ғүмерен ҡыйыусы - иң ҡурҡаҡ, имәнес йән иҫәпләнә. Араҡы һатып, башҡаларҙы ағыулап үлтереүсе кеше лә оло енәйәт яһаған яуызға тиң", - ти ғалим да. Кеше булараҡ, самогон, алкоголь суррогаттары һатыусыларға, әсәйемде, иремде, баламды эсермә, тигән талап ҡуйырға һәр кемдең мораль хаҡы барҙыр, моғайын.

-Бөгөнгө көндә Башҡортостандағы эскелек ситуацияһы Рәсәйҙәге хәлдән айырылмай, шуға ла халыҡтың эскелектән арыныуға ҡарашы ла бер үк. Шуға ла беҙгә был сирҙе еңеү өсөн бергә булырға кәрәк. Лекцияларымдан һуң кешеләрҙең уйлана төшөүен күреп, был насар ғәҙәттән йәлап ҡотола алырбыҙ, тип ышанам, - ти Виктор Кривоногов. - Иң тәүҙә йәмғәт фекерен формалаштырыусылар - уҡытыусылар, табиптар, етәкселәр мәҙәни эсеүҙән туҡтап, айыҡ тормош алып барырға һәм йәштәрҙе сәләмәт йәшәү рәүешенә йәлеп итергә тейеш. Студенттар менән эшләү ҙә мөһим, сөнки улар иң аҡыллыһы, иң һәләтлеһе һәм тап улар киләсәктә милләттең элитаһы буласаҡ кешеләр. Юғары ҡатлам үҙе айыҡҡан осраҡта ғына халыҡты эсеүҙән тыя аласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Айыҡ ауыл" конкурсы башланыуға ике ай самаһы ғына ваҡыт үтһә лә, республикала байтаҡ эштәр эшләнеп өлгөрөлгән. Виктор Кривоноговтың лекцияларын тыңлағандан һуң ҡайһы бер район хакимиәттәренең буфет кәштәләренән спиртлы эсемлектәр алынған, айыҡ һабантуйҙар үткәрергә ҡарар ителгән. Спиртлы эсемлектәрһеҙ туйҙар, юбилейҙар үткәреү ҙә ғәҙәткә әйләнеп бара хәҙер. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте тырышлығы менән баш ҡалала уҡыу йорттарына йөҙ метрҙан яҡын урынлашҡан 150 киоскыла һыра һәм тәмәке һатыу туҡтатылған. Тимәк, насар ғәҙәт кенә түгел, яҡшыһы ла башҡаларға тиҙ йоғоусан. Әйткәндәй, "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте 23 июндән 26 июнгә тиклем Бөрйән районының Байназар ауылы эргәһендәге Ологужа туристик туҡталҡаһында беренсе айыҡлыҡ слеты уҙғарасаҡ. Унда төрлө семинарҙар, дәрестәр, айыҡ күңел асыу саралары ойоштороласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ЕТЕ РАЙОН

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Дим.** 12 июнгә район мәктәптәрендә "Өфө - ваҡиғалар һәм үҙгәрештәр күҙгәһә", "Башҡортостан - дуҫлыҡ крайы" тип аталған фотоконкурстар, "Данко" балалар һәм үҫмерҙәр клубтары берләшмәһендә һүрәттәр күргәҙмәһе, 11 июндә "Яратам һине, Өфө!" тип аталған йәштәр байрамы, ә шул көндө көндөҙгә сәғәт берҙә Һабантуй байрамы үтәсәк.

**Калинин.** 12 июндә "Моторҙар эшләү" Мәҙәниәт һарайы майҙанында байрам программаһы, район һабантуйы уҙғарыласаҡ.

**Киров.** 11 июндә кис С.Т. Аксаков исемендәге баҡсала 80-се йылдарҙың ретро-дискотекаһы булһа, 11-13 июндә Дуҫлыҡ монументы районында пляж волейболы буйынса турнир үтәсәк. 12 июндә 9.30 сәғәттә Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалынасаҡ.

**Октябрь.** 12 июндә М. Ғафури исемендәге Үҙәк мәҙәниәт һәм ял паркында еңел атлетика кросы, "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында пляж волейболы, көрәш буйынса ярыштар уҙғарыла. Шунда уҡ төрлө байрам саралары, һабантуй үткәреү ҙә планлаштырыла.

**Орджоникидзе.** 11 июндә Яңы Черкассы ауылының мәҙәниәт йортонда, 12 июндә 12 сәғәттә С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда байрам концерттары уҙасаҡ. Шул уҡ көндө Иҫке Турбаҫлы ауылында балалар асфальтҡа һүрәт төшөрөү буйынса ярышасаҡ.

**Ленин.** 11 июндә сәғәт 2-лә "Йәдкәр" мәҙәниәт һарайында "Дуҫлыҡта һәм татыулыҡта" тигән байрам программаһы, 12 июндә сәғәт берҙә "Тулҡын" скверында халыҡ байрамы ойоштороласаҡ.

**Совет.** 12 июндә сәғәт 1-ҙә И. Яҡутов исемендәге паркта "Йәшә һәм сәскә ат, баш ҡалам!" тигән байрам программаһы, рыцарҙар турниры, "Атай, әсәй һәм мин - спорт ғаиләһе" ярыштары үтәсәк.

НИҘӘР БАР?

# АУЫҘЫҢДЫ ҮЛСӘП АС...

## ҡулыңды ла тыйып тор

**29 апрелдә Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев илдең популяр интернет-ресурстары вәкилдәре менән осрашып, уларға инеүселәр ҡалдырған комментарийҙар өсөн киң мәғлүмәт сараларының яуаплылығын ҡайтанан ҡарарға ҡушҡайны. Ошо көндәрҙә ул РФ Коммуникациялар һәм элемтә министрлығына 1 августа тиклем интернеттағы материалдарға комментарийҙар өсөн киң мәғлүмәт сараларының яуаплылыҡ сиктәрен билдәләп, төҙәтеүҙәр әҙерләүҙе йөкмәтте.**

Был идеяны Рус православие сиркәүе (РПЦ) лә күтәреп алды. "Абруйлы матбуғат саралары сайттарынан ыҙғыш һәм дошманлыҡ сәсеүсе әҙәпһеҙлекте, яла ягыуҙы, экстремистик сығыштарҙы алып ташларға кәрәк", - тине РПЦ-ның Синодаль мәғлүмәт бүлеге рәйесе Владимир Легойда. Уның фекеренсә, бөгөн интернет-дискуссияларҙа барған фекерҙәрҙең еңел-елпелеге нормаға һыймаған аралашыуға һәм түбәнһетеүҙәргә килтереп, емергес тәьҫир итә. Шуға ла сайттарындағы комментарийҙар өсөн яуаплылыҡты киң мәғлүмәт сараларына йөкмәтеүҙе "цензураны кәтгиләштереү йәки гайкаларҙы ныҡытып бороу" тип түгел, ә элемтә селтәренең мәҙәниәтен күтәреүгә бер аҙым тип ҡарарға кәрәк.

Был йәһәттән быйыл мартта Роскомнадзор киң мәғлүмәт сараларындағы материалдарҙы һәм уҡыусыларҙың уларға ҡарата комментарийын тикшереүҙең автоматик системаһын әҙерләүгә тендер иғлан итте. Яңы система ярҙамында улар киң мәғлүмәт сараларының һәм бәхәс объекттары мониторингын ҡарап ултырыуҙан азат буласаҡ, йәғни был эште компьютер үҙе башҡарасаҡ.

Нисек кенә тиһәк тә, һәр яңылыҡтың онотолған иҫкелек булыуы һәр кемгә мәғлүм. Элек цензура көслө була торғайны, әммә хәҡиҡәтте халыҡҡа еткерергә теләүселәр эзоп теле менән булһа ла теләгән бойомға ашыра белде. Һөҙөмтәлә һарыҡ та тук, бүре лә иҫән ҡалды. Бер саҡ килеп демократия тип лаф орҙоҡ, әммә уның ысын асылын берәү ҙә белмәне, һөҙөмтәлә бәйһеҙ, бәйелһеҙ йәмғиәт өсөн бәйһеҙ демократия тыуҙы. Әммә йылдар һәр нәмәне үҙ урынына ултырта һәм хәҙер килеп барыбер ҙә самалы цензураның ниндәйҙер кимәлдә урынлы булыуы раҫлана.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Сергей Железняк, РФ Дәүләт Думаһының мәғлүмәт сәйәсәте, мәғлүмәт технологиялары һәм элемтә буйынса комитет рәйесе:** Бөгөн күп сайттарҙа модерациялауҙың ыңғай һәм бай тәжрибәһе тупланған. Мәҫәлән "Эхо Москвы" сайтында "пожаловаться" тигән төймә бар. Әгәр комментарийҙа насар, мыҫҡыллаусы һүҙҙәр бар икән, сайттың администрацияһы тексты төҙәтергә йәки уны бөтөнләй алып ташларға хоҡуҡлы.

**Илфат Ишмөхәмәтов, веб-администратор:** Һәр сайттың хужаһы үҙ сайтындағы мәғлүмәт өсөн яуаплы булыуы аныҡ аңлашыла. Әммә Конституцияға һәм Рәсәй ҡанундарына тура килмәгән мәғлүмәтте генә тыйырға мөмкин. Сайттар, ғәҙәттә, ниндәйҙер йүнәлешле була һәм ул баҫылған материалдарҙа ла сағылыш таба. Ә ҡулланыусыларҙың комментарийҙары сайттың йүнәлешенә тура килергә лә, килмәскә лә мөмкин. Әммә унда кемдер власҡа ҡаршы, законға ҡаршы, шәхесте, милләтте кәмһетеп яҙа башлаһа, мин, сайттың администраторы булараҡ, уларҙы юйырға һәм артабан бындай күренештәр булмаһын өсөн барыһын да эшләргә бурыслымын. Был бындай яҙыуҙар ғәҙәти күренеш булған төрлө форумдарға ла ҡағыла. Сөнки администратор законға буйһонорға тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерлебеҙҙе - **Солтанғолова-Иҙелбаева Фәннүр Миңнехәт ҡыҙын** тыуған көнө - юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

Оҙаҡ йылдар буйы ул Ишбирҙе ауыл хакимиәтенең эштәр идарасыһы булып эшләп, хаҡлы абруй ҡаҙанды. Кешелекле, кеселекле, ярҙамсыл, изге күңеллелеге менән ул ауылдаштарының һәм туғандарының ихтирамын яуланы.

Фәннүр Миңнехәт ҡыҙына киләсәктә лә абруйлы, ғәҙел һүҙе, изге ғәмәлдәре менән туғандарына өлгө һәм терәк булып йәшәүен, иҫәнлектә-һаулыҡта, бәрәкәттә, муллыҡта оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер кисереүен теләйбеҙ.

**Атаһы, әсәһе, бөтә туғандары исеменән Өфөлә йәшәүсе һеңлеһе Фәүзиә һәм уның ғаиләһе.**

АТЫҢ КЕМ?

# БӘЛӘКӘЙҘӘН ҮК...
## исемдәрен ятаһындар

**Баш ҡалабыҙҙа йәшәүсе Раушания менән Айрат Сабитовтарҙың күркәм ғаиләһендә ҙ теләндә иркен аралашып, Тамъян менән Айсын исемле малай һәм ҡыҙ үҫеп килә. Балаларға ни өсөн был исемдәрҙе һайлауҙары тураһында Раушания апай һөйләй:**



- Тормош иптәшем Тамъян ырыуынан булғанға күрә, исеменән үк ҡайһы ырыуҙан икәне аңғырап торһон өсөн улыбыҙға ошо исемде һайланыҡ. Тамъян - шаян, шуҡ, йомшаҡ күңелле малай. Киләсәктә улыбыҙ ырыуыбыҙҙың батырҙар һанын тулыландырыр, тип ышанабыҙ. Айсын ҡыҙыбыҙға исемде үҙем һайланым. Башҡорт исемдәре китабынан башта уҡ ошо исемгә туҡталдым, нисектер, боронғолоро, һирәклеге менән үҙенә йәлеп итте. Тик "сын" ялғауы арҡаһында туғандарыбыҙ ҡаҙаҡ исеме кеүек яңғырай, тип башта ҡаршы төштөләр. Айсын - ул боронғо башҡорт исеме, халҡыбыҙҙа был исем элек тә булған, ләкин һуңғы йылдарҙа һирәк ҡушылған. Мәғәнәһенә килгәндә, ай һынлы, матур, һылыу тигәнде аңлата. Айсын - иркә, наҙлы ғына ҡыҙ, бейергә, йырларға ярата.

Ҡыҙыбыҙ исеме тураһында әле аңлап етмәй, әлбиттә. Ә бына Тамъян исемен бик ярата, сөнки уны күргән һайын: "Исемең бигерәк матур!" - тип әйтеп кенә торалар. Ҡайһы саҡта Шәғәле Шаҡман тип тә ебәрәләр. Шундай матур һүҙҙәр ишеткәндән һуң нисек исемендә ятамайһың инде! Шуға күрә, миңенсә, балаға матур яңғырашлы, мәғәнәле исем ҡушырға кәрәк. Ул бәләкәйҙән үк исеменең күпте аңлатҡанын белеп үҫергә тейеш. Киләсәктә балаларыбыҙ исемдәренә тап төшөрмәй, ырыуыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың данлыҡлы ул-ҡыҙҙары булып үҫеп етер, тип ышанабыҙ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Пол-литр

Элек ауылда бер нисә кешегә бер сепаратор булған. Уның йүнәтеүсеһе лә булған. Бер ваҡыт бер әбей сепараторын ҡырҡтартмасынан йүнәттереп алған һәм хаҡын һораған. Оҫта "Пол-литр", - тип әйткәс, әбей: "Пол-литр много будет, литр хуатит", - тип литр биреп сығарған.

### Бер үҙемә ауыр булыр

Мәйгәште ауылында башҡортса таҙа белгән урыҫтар йәшәй. Бер ваҡыт Зайцев Иван Исхаҡ ауылы магазинына ингән. Ҙур, мөһабәт кәүҙәле урыҫты күреп, ауыл ҡатындары: "Быны егеп ер һөргәндә...", - тип көлөшөп һөйләшә икән. Иван: "Бер үҙемә ауыр булыр ул", - тигәс, ҡатын-ҡыҙҙар оялыштан магазиндан ҡасып сығып бөткәндәр.

### Һайғауы һирәк

Әлеге Иван Буранғол магазинына килеп инә. Ауыл ҡатындары быны тикшерә икән. Берәүһе: "Һайғауы һирәк булып ҡуймаһын", - тиген (Башҡортса белеп ҡуймаһын мәғәнәһендә). Шул ваҡыт Иван: "Һайғауы сәпсим юҡ, төшөп китмәгеҙ", - ти икән.

### Башҡорт

Шул уҡ Мәйгәштенән Кисилев Витька армиянан хат яҙа икән: "Вис урыҫтар, башҡорттарҙан бер үҙем".

### Ҡата башы

Өләсәйем мәрхүмә килене менән городҡа (Магнитогорскиға) бара. Урамда бер мәрйә бәләкәс кенә балаһы менән русса һөйләшеп килә икән.

-Бынау ҡата башындай ғына балаһы ла урыҫса һөйләшкән була бит әле, - ти икән өләсәйем.

**Фирүзә ҒӘБИТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Буранғол ауылы.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Бәпембә япрағынан турама

**75 г бәпембә япрағы, 10 г йәшел һуған, 5 г үҫемлек майы, самалап аш һеркәһе, тоҙ, петрушка һәм укроп япраҡтары алырға.**

Әҙерләнгән бәпембә япраҡтарын тоҙло һыуҙа 30 минут торорға. Турарға һәм уға ваҡланған йәшел һуған менән петрушка өҫтәргә. Үҫемлек майы, тоҙ, аш һеркәһе, туралған укроп япраҡтары һибеп бутарға.

### Дегәнәктән турама

**60 г дегәнәк япрағы, 12 г керән тамыры, 20 г йәшел һуған, 8 г ҡаймаҡ, самалап тоҙ алырға.**

Дегәнәк япрағын йыуып, 1-2 минут ҡайнаған һыуҙа тотоп алырға, тишекле сүмес аша һыуын һарҡытырға, ваҡлап турарға. Туралған йәшел һуған, ҡырғыстан үткәрелгән керән тамыры, ҡаймаҡ менән бутарға, самалап тоҙ һибергә.

### Бәпембәнән ҡайнатма

**400 бәпембә сәскәһе, 2 лимон, 1,5 кг шәкәр, 1 л һыу алырға.**

Лимонды ҡабығы менән бергә ҡырҡырға һәм бәпембә сәскәләре менән бергә 10 минут ҡайнатырға. Бер тәүлеккә ҡалдырырға. Массаны һығырға, төнәтмәне һарҡытырға, шәкәр өҫтәргә һәм әҙер булғансы ҡайнатырға.

Лимон урынына лимон кислотаһын да ҡулланырға мөмкин.

### Ирәүәндән (ревень) ҡайнатма

1 кг ирәүән һабағы, 1,5 кг шәкәр, 4 стакан һыу алырға. Һабаҡтарҙы ҡабығынан айырырға, ваҡлап турарға. Бер нисә минутҡа ҡайнар һыуға һалырға һәм һыуыҡ һыу ҡойоп, шунда уҡ һыуытырға. Һыуынан ҡайнар ҡуйы шәрбәт ҡойоп ҡайнатып алырға.

### Ҡара көртмәле һуты

Ҡара көртмәле һутын әҙерләү өсөн (1 кг емешкә 3 стакан һыу) емештәрҙе иҙелгәнсе ҡайнатырға. Һуынан килеп сыҡҡан массаны иләк аша үткәрергә. Килеп сыҡҡан ҡара көртмәле һутын шәкәр һалып ҡайнатырға (1 литр һутҡа 300 г шәкәр) һәм стерилләнгән банкаларға ҡойорға һәм ҡапҡастарын бороп ҡуйырға.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БИТАРАФЛЫҠ...
## ул рухи әшәкелек

Ярты юлда туҡтағансы, эште башламауың хәйерле.

**(Кесе Сенека).**

Ни өсөн кешеләр эштән түгел, ә борсолоуҙарҙан үлә? Сөнки кеше күп эшләмәй, ә күп борсола.

**(Роберт Фрост).**

Үҙһүҙлелек - көсһөҙҙәрҙең берҙәнбер көсө һәм тағы бер көсһөҙлөгө.

**(Артур Шницлер).**

Уға һайларға ҡуштылар: байлыҡмы, аҡылмы? Аҡыллы кеше булараҡ, ул байлыҡты һайланы.

**(Мечислав Шарган).**

Ғаилә - ул суд ултырышы һәм был ултырыштағы фекер алышыуҙар төндә лә тынмай.

**(Малькольм де Шазаль).**

Дуҫтарың һине нисек барһың, шулай ярата, ә ҡатының һине ярата һәм һинән икенсе кеше яһарға тырыша.

**(Гилберт Честертон).**

Әгәр ҙә һин маҡсатыңа табан китеп бараһың һәм һәр юл сатында һиңә ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәргә таш бәрергә туҡталаһың икән, ул саҡта һин маҡсатыңа барып етә алмаясаҡһың.

**(Ф. Достоевский).**

Уйлап та тормайынса минә яуызлыҡ күрһәткән кешегә мин баш әйәм һәм уны иң йомарт һөйөү менән бүләкләйем; ул ни тиклем күберәк яуызлыҡ ҡылһа, мин шул тиклем күберәк изгелек ҡыласаҡмын.

**(Будда).**

Намыҫлы йәшәйем тиһәң, әлләкүпме өҙгөләнергә, бәргеләнергә, хаталанырға, башларға һәм ташларға, тағы башларға кәрәк. Битарафлыҡ - ул рухи әшәкелек.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡурҡыу тураһында шундай риүәйәт бар: "Ҡайҙа китеп бараһың?" - тип һорай бер саҡ ил гиҙеүсе дәрүиш Чуманан. "Багдадҡа китеп барам. Унда минә биш мең кешене яҡты донъя менән хушлаштырырға кәрәк", - ти Чума. Бер нисә көндән һуң дәрүиш тағы ла осрата Чуманы һәм уға: "Һин бит биш мең кешене теге донъяға оҙатам, тигәйнең, үҙең илле мең кешене үлтерҙең", - ти. "Юҡ, мин ысынлап та биш мең кешене генә оҙаттым теге донъяға, ҡалғандары минән ҡурҡыштарынан үҙҙәре үлде".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 2223